ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-4 ғинуар - февраль (һыуығай - шаҡай) 2022

№4 (994)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 1 февралдән 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән - 739 һум 98 тингә ваҡытынан алда яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Бергә булайыҡ!**
**(Теманың дауамын 15-се биттә уҡығыҙ).**
**МӨХӘРРИРИӘТ.**


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Мин ниндәй милләттән?**
Шундай һорау биреүселәр ишәйә түгелме?

3,6

**Егеттәрҙе егет итеп тәрбиәләйек**

8-9

**Ғазаптары менән ғорур ине...**

11

**Еңеүсе исемендәге ауылда...**
еңеүселәр тәрбиәләнә

12

**ТВ-программа** 14


...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨЛӘРҘӘ...

## йылы күл бар

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баш ҡаланың Инорс биҫтәһендә урынлашҡан Йылы күлдең һәм Баландин бульварының тирә-яғын төҙөкләндереү проекты менән танышты.**

Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө идаралығы начальнигы урынбаҫары Ольга Сарапулова проекттың ике этапҡа бүленеүе тураһында һөйләне. Беренсе этапҡа Мушников урамындағы 7/3 һәм 13/8 йорттарынан Йылы күлгә тиклем Баландин бульвары буйындағы территория инә. Бында рөхсәт ителмәгән парковка урынына бер һыҙатлы сквер рәүешендәге йәйәүлеләр юлы, ял урыны, парковка урындары буласаҡ. Тотош биләмәне йәшелләндереү һәм яҡтылыҡ үткәреү, яр буйында төрлө йәштәге балалар өсөн балалар майҙансыҡтары, теннис уйнау урындары, спорт, әүҙем ял майҙансыҡтары, һыу буйында күҙәтеү майҙандарын булдырыу планлаштырыла. Һыу инеү хәүефле булған урындарҙа һыуға төшөү ябыласаҡ. Һыуҙан алыҫтараҡ



ҙур булмаған майҙансыҡ - амфитеатр, өҫтәл уйындары өсөн япмалы майҙансыҡ эшләү планлаштырыла. Унын эргәһендә балалар өсөн ҡом майҙансығы һәм воркаут майҙансығы ҡуҙаллана.

Халыҡ менән аралашыу ваҡытында Радий Хәбиров, территорияны төҙөкләндергәндә кешеләр өсөн уңайлыҡтар булдырыу мөһимлеген, ҡарт ағастарҙы киҫеп, улар урынына йәштәрен ултыртыу кәрәклеген билдәләне. Башҡортостан Башлығы фекеренсә, күлдең тәбиғи асылын һаҡлап ҡалыу зарур. "Минә проект буйынса фекер алышыуҙа биҫтә халҡының әүҙем ҡатнашыуын һәм уларҙың фекере иҫәпкә алыныуын белеүем мөһим ине. Йылы күл территорияһын төҙөкләндереү эшен киләһе йылда тамамларға ниәтләйбеҙ. Бөгөн Инорс биҫтәһе әүҙем үҫә, быйыл 1 сентябргә беҙ бында республикалағы иң ҙур мәктәптәрҙең береһен асасаҡбыҙ", - тине Радий Фәрит улы.

Барлыҡ маршруттар, автомобиль юлдары һәм төп майҙансыҡтар яҡтыртыласаҡ. Бөләкәй архитектура формалары заманса нейтраль стиль буйынса һайланған һәм тәбиғи мөхитте тулыландырып торасаҡ. Проект буйынса скверҙа кофе һәм ризыҡтар һатылған павильон ҡуйыу ҙа күҙаллана. Икенсе этапта Баландин бульвары буйлап Йылы күлдең тирә-яғын төҙөкләндереү планлаштырылған. Бында йәшелләндерелгән ял зоналары булған киң тротуар һалынасаҡ. Баландин бульвары менән Мушников урамы сатында реабилитация үҙәге эргәһендә майҙанды һәм скверҙы төҙөкләндереү ҡарала. Күл тирәләй велосепидсылар, йәйәүлеләр өсөн маршруттар, понтон пирстары һәм һыу буйында ял итеү майҙансыҡтары, пикник урындары, эттәрҙе йөрөтөү һәм күнекмәләр үткәреү урыны, пляж территорияһын үҙгәртеп ҡороу тәҡдим ителә.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

БАШ ҠАЛАМ

# ҺУПАЙЛЫ БИҪТӘҺЕ...

## иң яратҡан районым



**Ун йылдар самаһы элек фатир һатып алыу тураһындағы иғландарҙа "Һупайлы биҫтәһен тәҡдим итмәҫкә", тигән һүҙҙәрҙе йыш осратырға була ине. Ләкин бөгөнгө көндә был район йәшәү өсөн уңайлы, заманса, яйлы биҫтә һанала, фатирҙар ҙа ҡыйбатлана, кеше һаны ла арттандан-арта бара. Был яҙмамда үҙем тыуып үҫкән район хаҡындағы фекерҙәрем менән уртаҡлашҡым килде.**

(Дауамы 2-се биттә).

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ

# БАШҠОРТОСТАНДЫҢ...

## географик үҙәге ҡайҙа?




**Был һорауға яуап табыр өсөн Башҡорт дәүләт университетының физик география һәм ҡоро ер гидрологияһы кафедраһы мөдире, география фәндәре докторы Ауфар Гәрәев һәм кафедра ассистенты Азамат Ниғмәтуллин тикшереүҙәр үткәрә.**

Тикшереү ике төрлө ысул менән башҡарыла. Беренсеһе - дүртмөйөш һәм координаталар ысулы. Бының өсөн географтар республика картаһын бөләкәй дүртмөйөштәргә бүлеп сыға һәм һәр береһенең киңлеге менән оҙонлоғонон координаталарын асыҡлай. Һунынан, килеп сыҡҡан һөҙөмтәне төбәктең дөйөм майҙаны менән сағыштырып, Башҡортостан сиктәренән бер тигеҙ алыҫлыҡта булған нөктәне билдәләйҙәр.

Икенсе ысул иһә параллель йүнәлештәрҙең нисек урынлашыуынан сығып, координаталарҙың уртаса үлсәмен билдәләүгә ҡайтып ҡала.

Ике ысул да бер төрлө һөҙөмтә бирә. Уға ярашлы, Башҡортостандың бөтә сиктәренән дә бер тигеҙ алыҫлыҡта урынлашҡан нөктә Ағиҙел һәм Йылым йылғалары араһында, Архангел һәм Ҡырмыҫҡалы райондары сиктәренән алыҫ түгел ерҙә. Был урынға иң яҡын ауыл - Ғафури районының Ерекле ауылы. Әлеге мәлдә унда иҫтәлекле стела ҡуйылған.

Республиканың географик үҙәге Өфөнән 67,5 саҡрым (тура иҫәпләгәндә) алыҫлыҡта ята.

12+

БАШ ҠАЛАМ



# ҺУПАЙЛЫ БИҪТӘҺЕ...

## иң яратҡан районым

(Башы 1-се биттә).

Бөгөн Һупайлы - Өфөнөң башҡа райондары менән сағыштырғанда йәш район. Уҙған быуаттың 70-се йылдарында ғына әле ул яҙғы ташҡындарҙа һыу аҫтында ҡалған, баҫыуҙары йәйрәп ятҡан бәләкәй генә ауыл булған. Ә бөгөн иһә бында күп ҡатлы йорттар ҡалҡып сығып, төрлө социаль объекттар төҙөлөп, күп кеше йәшәү өсөн ҡулайлаштырылған заманса биҫтә. Ял итергә матур парк һәм скверҙарыбыҙ бар. Ағиҙел яры буйында унайлыҡтар тыуҙырылған, ләкин бына Ҡариҙел йылғаһына яҡын барырлыҡ түгел. Йылдан-йыл халыҡ иҫәбе арта, фатир хаҡтары ла бөгөнгө көндә баш ҡаланың үҙәгенән айырылмай тиерлек.

Һәр ҡаланың, уның составындағы һәр райондың үҙенә генә хас проблемалары, хәл ителәһе мәсьәләләре була. Беҙҙең Һупайлы ла был ҡағиҙәнән ситләшмәй. Минең өсөн иң актуаль мәсьәлә - машина ҡуйыу өсөн урындарҙың булмауы. Күп ҡатлы йорт ихаталары күп автомобиль ҡуйыу өсөн ҡулайлаштырылмаған, ихаталар тар һәм бәләкәй. Ә хәҙер һәр фатирҙа, кәмендә, икешәр еңел автомобиль булыуын иҫәпкә алғанда, проблеманың ниндәй киҫкен тороуын күҙ алдына баҫтырырға була. Ошо сәбәпле тығындар барлыҡҡа килә. Ә Һупайлы аша Өфөнөң төньяғы менән Салауат Юлаев проспектын бәйләгәс, тығындар тағы ла артты. Мәсьәлә хәл итеүҙе көтә. Юл темаһын тамамлап, Һупайлынан үҙәккә сыҡҡан тауға ҡышҡы миҙгелдә айырыуса иғтибар бүленһә ине, тигән теләгемде еткерәм. Машина, автобустарҙың күтәрелә алмай ултырыуҙары ғәҙәти күренеш.

Биҫтәлә балалар өсөн унайлыҡтар тыуҙырылған - балалар баҡсаһы һәм мәктәптәр етерлек, шулай уҡ балалар майҙансыҡтары ла күп. Ләкин яҙлы-көҙлө ямғырҙан һуң барлыҡҡа килгән ҙур күләүектәр балаларға ла, ололарға ла ҡамасаулауы Һупайлының бер үҙенсәлеге. Һыу ағыҙыусы системалар (ливневка) булмағас, ҡойма ямғырҙан һуң Жуков менән Бикбай урамдары кәмә менән йөҙөп йөрөрлөк йылғаға әйләнә.

Бындағы күп йорттар төҙөлөүгә күп ваҡыт үткән һәм улар капиталь ремонт талап итә. Бындай йорттарҙы эстән дә, тыштан да ремонтлағанда, улар матурайып, районға йәм өҫтәп ултырыр ине.

Яҙғандарымды дөйөмләштергәндә, Һупайлының сағыштырмаса тыныс район, социаль объекттарҙың һәм күңел асыу урындарының етерлек булыуы, йылғаның яҡынлығы оҡшай. Ә биҫтәлә һәр ваҡыт тиерлек ел һәм туҙан уйнауы, йәшеллектең әҙ булыуы күңелгә ятмай. Шулай ҙа Һупайлы биҫтәһе минең иң яратҡан районым.

**Гөлсәскә ӘМИНЕВА.**

БЫЛ АЙҘА...

# СОНТОР, ТИЕП КӘМЛӘМӘЙЕК...

**Ҡыш менән яҙҙы бәйләүсе сонтор ай - шаҡай башлана. Шуғалыр, күрәһең, гинуар вариҫы булараҡ, ошо ай билдәләренә лә әйә: ихтимал, ыжғыр, әсе елдәре, һепертмә бурандары ла, сатлама һыуыҡ көндәре лә булып алыр.**

Икенсе яҡтан, шаҡайҙың был ҡылыҡтары бик оҙаҡҡа һуҙыла алмаҫ, сөнки артынан үксәһенә баҫып килгән көләс март сифаттарының да тәүге "шытымдары" күренә башлай: епшек ҡар һибәләр; мамыҡ мендәр-юрғандай ҡабарып ятҡан аҡ-аҡ ҡар тауҙары ҡояш апай йылыһынан әсәрләнеп, көндән-көн теҙ сүгер; ҡар ҡатламы тығыҙланып, өҫтәре боҙлауыҡ менән ҡапланыр, тимәк, көндәр имшеүгә тартыр. Ләкин Ҡыш бабай ҙа тиҙ генә бирешергә теләмәҫ, төндәрен булһа ла үҙ шөғөлөн ҡуймаҫ: туңаҙытыр, селләһе менән дә шаҡ ҡатырыр - юҡҡа ғына шаҡай тимәгән дә халыҡ был осорҙо. Ҡыштың ҡаршылашып-тартҡылашыуы, епшек ҡарҙы шаҡылдатып туңдырыуы, ҡатырыуы - шул буласыр инде шаҡайҙың төп бурысы.

Был айҙың яҙға тартым тәбиғәтендәге тәүге үҙгәрештәр тағы ла ҡышлауға ҡалған ҡоштар йәнләнеүендә лә һиҙелә: ҡарабаш турғай йыр һуҙа, ә ябай һоро турғайҙар өйкөмләшеп, сырҡылдаша, ем сүпләй; ҡарғалар оя хәстәрләй; тумыртҡа урман яңғыратып "барабан ҡаға"; ай ахырынараҡ аҡыя - ҡыҙыл түштәр төньяҡҡа осоп китәләр, ә мышар турғайҙары, киреһенсә, тыуған яҡҡа әйләнеп ҡайта. Был осор айыу өңөндә урын тығыҙлана: инә айыуҙың балалары тыуа. Төлкө һәм бүреләр туйы башлана, һуйыр уйнай...

Башҡортостанда көндөҙ уртаса һауа температураһы йылы көндәр менән аралаш минус 10-15 градус тирәһе тәшкил итер. Айҙың һуңғы ун көнлөгөнә табан Өфөлә көн яҡтылығы оҙонлоғо 1 сәғәт 57 минут самаһына артасаҡ. Хәйер, һауа торошонан былайыраҡ беҙҙе бөгөн пандемия тәбиғәте борсой. Тажэхмәттең дельтаға ҡарағанда биш-алты тапҡыр тиҙерәк таралыусы 5-се тулҡыны Ер йөҙөнә цунами ише ябырылды. Шаҡай ошо вирус өйөрмәһе эсендә ҡаласаҡ. Сит ил ғалимдары һәм табиптары омикрондың шәп таралыуы эпидемия үренә тиҙерәк артылыуға һәм уның баҫыла барыуына булышлыҡ итәсәк, күптәр был штамды еңелсәрәк үткәрер тигән раҫлауҙарына ҡаршы Роспотребнадзор белгестәре, киреһенсә, омикрондың күпләп мутацияға бирелеүе һәм шуға бәйле уның ауыр һөҙөмтәләргә килтереү ихтималлығы хаҡында иҫкәртә. Өҫтәүенә, ҡайһы бер эксперттар фекеренсә, был осорҙа медицина хеҙмәтләндереүе, дарыу препараттары һәм ковид тестар менән тәьмин итеүҙә, эшсе көстәр ҡытлығы менән бәйле төрлө проблемалар килеп сығыуы бик мөмкин. Ә шулай ҙа, хәтәр-хәүеф нисек кенә һағаламаһын, кешеләрҙең кешелекле булып ҡалыуына өмөт итке килә. Һаҡланғанды - һаҡлармын, тигән бит. Кәрәк-юктан йомош табып, магазиндар буйлап йөрөү, халыҡ араһына һәм бигерәк тә уйныҙ-моңһоҙ сит тарафтарға сәфәрҙәргә сығып китеүҙән тыйылып тороу фарыз аңлы әҙәмдәргә. Омикронды ла бит ана шул ер аяғы ер башы әллә Камерун, әллә Доминикандан "күстәнәс" итеп алып ҡайтты "мысыр хәйерселәре"...

Әйе, ҡурҡыуға, хәүефкә һала был вирус, һаулығы самалы кешеләр өйҙәренән сыҡмай, бикләнеп ултыра. Ләкин яҙ килеүен көтөп, өңөнән башын да сығармай ятҡан байбаҡ (әйткәндәй, яҙмыш көләүе буйынса, 2 февраль Байбаҡ (һыуыр) көнө лә икән әле!) төҫлө мәңге ҡасып-боҫоп йәшәмәбеҙ ҙә һуң! Тыуыр ай ни күрһәтер - яҡынса ла әйтә алмай быны хатта белгестәр ҙә. Яҡшыға өмөт итәйек, бер-беребеҙҙе һаҡлайыҡ, ҡурсылайыҡ, хәүеф-хәтәр генә көтөп ултырмайыҡ. Бер аҙ тормошҡа, тирәяҡҡа күҙ һалайыҡ, яҡшы китаптар уҡыйыҡ, эшлекле кешеләр миҫалына әйәрәйек, күңелгә яҡын шөғөл - эш менән булайыҡ.

Заманалар нисек килеүгә ҡарамаҫтан, кеше һәр саҡ тулы тормош менән йәшәргә, белемгә ынтылған, талант емештәрен тиргән. Ана шундай байтаҡ зыялы шәхестәребеҙ тап ошо шаҡай айында тыуған да бит әле! Ә белеүебеҙсә, был айҙа тыуғандарҙы ғәҙәттә көслө рухлы, талантлы һәм бер нигә ҡарамаҫтан, алдарына ҡуйған маҡсаттарына ҡыйыу рәүештә юл ярыусылар тип йөрөтәләр. Белешмә өсөн: был айҙа Галилео Галилей, Виктор Гюго,



Федор Шаляпин, Дмитрий Менделеев, Борис Пастернак, Василий Чапаев, Рональд Рейган, Стив Джобс, Криштиану Роналду, Борис Ельцин, Мортаза Рәхимов, Рәми Ғарипов һәм башҡалар Һыуғояр йондоҙлоғо аҫтында донъяға килгән. Шулар араһынан беҙҙең өсөн иң яҡыны, шуға күрә лә иң сағыу булып балҡығаны, әлбиттә, Рәми Ғарипов. "Ҡайһы бер шәхестәр беҙгә бөгөнгө геройҙан да бөгөнгөрәк. Тарихтың бер киҫкен мәлдәрендә улар беҙҙең иң яҡын замандаштарыбыҙға әйләнә. Үткәндәге шәхестәр беҙҙең бөгөнгө замандаштарыбыҙға ҡарағанда тәрәнрәк, байыраҡ. Улар киләсәк быуындарҙың да замандаштары", - тип "Көндәлектәр"ендә Рәми Ғарипов, әйтерһең дә, үҙе хаҡында әйткән. Халыҡ шағирының был ҡанатлы һүҙҙәре билдәле әҙәби тәнҡитсе Ким Әхмәтйәнов менән шағир һәм драматург Рафаэль Сафинға ла бәрҙәй үк кимәлдә ҡағылалыр. Был айҙа ошо күренекле шәхестәребеҙҙең өсөһөнөң дә тыуыуҙарына 90 йыл тула.

Шаҡайҙа тыуғандар исемлегенең аҙағындағы "һәм башҡалар" араһында тағы бер сағыу яҙмышлы, бай тормош, күп һөнәр һәм белем эйәһе, уҡымышлы, иманлы һәм баҫалҡы бер һәм берәгәй зыялыбыҙ Нурмөхәмәт Һөйәрғолов хаҡында ла бер кәлимә һүҙ әйтеп китмәү хилаф булыр ине. Филология фәндәре кандидаты, лингвист, ғәрәп тел белгесе Нурмөхәмәт Әлибай улы Стәрлебаш районының Ҡабыҡҡыуыш ауылында 1937 йылдың 9 февралендә донъяға килә. 5 йәшенән атаһы уға ғәрәп телен өйрәтә башлай һәм 10 йәшендә был һәләтле бала Ҡөрьәнде төп нөсхәһендә 7 тапҡыр уҡып сыға! Ә бына

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Коронавирус йоҡтороу осраҡтарының артыуына бәйле, Башҡортостанда ҡарттар йорттары һәм интернаттар ике аҙнаға карантинға ябыла. Хәбәр ителеүенсә, 28 ғинуарҙа республикала коронавирус менән ауырыусылар 570-кә еткән. Пандемия башланғандан алып республикала сирлеләрҙең дөйөм һаны 129 552 кеше тәшкил иткән. Башҡортостанда коронавирустың омикрон штамы менән ауырыуҙың 37 осрағы теркәлгән. Омикрон штамының инкубация осоро - 2-5 көн. Уның тиҙ таралыуын иҫәпкә алып, сирле менән аралашҡандан һуң икенсе көнгә йәки бер көн үткәс уҡ билдәләрҙең барлыҡҡа килеүе ихтимал.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында булды. Республика етәксеһе уҡыу йортон үҫтереүҙең перспективалы йүнәлештәре менән танышты, уҡыу аудиторияларында һәм лабораторияларында булды, шулай уҡ Башҡорт дәүләт педагогия университетының 55 йыллығына арналған Ғалимдар советының киңәйтелгән ултырышында ҡатнашты. Тантаналы сараларҙа барлыҡ санитар-эпидемиологик нормалар үтәлде.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралған осорҙа министрлыҡтарҙа һәм ведомстволарҙа эш осрашыуҙарын һәм кәңәшмәне онлайн режимда үткәрергә ҡушты. Һаулыҡ һаҡлау министры әйтеүенсә, Башҡортостанға 12-18 йәшлек үҫмерҙәр өсөн 2 800 доза "Спутник М" вакцинаһы килтерелеүе көтөлә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, республика халҡына үҫмерҙәрҙе вакцинациялау тураһында аңлатырға кәрәк. Әйткәндәй, бер аҙна уҡыған һуң мәктәптәрҙә уҡыусылар араһында яңы коронавирус инфекцияһы менән ауырыу осраҡтарының артыуы теркәлде.

✓Мәғариф министрлығында прививка яһатмаған балалар өсөн сикләүҙәр тураһында имеш-мимештәргә асыҡлыҡ индерҙеләр. Министр урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева әйтеүенсә, "Прививка һалдырмаған балалар өйҙән уҡыуға күсерелмәй. Улар өсөн ниндәйҙер сикләүҙәр индереү хаҡында һүҙ бармай". БР һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һүҙҙәренсә, вакцинация алдынан баланы педиатр тикшерә. "Беренсе һәм икенсе тулҡында үҫмерҙәр коронавирусты еңел формала үткәрҙе, артабанғы тулҡында балаларҙы интенсив терапия бүлектәренә һалырға тура килде", - тине министр.

✓ *Башҡорттарҙа ла элек-электән шулай килгән ул. Күрше ҡаҙаҡтар менән ҡоҙалашып йә уларҙан ҡыҙ урлап, килен итеп алыу осраҡтары ла йыш булып торған. Әммә шул килендән тыуған балалары барыбер ҡаҙаҡҡа әйләнеп китмәгән.*



ҡасан һәм нисек ул Дамаск Ислам университетында (Сирия, 1993) белем эстәп, имам һәм ғәрәп теле уҡытыусыһы сертификатына эйә була ла, Иордан университетында (Амман, 1995) стажировка үтергә өлгөрә икән һуң! Бер үҙенә күпме һөнәр һәм ваҡиғаларға бай ниндәй уникаль яҙмыш! Н.Һөйәрғолов 14 йыл буйына Ишембайҙағы 2-се Башҡорт республика гимназия-интернатында ғәрәп теленән уҡыта, Рәсәйҙә тиңе булмаған "Ғәрәп теле кабинеты"н аса. 1994 йылда Нурмөхәмәт Әлибай улына Ҡөрьәнде башҡортсаға тәржемә иткәне һәм баҫып сығарыуҙа ҡатнашҡаны өсөн Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы бирелә. Филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың мәғариф отличнигы Нурмөхәмәт Һөйәрғоловтың Ҡөрьән буйынса филологик тикшеренеүҙәре, ғәрәп телен уҡытыу методикаһы буйынса иҫәпһеҙ күп һәм төплө хеҙмәттәре, уҡыу әсбаптары баҫылып сыҡҡан. Мәккә һәм Мәҙинәгә (2006-2009) ике тапҡыр хаж ҡылған. 2006-2012 йылдарҙа БДУ-ның Стәрлетамаҡ институтында сит телдәр кафедраһы доценты булып эшләй. Күреүебеҙсә, ғилем эйәһенең тормош юлы - романдарға һыймаҫ бай материал, тик ниңә уның исеме һәм хеҙмәттәре киң ҡатлам уҡыусыға әллә ни билдәләнән түгел? Был айҙа ошо күренекле, шул уҡ ваҡытта ысын мосолманса баҫалҡы, уҡымышлы, күп һөнәрҙәр эйәһе Нурмөхәмәт Һөйәрғоловҡа 85 йәш тула.

Сонтор ай тип шаҡайҙы һис кәмләмәйек, ана ниндәй бөйөк шәхестәр биргән ул донъяға. Шул уҡ ваҡытта күренекле һәм иҫтәлекле даталарға ла бай ғына: **2 февралдә** совет ғәскәре немец-фашист илбаҫарҙарын ҡыйратып, Сталинград һуғышында еңеү яулай (1943). Был айҙа шулай уҡ Ҡатын-ҡыҙ табиптар **(3)**, Бөтөн донъя яман шешкә ҡаршы көрәш **(4)**, Рәсәй фәне **(8)** көндәре, Халыҡ-ара фән һәм гуманизм **(12)**, Бөтөн донъя радио **(13)**, Ғашиҡтар, Компьютерсылар, Халыҡ-ара китап бүләк итеү **(14)** көндәре, Ватан сиктәренән ситтә хәрби бурыстарын башҡарған Рәсәй яугирҙарын иҫкә алыу, Яман шеш менән сирләүсе балаларҙың халыҡ-ара көндәре **(15)**, Изгелек ҡылыу **(17)**, Транспорт полицияһы **(18)**, Республика халыҡ ижады үҙәге ойошторолған **(20)** һәм Халыҡ-ара туған телдәр көндәре **(21)**, Еңелйәт ҡорбандарына халыҡ-ара ярҙам **(22)**, Ватанды һаҡлаусылар **(23)**, БР Дәүләт флагы **(25, 1992 йыл)** көндәре, Бөтөн донъя ҡабаланмай торған көн **(26)**, Ҡыштың һуңғы көнө **(28)**.

**Шаҡайҙа тыуғандар:**

**1** - ҡурайсы, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Түңгәүер" ҡурайсылар ансамблен ойоштороусы һәм уның етәксеһе булған **Сәйфулла Дилмөхәмәтовтың тыуыуына - 85 йыл** (1932-2004).

**3** - халыҡ сәсәне, шағир-импровизатор **Ялан Йәркәйҙең** (Буранбай Ҡотдосов) **тыуыуына - 255 йыл** (1767- ?).

**5** - революцион хәрәкәт эшмәкәре, "Башҡортостан" гәзитенең тәүге мөхәррире **Бәхтегәрәй Шафиевтың тыуыуына - 125 йыл** (1897-1918).

**-** әҙәбиәт ғилеме белгесе, тәнҡитсе, филология фәндәре кандидаты, БАССР-ҙың С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты **Ким Әхмәтйәновтың тыуыуына - 90 йыл** (1932-1980).

**9** - ғалим-лингвист, ғәрәп тел белгесе, тәржемәсе, филология фәндәре кандидаты, спортсы, педагог, С.Юлаев исемендәге БР Дәүләт премияһы лауреаты **Нурмөхәмәт Һөйәрғоловҡа - 85 йәш** (1937).

**10** - журналистика ветераны, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Фәнил Ҡоҙаҡаевҡа - 70 йәш** (1952).

**12** - Башҡортостандың халыҡ шағиры, тәржемәсе, 1967-1972 йылдарҙа "Башҡортостан ҡыҙы" журналының яуаплы сәркәтибе, БАССР-ҙың С.Юлаев исемендәге премияһы лауреаты **Рәми Ғариповтың тыуыуына - 90 йыл** (1932-1977).

**12** - географ-ғалим, Рус география йәмғиәтенең Этнография комиссияһы ағзаһы, география фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Айбулат Псәнчинға - 55 йәш** (1967).

**14** - филология фәндәре кандидаты, педагог, методист, Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институтының башҡорт теле кафедраһы мөдире, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре **Зәкиә Ғәбитоваға - 60 йәш** (1962).

**15** - педагогика ветераны, яҙыусы **Лира Яҡшыбаеваға - 75 йәш** (1947).

**16** - шағир, драматург, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Рафаэль Сафиндың тыуыуына - 90 йыл** (1932-2002).

**26** - РСФСР һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы, РФ һәм БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы, драматург **Илшат Йомағоловтың тыуыуына - 90 йыл** (1932-2007).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# МИН НИНДӘЙ МИЛЛӘТТӘН?

## Шундай һорау биреүселәр ишәйә түгелме?

**Райондарыбыҙҙың береһендә йәшәгән бер ағинәйгә, хаҡлы ялдағы уҡытыусыһына, элекке уҡыусыһы мөрәжәғәт иткән: "Минең атайым башҡорт, ә әсәйем - мәрйә. Апай, әйтегеҙ, зинһар, мин үҙем ниндәй милләттән булам? Үҙемде башҡорт йә урыҫ тип тоймай, аҙашып тик йөрөйөм..." Был ир кеше хатта илар сиккә етеп, ана шул һорауына яуап тапҡыһы килеүен әйткән. Уҡытыусыһы уға: "Әлбиттә, һин - башҡорт", - тип яуап биргән. Мин был ағинәйҙең яуабы менән ҡуш ҡуллап килешәм һәм ошо мәсьәлә тирәһендә бер аҙ фекер йөрөтөп алыуҙы ла кәрәк тип таптым.**

Бик күптәр милләтте кеше үҙе һайлап алырға тейеш, тип һанай. Паспортҡа кем тип яҙҙырһаң да барыберҙер инде ул. Закон тарафынан бында бер ниндәй сикләү юҡ. Әммә Ер йөҙөндәге күпселек халыҡта милләт атаһына ҡарап билдәләнә. Башҡорттарҙа ла элек-электән шулай килгән ул. Күрше ҡаҙаҡтар менән ҡоҙалашып йә уларҙан ҡыҙ урлап, килен итеп алыу осраҡтары ла йыш булып торған. Әммә шул килендән тыуған балалары барыбер ҡаҙаҡҡа әйләнеп китмәгән. Шуға күрә лә, әсәһе мәрйә, немец, негр йә йәһүд ҡыҙы булыуына ҡарамаҫтан, әгәр атаһы башҡорт икән, был кеше башҡорт булып һаналырға тейеш тип уйлайым.

Йәһүд тигәндәй, бына ошо осраҡта, йәғни, атаһы башҡорт булып та, әсәһе йәһүд милләтенән икән, ысынлап та, ғаиләлә ныҡ ҡына аңлашылмаусанлыҡ килеп тыуыуы мөмкин. Сөнки йәһүд халҡы милләтте әсәһенә ҡарап аныҡлай. Ул ғына ла түгел, улар ошо мәсьәләгә бик етди мөнәсәбәт ҡыла. Йәһүдиҙәрҙең фекеренсә, кеше әсәһенә ныҒыраҡ яҡын. Атаһына ҡарағанда ла. Сөнки әсә балаһын туғыҙ ай буйы (кеше булып формалашып бөткәнсе) ҡорһағында алып йөрөй, тыуғандан һуң да тағы күпмелер ваҡыт күкрәгенән айырмай. Милләт мәсьәләһенә шундай ентекле ҡараუҙары ла, бәлки, был халыҡтың йәшәү һәләтлелеген һаҡлап ҡиләләр. Бөтә донъя йөҙөнә таралышҡан был милләт вәкилдәренең Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғас та, бик тиҙ арала йыйылышып, үҙҙәренә айырым бер дәүләт төҙөй һалып алыуы, туған телен һаҡлап ҡалыуы ла күп нәмәгә ишара. Ситкә киткән (хатта үҙ илендә йәшәгәндә лә) беҙҙең бәғзе милләттәштәребеҙ һымаҡ, бүтән халыҡ араһында иреп, милләтен онотоу уларға әллә ни хас түгел.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# КӨН ДӘ - БЕРӘҮ!



**Юҡ, омикрон ҡорбандары тураһында бармай һүҙ. Дөрөҫ, әлеге мәлдәрҙә күп йөҙлә тажзәхмәт сиренән дә хәүефлерәге юҡ, ә шулай ҙа уның "үксәһенә баҫып" килгән тағы бер үлемесле бәлә һағалай кеше ғүмерҙәрен.**

Уҙған ял көндәре генә лә Башҡортостан автоинспекторҙары 600 водителде туктатҡан, 71 юл-транспорт ҡағиҙәһен боҙоу осрағы теркәлгән. Ә инде яңы башланып ҡына торған йылдың тәүге көндәренән алып 180 юл-транспорт һәләкәтендә бөтәһе 260 кеше һәр төрлө йәрәхәт алһа, 24 кешенең ғүмере өҙөлгән. Был хаҡта 24 ғинуарҙа булып үткән оператив кәңәшмәлә республиканың транспорт министры Александр Булашев хәбәр иткән.

Был, тимәк, көн һайын - бер юл ҡорбаны, тигән һүҙ! Сағыштырыу өсөн 17 ғинуарҙан 23-өнә тиклемгә бер аҙнала ғына ла 51 аварияла 6 кеше һәләк булған. Хәйер, былтырғы ошо осор менән сағыштырыу ҙа тыныс юлдар файҙаһына һөйләмәй. Былтыр йыл башынан аварияләр һаны әҙерәк булыуға ҡарамаҫтан (99), юл һәләкәте ҡорбандары, ҡыҙғаныска, күбәрәк (33).

ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре тарафынан даими рәүештә тикшереүҙәр, рейдтар үткәрелеп тороуға ҡарамаҫтан, ни өсөн юлдарҙа аварияләр һәм ҡорбандар һаны кәмемәй? Әлеге шул бер сәбәп: эскән килеш машина йөрөтөүгә баҙнат иткән әҙәмдәр һанының да арта барыуы. Ошо йыл башынан ғына ла юлдарҙа 857 иҫерек йә ҡыҙмаса водитель теркәлгән.

Теркәлгән теркәлеүгә, ә бына уларға ҡарата ниндәй яза саралары күрелгән? Штраф түләп ҡотолғанмы улар? Киләһе осраҡҡа тиклемме? Ә бит ояттарын, намыҫын юғалтҡан бындай әҙәмдәргә ҡаршы ҡәтғирәк, юҡ, уҫалыраҡ яза саралары менән көрәшмәйенсә тороп, улар һаны кәмемәйәсәк икәне билдәле. Ошоға тиклем юғары етәкселек тарафынан яңғыраған сара, әйтәйек, машина йөрөтөүгә таныҡлығын тартып алыу, ҡабатлап тотола икән, иркенән мәхрүм итеүҙән тыш, транспорт сараһын конфискациялауға тиклем яза сараларын ниңә әүҙемерәк ҡулланмаҫҡа? Иҫеректе башынан һыйпау, шелтәләү йәки аҡсалата штраф, юл һәләкәттәренә яңы юлдар ғына аса бит...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2022 йылда БДИ тапшырырға теләүселәрҙең ғаризаларын ҡабул итеү 1 февралдә туктатыла, тип хәтергә төшөрә БР Мәғариф министрлығы. 1 февралдән һуң БДИ тапшырыуға ғаризалар кисерерлек сәбәптәре булған һәм документтар менән раҫланған осраҡта ғына имтиһандар башланырҙан ике аҙна алдан БР Дәүләт имтихан комиссияһы ҡарары менән ҡабул ителергә мөмкин. Бөтә ҡыҙыҡһындырған һорауҙар менән 8(347) 218-03-81 һәм 8(347)218-03-28 телефондарына мөрәжәғәт итергә мөмкин.

✓Башҡортостанда 1 февралдән "Айыҡ ауыл" конкурсының республика этабына ғаризалар ҡабул ителә, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Әлегә иһә муниципаль этап бара, унда 1537 ауыл ҡатнаша. Башҡортостандың иң айыҡ ауылы статусына дәғүә итеүселәрҙең күбеһе - Баймаҡ (89), Ҡалтасы (75), Ауырғазы (73), Дәүләкән (73), Стәрлетамаҡ (67), Шишмә (75) райондарында.

✓Башҡортостан Республикаһы Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһының Балалар уҡыу үҙәге башҡорт яҙыусыһы Гүзәл Ситдиҡованың ижады буйынса конкурс иғлан итте. Был конкурс 24 ғинуарҙан 4 мартҡа тиклем республика китапханаһылары, белем биреү ойошмалары, өҫтәмә белем биреү учреждениелары уҡыусылары араһында ойошторола. Конкурс һорауҙары буйынса мәғлүмәт алыу өсөн телефон: 8 (347) 287-13-34, Гүзәл Маликова.

✓Стәрлетамаҡ районы Ҡырмыҫҡалы ауылы кешеһенең шәхси хужалығында үлгән йорт сусҡаларынан алынған патологик үрнәкте тикшереү һөҙөмтәһендә Африка тағуны вирусы табылған. "Сусҡаларҙың Африка тағунына ҡаршы барлыҡ һаҡланыу саралары күрелһә лә, вирус тәүге тапҡыр республика территорияһына үтеп инде", - тип билдәләй Россельхознадзор. Әлегә сроғы үткән продукция һәм аҙыҡ-түлек ҡалдыҡтары йоғошло ауырыуға сәбәп булған, тип күҙаллана һәм инфекцияны юҡ итеү саралары күрелә.

✓Республика Хөкүмәтендә Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетында төҙөлгән оператив штабтың кәңәшмәһе уҙҙы. Унда яңғыраған мәғлүмәткә ярашлы, боҙ тығындары участкаларында шартлатыу эштәрен башҡарыуға килешеүҙәр төҙөү эше башланған. Муниципалитет етәкселәге ҡатнашлығында халыҡҡа һыу баҫыу хәүефе янауы тураһында хәбәр итеү өсөн команда-штаб күнекмәләре планлаштырыла. Сараларҙың киңәйтелгән планы ғинуарҙың өсөнсө декадаһында ҡабул ителә.

ҠЫҪҠАСА

# ГРАНТ АЛ ДА...

✓ **2022 йылдан Рәсәйҙә ауыл хужалығы етештереүселәре өсөн "Агротуризм" гранты булдырыла. Ауыл хужалығын үҫтереү дәүләт программаһын үҙгәрткән ҡарарҙы хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин раҫланы.** Аграрийҙар 10 миллион һумға тиклем грантҡа иҫәп тота ала. Кесе аграр эшҡыуарлыҡ вәкилдәренең ауыл туризмын үҫтереү проекттарына дәүләт ярҙамы алыу мөмкинлеге бар. "Бындай проекттар туристарҙы ҡабул итеү өсөн биналар төҙөү йәки ремонтлау, эргә-тирәләге биләмәләрҙе төҙөкләндереү, күңел асыу инфраструктураһын булдырыу, туристик ҡоралдар, кәрәк-яраҡтар һатып алыуҙы үҙ эсенә алырға мөмкин", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Хөкүмәттең матбуғат хеҙмәтендә. Проекттың хаҡын ҡаплау ваҡыты биш йылдан артмаҫҡа тейеш. Проектҡа аҡсаның бер өлөшөн эшҡыуар үҙе түләргә бурыслы. Мәҫәлән, 3 миллион һумға тиклем грант алыу өсөн проект хаҡының 10 процентын (5 миллион һумғаса - 15 процент, 8 миллион һумғаса - 20 процент, 10 миллион һумғаса - 25 процент) һалырға кәрәк. Грант өсөн проекттарҙы Ауыл хужалығы министрлығы һайлай.

✓ **"Приоритет 2030" программаһында ҡатнашҡан юғары уҡыу йорттары 200 миллион һумлыҡ грант аласаҡ.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров донъя кимәлендәге Евразия фәнни-мәғариф үҙәгендә ҡатнашҡан һәм "Приоритет 2030" программаһы грантының махсус өлөшөн алған республика вуздарына дәүләт ярҙамы тураһында указға ҡул ҡуйҙы. 2022 йылда фәнни тикшеренеүҙәргә, инфраструктураны үҫтереүгә төбәк бюджетынан субсидия төрөндә 200 миллион һум бүленәсәк. Указға ярашлы, Башҡортостан Хөкүмәте 10 февралгә тиклем грант биреү тәртибен раҫларға һәм төбәк бюджетындағы үҙгәрештәр тураһында закон проектын Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға бирергә тейеш. Бында һүҙ Рәсәйҙең Фән һәм юғары белем министрлығы ведомстваһындағы берләштерелгән Башҡорт дәүләт университеты һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты нигеҙендә барлыҡҡа килгән юғары уҡыу йорто, Өфө дәүләт нефть техник университеты тураһында.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үткәргән аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә ҡулланыусылар кооперацияһы системаһын үҫтереү планы буйынса фекер алыштылар.** Республикала Ҡулланыусылар йәмғиәте союзы үҙенә 127 кооператив ойошманы берләштерә һәм 13 мендән ашыу пайсының мәнфәғәтен яҡлай. Нигеҙҙә улар күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу, йәмәғәт туҡланыуы тармағында эшләй, әҙерләү, етештереү, белем биреү эшмәкәрлеген алып бара. Системаның активында 1200-гә яҡын объект иҫәпләнә. Башҡортостан Республикаһы Сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев әйтеүенсә, 2020 йыл менән сағыштырғанда былтыр Башҡортостан ҡулланыусылар союзы тармаҡ күрһәткестәре өс процентҡа артҡан. Үсештең төп драйверҙары булып йәмәғәт туҡланыуы һәм күмәртәләп сауҙа итеү әйләнеше иҫәпләнә. "Ҡулланыусылар йәмғиәте союзының артабанғы үсешен иң беренсе сиратта ваҡлап һатыуҙы үҫтереүҙә күрәбеҙ. Әле ул 600-ләп магазинды үҙ эсенә ала. Беҙҙең бурыс - 2024 йылға магазиндарҙың иҫәбен меңгә еткереү", - тине Алексей Гусев.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТӘРТИП БУЛДЫРЫЛА

**Мәғлүм булыуынса, үткән йылдың ноябрь уртаһында ер аҫты байлығын файҙаланыу мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссияның ҡарары һөҙөмтәһендә Ҡырмыҫҡалы районында бер нисә ойошманың эше туҡтатылды.**

Комиссия ҡайһы бер ойошмалар ерҙе шул тиклем ҡаҙерһеҙләүен асыҡланы. Ер аҫтын файҙаланыусы булараҡ эш алып барған 21 предприятиеның лицензиялары башлыса 2015 йылға тиклем бирелгән. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тап уларҙың "аппетит"ын йүгәнләргә кәрәклеген билдәләне. Республика етәксеһе Ҙур Талпаҡ күле янындағы карьер эшмәкәрлеген ваҡытында туҡтатыуға булышлыҡ иткәне өсөн Хөкүмәттең вице-премьеры Азат Бадрановҡа рәхмәт белдерҙе. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: "Ибраһим" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт урындағы халыҡты алдап, ҡултамға йыйып, карьер эшкәртергә планлаштырғайны. Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Урал Исҡәндәров ошо көндәрҙә министрлыҡҡа Талпаҡ күле янында махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәһе булдырыу тураһында документтар килеүен билдәләне. Бындай биләмә барлыҡҡа килһә, унда ҡаҙыныу эштәре бөтөнләй тыйыласаҡ.

"Әммә мине Баймаҡ районындағы хәл борсоуға һала. Бер айҙан ниндәй эштәр башҡарылғаны хаҡында доклад көтәм", - тине республика Башлығы. Билдәле булыуынса, ноябрҙә ведомство-ара комиссия ултырышында Баймаҡ ҡалаһы һәм Күсей ауылы янында алтын ҡаҙыған "Таналыҡ" һәм "Графское" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттәрҙең эшмәкәрлеген туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул ителде.

Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры әйтеүенсә, былтыр "Башкиравтодор" йәмғиәте менән килешеү буйынса уларҙың ведомствоһы мониторинглау, анализлау, контролдә тотоу, транспортировкалау системаһын индерә башланы. Шулай уҡ министрлыҡ ер аҫтын файҙаланыу шарттарына үҙгәрештәр индереү тураһында проект булдырҙы. Унда файҙаланыусының транспорт сараларын ауырлыҡты контролдә тотоусы, видеотеркәү, GPS-модулле техник ҡоралдары менән йыһазландырыуы талап ителә.

Республика власының был өлкәлә тәртип булдырыуға йүнәлтелгән саралары файҙалы ҡаҙылмаларҙы етештереүгә һалым күләменең артыуына килтергән. 2019 йылда 119 миллион һум булһа, 2020 йылда - 167 миллион һум, ә былтыр был һан 200 миллионға еткән. Башҡортостан Башлығы билдәләүенсә, ниһайәт, министрлыҡ экологияны яҡлай торған команда булдырыуға өлгәште. "Был мәсьәлә буйынса халыҡтан мөрәжәғәт кәмене, былтыр яҡшы эшләнегеҙ, ошондай йүнәлештә эште артабан да дауам итәйек", - тине Радий Хәбиров.

# РӘМИ ҒАРИПОВҠА АРНАП...

**2022 йылда Башҡортостан Башлығы Указы менән республикала Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың 90 йыллығы билдәләнә. Өфөлә шағирҙың юбилейына арналған сараларҙы әҙерләү һәм үткәреү буйынса ойоштороу комитетының ултырышы уҙҙы.**

"Бик күп саралар (онлайн һәм офлайн) үткәрергә ниәтләйбеҙ. "Китап"та тәүге тапҡыр бер юлы 5 китап нәшер ителә, улар араһында Рәми Ғариповтың ижады, уның хаҡында китаптар ҙа бар. Күптән көтөп алынған ваҡиға - Булат Йосоповтың шағирҙың тормошо тураһында кинофильмы, - тип билдәләне ойоштороу комитеты рәйесе, Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов. - Рәми Ғарипов - ысын мәғәнәһендә халыҡ шағиры, уның ижадын йыш ҡына Есениндың ижады менән сағыштыралар". Саралар планына ярашлы, 11 февралдә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында "Рәми дәресе" берҙәм республика тематик дәресе үткәрелә. Гимназияла Рәми Ғариповтың музей-кабинеты яңыртыла. Башҡортостандың Яҙыусылар союзы Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты менән берлектә Рәми Ғариповтың тормошона һәм ижадына арналған "Йәш ижадсы" конкурсын һәм интернет-викторина уҙғара. 12 февралдә шағирҙың ҡәберенә сәскәләр һалыу һәм Рәми Ғарипов иҫтәлегенә тантаналы митинг планлаштырыла. Рәми Ғариповтың юбилейына арналған шиғриәт кисәһе шағирҙың тыуған яғы Салауат районында ойошторола. М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты Рәми Ғариповтың шиғырҙарын донъя телдәренә тәржемәләү, шағирҙың ижады буйынса буктрейлерҙар республика конкурстарын үткәрә. Юбилей саралары барышында шиғыр ятлаусыларҙың республика конкурсы, Ғарипов уҡыуҙары, туған тел уҡытыусылары өсөн ғилми-методик конференция, "Башҡортостандың йөҙ шағиры" республика әҙәби марафоны, Рәми Ғарипов иҫтәлегенә "Көрәш" республика турниры, волейбол буйынса республика турниры һәм башҡа саралар ойоштороla. Республиканың Мәҙәниәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Өфөлә шағирҙың хәтер кисәһе апрелдең икенсе яртыһында "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була. Булат Йосоповтың "Рәми Ғарипов. Шағир көндәлеге" нәфис фильмының премьераһы көҙ көнө күрһәтелә.

# ЙЫЛҒА АТАМА БИРЕЛДЕ

**Рәсәй Президенты Владимир Путиндың башланғысы буйынса 2022 йыл илдә Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылы тип иғлан ителде. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡортостанда ағымдағы йылды Башҡорт мәҙәниәте һәм рухи мираҫ йылы тип атарға тигән тәҡдим индерҙе.**

"Бындай тәжрибә беҙгә системалы рәүештә эш алып барырға һәм айырым йүнәлештәргә баҫым яһарға мөмкинлек бирә. Аңлашыла, Тарих йылынан һуң Мәҙәниәт йылы килә, сөнки мәҙәниәт фекерләүҙе, киләсәк образын формалаштыра, тип иҫәпләйбеҙ. Мәҙәни мираҫыбыҙ бик бай, ул һаҡсыл мөнәсәбәтте, һаҡлауҙы һәм үҫтереүҙе, патенттар, брендтар кимәлендә нығытыуҙы талап итә. Фольклорҙы ғына түгел, заманса сәнғәтте лә һаҡлау йәһәтенән күп эштәр башҡарырға кәрәк", - тине Дәүләт Думаһы депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова. Уның һүҙҙәренсә, эш планы 900-гә яҡын пункттан тора. Башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәргә һәм райондарға ебәреү өсөн методик тәҡдимдәр әҙерләнә. "Белеүебеҙсә, яҡташтарыбыҙ йәшәгән төбәктәрҙә мәғарифҡа һәм мәҙәниәтҡә һорау ҙур. Пандемия тамамланғандан һуң республикала ғына түгел, унан ситтә лә мәҙәни проекттарыбыҙ менән тулыраҡ шөғөлләнә алырбыҙ тип ышанабыҙ. Башҡорт мәҙәниәте йылын иғлан итеү мәҙәниәтте һаҡлау темаһы тирәләй берләшергә мөмкинлек бирер, тип иҫәп тотабыҙ, беҙҙә был өлкәлә үҙенсәлекле оҫталар, профессиональ коллективтар һәм экспертар күп, беҙҙең бурыс - уларҙы бергә туплау. Булат Йосопов етәкселегендәге мәҙәниәт буйынса комиссия ошондай мәғәнәле, идеологик концептар әҙерләне", - тине Эльвира Айытҡолова.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Башҡортостан Республикаһы Милли архивының төп корпусында күренекле башҡорт композиторы Заһир Исмәғилевтың тыуыуына 105 йыл тулыуға арналған "Башҡортостан музыка сәнғәтенең ғорурлығы" тигән күргәҙмә асылды. Әлеге экспозиция Рәсәй Федерацияһы Президенты Указы менән иғлан ителгән Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылы сиктәрендә әҙерләнде. Күргәҙмә 21 февралгәсә эшләй.

✓Өфөләге В.И.Ленин, С.Юлаев, Совет майҙандарында Яңы йыл байрамы символдарын - боҙ тауҙарын, яңы йыл ҡаласыҡтарын, байрам шыршыларын һәм иллюминацияларын алып ташлау эштәре башланды. "Эпидемиологик хәл ҡатмарлаша, боҙ тауҙарына килгәндәрҙең иҫәбен тикшереү һәм социаль араҡыты һаҡлау мөмкинлеге юҡ", - тип хәбәр иттеләр мэриәның матбуғат хеҙмәтенән.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһындағы 11 белем биреү учреждениеһында 24 ғинуар иртәһендә йәнә эвакуация башланды. Был хаҡта "Башинформ" агентлығына үҙ сығанағы хәбәр итте. "Сценарий" бер үк. Билдәле булыуынса, ҡала үҙәгендә лә, Черниковка биҫтәһендә лә ошондай хәүефле хәбәр таратылған. Урында кинологтар эшләй. Балалар һәм хеҙмәткәрҙәр резерв биналарға эвакуацияланды. Билдәһеҙ кеше йәнә белем биреү процесын туҡтатты һәм баш ҡаланың ашығыс хеҙмәттәрен көсөргәнешле эшләргә мәжбүр итте.

✓Баш ҡала хакимиәте "Төньяҡ", "Төньяҡ-2" һәм "Кала зыяраты №10" зыяраттарында махсус режим индерә. 2022 йылдың 1 февраленән яҙғы юл өҙөклөгө башланғанға тиклем барлыҡ яңы ҡәберлектәр "Кала зыяраты №10"да урынлаштырыласаҡ. "Төньяҡ" һәм "Төньяҡ-2" зыяраттарында муниципаль акттарға ярашлы тәртип буйынса туғандарҙы ерләү генә рөхсәт ителәсәк. Тәҙәлеш эштәре тамамланғас, барлыҡ яңы ҡәберлектәр "Кала зыяраты №10" территорияһында урынлаштырыласаҡ.

✓Өфө - Күмертау - Өфө маршруты буйынса йөрөгән "Орлан" поезына кассала, терминалда йәки ҡушымта ярҙамында билетты алдан һатып алған пассажирҙарҙы ғына индерергә хәл ителде. Билет һатып алыу өсөн qr-код йәки вакцинация йә иһә сирҙе үткәреү тураһында белешмә талап ителә. Пассажирҙарҙың шәхесте раҫлаған танытмаһы ла булырға тейеш. Прививка эшләтергә ярамағанлығы хаҡында белешмә ҡабул ителә, ПЦР-тест һөҙөмтәләре 48 сәғәт ғәмәлдә.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

> ✔ "Пунктҡа килгән кешеләрҙән беҙ документ һорамайбыҙ. Йылыныу, эҫе сәй һәм төнгөлөккә ҡалыуҙың төп шарттары - иҫерек булмаҫҡа һәм башҡаларға ҡарата агрессия күрһәтмәҫкә", - ти Александр.



ТӨРЛӨҺӨНӘН



# ТӨҘӨЛӨШ ЯҢЫРА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөләге Республика балалар гематология һәм онкология үҙәген төҙөү барышы менән танышты. Объект Республика балалар клиник дауаханаһы биләмәһендә урынлашты.**

Үҙәк Г хәрефе рәүешле ете ҡатлы бинанан тора, хирургия корпусына төкәтеп һалына, майҙаны - 17,7 мең квадрат метр. Проектта ун урынлыҡ көндөҙгө стационар, ун урынлыҡ иммунология блогы, һәр береһе 31 койкалыҡ онкология һәм гематология, реанимация һәм ете урынлыҡ интенсив терапия, алты койкалыҡ елек майын күсереү бүлексәләре, операция блогы һәм криоһаҡлағыс бар. Үҙәк милли проект сиктәрендә төҙөлә, унын хаҡы 1,5 миллиард һумға баһалана. Хөкүмәт вице-премьеры, Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һүҙҙәренсә, яңы үҙәктә онкология, гематология, елек майын күсереү һәм интенсив терапия, радиология тикшереүҙәре бүлексәләре, амбулатор-диагностика бүлеге, лабораториялар асыла.

Йыл һайын беҙҙең республикала ғына табиптар 17 йәшкә тиклемге балаларҙа 130-ға яҡын яман шеш осрағын асыҡлай. Башҡортостанда бөтәһе 850-нән ашыу бала диспансер күҙәтеүенә алынған.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Республика балалар клиник дауаханаһының Балалар онкология һәм гематология үҙәге төҙөлөшө подрядсыларҙы конкурс буйынса һайлап алыуҙа ҡатнашыусыларҙың ялыу яҙыуы сәбәпле кисектерелеп килде. Тендерҙа ҡатнашыусыларҙың береһе судҡа мөрәжәғәт иткән, һуңынан Федераль монополияға ҡаршы хеҙмәт тикшереү үткәргән. Балалар гематология үҙәге 2023 йылда сафҡа индерелергә тейеш, ул республикабыҙға бик кәрәк, тип билдәләне Радий Хәбиров. "Беҙ ошо суд низағтары арҡаһында бер йылды юғалттыҡ. Төҙөлөш барышын үҙем контролдә тотасаҡмын", - тине Башҡортостан Башлығы.

# НИНДӘЙ ҺӨНӘР ЯҠШЫ?



**Уҙған аҙнала баш ҡаланың 62-се лицейының 9-сы синыф уҡыусылары Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжында булып, хеҙмәт баҙарында кәрәкле һөнәрҙәр менән танышты.**

- Һөнәр һайлау - һәр кеше тормошонда мөһим этап, шуға күрә уҡыусылар һәм уларҙың атаәсәләре был турала етди уйлана. Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы буласаҡ абитуриенттарға дөрөҫ йүнәлеш бирергә һәм үҙ һөнәрен табырға булышлыҡ итергә тырыша, - ти БР-ҙың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин.

Сарала ҡатнашыусылар профориентацион дәрестә булып, уҡыу йортоноң тарихы, кәрәкле мәғлүмәт сығанаҡтары менән танышты. Колледж уҡытыусылары һөнәрҙәр, уҡыу йортоноң матди-техник базаһы, "Лаборатор химик анализ", "Химик технологиялар аппаратсыһы", "Электромонтаж", "Рекрутинг", "Бухгалтер иҫәбе" һөнәрҙәре буйынса яңы оҫтаханалар һәм "Йәш һөнәрмәндәр" хәрәкәтендә яулаған ҡаҙаныштары, дәрестән тыш эшмәкәрлек менән таныштырҙы. Сара барышында уҡыусылар тетриметрик ысулдар менән һөттөң әселеген тикшерергә, "Графика дизайны"нда Photoshop программаһының мөмкинлектәрен, һүрәттәрҙе эшкәртеү өсөн төп ҡорамалдарҙы ҡулланырға өйрәнде.



# АСАРБАҠТАРҒА...

**Өфөлә асарбаҡтар өсөн йылыныу үҙәге эш башланы. Беренсе йылыныу пункты Ҙур Гражданлыҡ (Большая гражданская) урамында урынлашҡан. Ауыр хәлдә ҡалғандар өсөн ярҙамды Башҡортостан Республикаһының Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы һәм "Аҡтау" социаль адаптация үҙәге ойошторған. Уларға волонтерҙар ярҙам итә.**

Йылыныу үҙәге иҫке ангарҙа ҡуйылған армия палаткаһын үҙ эсенә ала. Унын эсендә буржуйка, йылытыу тубы (Тепловая пушка), бер нисә өҫтәл һәм ултырғыстар, өҫтөндә төрөлгән матрастар ятҡан бейек булмаған урындыҡ урынлаштырылған. Ләкин асарбаҡтар өсөн иң мөһиме - бында йылы икмәк һәм ҡәһүә бирәләр.

"Аҡтау" үҙәге етәксеһе Александр Стовбчатый әйтеүенсә, тәүге көндә тик өс кеше генә килһә, һуңынан уларҙың һаны артҡан һәм ойоштороусының фекеренсә, тағы ла күберәк буласаҡ. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре йылытыу пунктында йоҡларға ҡалған. "Пунктҡа килгән кешеләрҙән беҙ документ һорамайбыҙ, уларҙы ниндәй ҙә булһа исемлеккә теркәмәйбеҙ һәм базаларға индермәйбеҙ. Йылыныу, эҫе сәй һәм төнгөлөккә ҡалыуҙың төп шарттары - иҫерек булмаҫҡа һәм башҡаларға ҡарата агрессия күрһәтмәҫкә", - ти Александр.

Йортһоҙ һәм документһыҙ ҡалғандар, ҡыҙғаныҫҡа күрә, күп, тип билдәләй пунктты ойоштороусылар. Документһыҙ уларҙы рәсми приюттарға алмайҙар, нәҡ шундай ауыр хәлдә ҡалғандар өсөн ошондай пункт ойошторолған да инде. Киләсәктә бөгөнгө көндә бәләкәй генә булған пункттың ҙур приютҡа әйләнеп, ошондай кешеләргә ярҙам күрһәтеүенә ышана улар.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ҠАР ҘА ВАҠЫТЫНДА ЯУА...



**Республикала киҫкен респиратор-вирус инфекцияһы (ОРВИ) менән сирләү эпидемиологик сиктән сығып китеүе, шулай уҡ дауахананан ситтә йоҡторған үпкә шеше һаны бер ни тиклем артыуы күҙәтелә, тажзәхмәттең "дельта" һәм "омикрон" штамдары таралыуын дауам итә. Был хаҡта ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә БР Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина белдерҙе. Ҡала һәм ете район хакимиәтендә, коронавирустың сираттағы тулҡыны таралыуын иҫкәртеү маҡсатында, хеҙмәткәрҙәрҙең 20 проценты ситтән тороп эшләүгә күскән.**

Эш барышы нисек ойошторолоуға ҡарамаҫтан, тормош алға бара һәм кәңәшмәлә көн үҙәгендә торған мәсьәләләр буйынса сығыштар тыңланды. Ҡыш миҙгелендә, әлбиттә, төп урындарҙың береһендә ҡаланы ҡарҙан таҙартыу тора. Йыл башынан алып коммуналь хеҙмәттәр ҡар полигондарына һәм ҡар иретеү пункттарына 795,3 мең кубометр (былтыр - 580 мең кубометр) ҡар сығарған, автомобиль юлдарына һәм тротуарҙарға һибеү өсөн 16 мең тонна боҙлауыҡҡа ҡаршы материал ҡулланған. Хакимиәттең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, ҡала урамдарын, парктарҙы һәм скверҙарҙы таҙартыуға тәүлегенә 300 берәмек техника һәм сменаһына 550 эшсе йәлеп ителә. Берҙәм дежур-диспетчер хеҙмәтенә 1478 мөрәжәғәт килгән һәм уларҙың барыһы буйынса ла сара күрелгән.

Хакимиәттең административ комиссияларының былтырғы эш йомғаҡтары тураһында Граждандар йәмғиәте институттары менән бәйләнештәр буйынса идаралыҡтың бүлек начальнигы Руслан Баһауетдинов сығыш яһаны. Уҙған йылда ете районның административ комиссиялары барлығы 50 650 материал ҡараған, улар буйынса 62 миллион 244 мең һум штраф һалынған, 43 миллион 790 мең һум түләтелгән. Республика бюджетына - 3 миллион 252 мең һум, ҡала округы бюджетына 40 миллион 539 мең һум ингән. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда комиссиялар ҡараған материалдар - 1, ә һалынған штраф күләме 2020 йыл менән сағыштырғанда - 42, былтырғы менән сағыштырғанда 25 процентҡа артҡан. Иң күп штраф транспорт сараларын йәшелләндереү урындарында һәм сүп-сар йыйылған майҙансыҡтарҙа парковкалаусыларға һалынған.

Пандемия ваҡытында карантинда ултырыу ярҙам иткәнме, башҡа сәбәптәнме, әммә бына былтыр енәйәтселек 2020 йыл менән сағыштырғанда 8,7 процентҡа кәмегән. Енәйәттәрҙең иң күп өлөшөн уғрылыҡ алып тора. Шулай уҡ наркоенәйәттәрҙең ике мең самаһы осрағы асыҡланған, бер йылда законһыҙ әйләнештән 35 килограм наркотик матдә тартып алынған. Башҡортостанға рөхсәтһеҙ килгән 32 сит ил гражданы кире ҡайтарылған, мигранттарҙы ялған иҫәпкә ҡуйыуҙың 300-ҙән ашыу осрағы теркәлгән. Тикшереүҙәр барышында 78 мең литр лицензияһыҙ алкоголь һәм спиртлы эсемлек тартып алынған. Шулай уҡ былтыр ҡала полицияһы меңдән ашыу иҡтисади йүнәлештәге енәйәткә юл япҡан.

Ә һауа торошона килгәндә: зарланырлыҡ түгел, шағир әйтмешләй, ҡар ҙа ваҡытында яуып, ҡояш та ваҡытында йылмайып тора.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡамасау

❖ Ҡулдарға ҡамасау (экзема) сыҡҡанда һырғанаҡ һуты ярҙам итә. Унын һутын ҡулға ыуырға кәрәк. Шулай уҡ ҡыш көнө ылыҫлы ағастарҙың ботаҡтарынан әҙерләнгән дауа ла файҙалы булырға мөмкин. Шыршының ваҡ ботаҡтарын алып, кәстрүлгә тығыҙлап тултырырға һәм бешекләргә. Аяҡты таҫҡа тығып ултырырға, эҫе ҡайнатмаға сепрәкте тығырға һәм ҡамасау сыҡҡан тирене сылатырға. Ҡайнатма һыуып китмәһен өсөн кәстрүлдән өҫтәп ҡойоп торорға. Был рәүешле көн һайын кискә ҡарай 30 минут дауаланырға. Ғәҙәттә, 4-5 тапҡыр ҡабатлау ҙа ауырыуҙың хәлен еңеләйтә.

## Холестерин

Холестерин кимәле юғары булһа, халыҡ дауаһының бер нисә ысулын ҡулланып ҡарарға мөмкин. Мәҫәлән, энәлек (боярышник) емештәрен ҡайнар һыуҙа бешереп, сәй урынына эсергә була. Шулай уҡ уны аштарға ла ҡушырға мөмкин.

❖ Айыу һуғаны йәки урман йыуаһы (черемша листовая) тип йөрөтөлгән бик файҙалы үҫемлек һәр ваҡыт ҡул аҫтында булырға тейеш. Бешкән картуфҡа ҡушып ашағанда айырыуса тәмле. Һаулыҡ өсөн көнөнә 3 тапҡыр 50-шәр мл һутын эсергә, йәки түбәндәге ысул менән төнәтмәһен әҙерләргә була. Айыу һуғанын банкаға тығыҙлап тултырып, өҫтөнә араҡы ҡойорға. 3 аҙна төнәтергә. Дауаны көнөнә ике тапҡыр 25-әр мл, йәки 3 тапҡыр 50-әр мл эсергә була.

❖ Ҡыҙыл миләште даими ашау ҙа холестерин кимәлен төшөрә. Емештәрҙе яңы көйөнә лә, киптереп алып та ҡулланырға була. Шулай уҡ ҡара торма, алма, һарымһаҡ, етен майы, йүкә сәскәһенең онтағы, әрем, бөтнөк, кесерткән, балыҡ майы, ҡара мәрүәр, шыттырылған арыш, бәпембә, һоло, әстерхан сәтләүеге, күркә ите, ҡабаҡ һуты, ҡыҙыл туҡранбаш, тал, гәрсис тә холестерин кимәлен төшөрөүгә булышлыҡ итә.

## Гипертония

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә анар (гранат) һуты файҙалы. Көнөнә 2 тапҡыр, иртән һәм кис, ашарҙан 30 минут алда 50-шәр мл анар һутын даими эсеү яҡшы һөҙөмтә бирә. Ҡан баҫымы түбәнәйә һәм ҡан тамырҙары таҙара.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ *Ул атаһының Y хромосомаһы арҡаһында ир булып тыуған. Ҡартаталарында ла ана шул хромосома борондан тапшырыла килгән. Әгәр был кешенең үҙенең улдары булһа, уларҙа ла, ейәндәрендә лә ана шул "ирҙәр хромосомаһы" буласаҡ.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Баймаҡ районындағы һандыҡ аяҡтарының алғы яғындағы ҡалын, ауыр таҡтаның "канаттары" һырлы булған. Уны ҡатмарлы элементтарҙан торған күп төҫлө биҙәк менән матурлағандар. Деталдәре тулыһынса буялған. Ерлек һәм биҙәк төҫтәре алмаштырылып торған.

1-се Эткол ауылынан булған бер һандыҡ аяғы ерлегендә шәмәхә төп төҫ булараҡ ҡулланыла, уның өҫтөнән араларына ҙур аҡ сәскәләр эшләнгән оҙонса ҡыҙыл фигуралар төшөрөлгән. Канаттарындағы йәшел сәскәләр һары ерлеккә төшөрөлгән. Һандыҡ аяғының урта өлөшөндә оҙонса аҡ фигура һәм ике асыҡ йәшел сәскә шәмәхә ерлеккә эшләнгән. Һары төҫтәге аҫтағы арҡыры йоҡа тар таҡтала ҡыя һыҙыҡтар һыҙылған. Ҡайһы бер урындарында сәскә тажы эргәһенә һабаҡтар төшөрөлгән.



*Һандыҡ һәм урын аяғы. Баймаҡ районы 1-се Эткол ауылы. 1958 й. Рәссамы Г.И. Мөхәмәтшин*

Шул уҡ ауылдағы икенсе бер һандыҡ аяғының өҫкө өлөшө күк, аҫҡы яғы - йәшел. Биҙәктәр ҡыҙғылт һары төҫтә, уларҙың деталдәрендә төп - күк һәм йәшел төҫтәр ҡулланылған. Тояҡтарындағы һүрәт аҫтан өҫкә тиклем һуҙылған, шуға һандыҡ аяғы ҡарауға бейегерәк күренә. Алда һүрәтләнгән осраҡта кеүек, төп фигуралары оҙонса. Иң аҫта арҡыры йоҡа тар таҡтала һыҙаттар бер-береһенә ҡаршы ҡыялатып төшөрөлгән, шуға ҡап уртала өсмөйөш хасил булған. Әйберҙең урта өлөшөндә үҙәктә ҡыҙғылт һары төҫтәге вертикаль һыҙат эшләнгән һәм уртаһына металл ҡулса ҡағылған. Ҡанаттарындағы ҡыҙғылт һары өсмөйөштәрҙә ҡара төҫтәге ботаҡтар төшөрөлгән. Таҡтаның өҫкө өлөшөндә ике яҡ ситендә ике яғы ла үткер, 2 тешле һәнәккә оҡшаш һүрәт төшөрөлгән.



*Һандыҡ һәм урын аяғы. Баймаҡ районы 1-се Эткол ауылы. 1958 й. Рәссамы Г.И. Мөхәмәтшин*

Шул уҡ төбәктән тағы ике һандыҡ аяғына ҙурыраҡ геометрик фигуралар, биҙәк төшөрөлмәгән ерлектәр хас. Биҙәктәре күп төҫлө, ҡапма-ҡаршы төҫтәр бер-береһенә яҡын урынлашҡан. Был рәүешле биҙәлгән ағас шундай уҡ төҫтәрҙәге туҡымаларҙан тегелгән ҡоралған ҡорамалар һәм урындыҡҡа йәйелгән келәмдәргә тап килеп торған. Һүрәтләнгән бер һандыҡ аяғының тояҡтары араһындағы киңлеккә эсенә алты тажлы ҡыҙыл сәскә төшөрөлгән өс түңәрәк (күк һәм ике йәшел) алып торған. Урта өлөшө ҡыя һыҙыҡтарҙан торған биҙәк менән уратып алынған. Ерлегендә күк һәм һары төҫтәр ҡулланылған. Һары төҫтәге ҡанаттарында түңәрәк яҡтары менән тоташтырылған яңы тыуған айҙар төшөрөлгән. Таҡтаның өҫкө яғы төрлө төҫтәге тура дүртмөйөштәр ярҙамында бүлгеләнгән.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# МИН НИНДӘЙ МИЛЛӘТТӘН?

## Шундай һорау биреүселәр ишәйә түгелме?




**(Башы 2-се биттә).**

...Медицина күҙлегенән сығып ҡарағанда, ир кешелә X һәм Y енес хромосомаһы, ә ҡатын-ҡыҙ куҙәнәгендә - бер пар X хромосома була. Әгәр ҡауышыу мәлендә ир кешенең Y хромосомаһы ҡатын хромосомаһының береһе менән ҡушыла икән - малай, ә X хромосомаһы ҡушылһа - ҡыҙ ярала. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, баланың малай йә ҡыҙ булыуы тик ирҙең хромосомаһынан тора. Бербер артлы ҡыҙ тапҡан ҡатынына бәғзе ирҙәрҙең: "Миңә бер малай табып бирергә лә эшкинмәйһең", - тип бурылдауы һис кенә лә урынһыҙ. Көслө заттың ошо өлкәлә бер нимә лә белмәүенән килеп сыға бындай һорау, тимәксемен. Әлеге Y хромосома - быуындан-быуынға күсеп килә һәм бер ваҡытта ла X-ҡа әйләнмәй. Ул фәҡәт атайҙыҡы ғына... Ә инде ҡатын ҡыҙҙағы ике X хромосомаһың атаһыныҡы йә әсәһенеке икәнен айырыу ауыр. Шулай ҙа, әүәлдән ир-аттар аша һаҡланып килгән милләт төшөнсәһе быныҡ менән бәйле түгелдер, тип уйлайым. Сөнки борон генетика тигән нәмәне бөтөнләй белмәгәндәр бит. Әммә был - ҡыҙыҡлы. Тағы ла әлеге уҡытыусыһына мөрәжәғәт иткән ир кешегә әйләнеп киләйек. Ул, ябай итеп әйткәндә, атаһының Y хромосомаһы арҡаһында ир булып тыуған. Ҡартаталарында ла ана шул хромосома борондан тапшырыла килгән. Әгәр был кешенең үҙенең улдары булһа, уларҙа ла, ейәндәрендә лә ана шул "ирҙәр хромосомаһы" буласаҡ. Икеләнеп ултырырға түгел, әлеге әйтелгәнсә, был иптәштең әсәһе йәһүд милләтенән түгел бит... Шундай-бындай һорауҙар килеп тыуманһын өсөн, үҙенең милләте хаҡында баланың аңына бәләкәйҙән һеңдерә барыу кәрәктер тип уйлайым. Был осраҡта, бәлки, был ир кешенең мәрйә әсәһе үҙ милләтен күберәк иҫкә алғандыр ҙа, ә атаһы ошо мәсьәләгә бөтөнләйгә битараф булғандыр...

Хөрмәтле милләттәштәр, "мизалдың икенсе яғына" ла күҙ һалыу кәрәк. Әгәр инде беҙҙең һылыуҙарыбыҙҙың башҡа милләт кешеһенә тормошҡа сығырға уйы бар икән, тыуасаҡ ғәзиздәренең дә үҙ аталарының милләтенә күсеп китәсәген (балаларының башҡорт булмаяҡтарын) күҙ уңынан ысҡындырмаһындар ине улар. Аталары сабыйҙарын Иван, Ваня йә Оганес тип атарға уйлаһа, кемдер әйтмешләй, бер ҡайҙа ла бара алмайһың. Шундай һәм башҡа күп кенә аңлашылмаусанлыҡтар килеп сығыу ихтималлығын иҫтә тотоу кәрәк. Киләсәктә, ҡасан да булһа берәй ваҡыт, ата-бабаларың тотҡан хаҡ динде иҫләп, иман килтереп, бер Аллаһ Тәғәләгә баш эйеп йәшәй башларға теләгең тыуыуы ла бар бит. Ана шул мәлдәрҙә ҡатнаш никахтағы ғаиләлә айырыуса етди ҡыйынлыҡтар булыуы мөмкин (Йәш сағында, уны-быны уйламаҫтан, башҡа диндәге бер егеткә кейәүгә сығып, һуңынан, ологайған көнөндә: "Атайым үҙе хатта мулла булә торғайны. Нишләп мине дини рухта тәрбиәләп, шул әҙәмгә тормошҡа сығыуҙан тыймаған икән?"- тип үкенгән бер апайҙы ла беләм). "Ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫ" тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. "Мөхәббәт" тигән төшөнсәне үҙенсә аңлап, сит яҡҡа сығып китеү мәсьәләһенә ябай ғына ҡараған гүзәлдәребеҙгә арналды был һүҙем. Ә ир кеше, әлеге әйтмешләй, кәләш итеп мәрйәне ала икән - был мәсьәлә, сағыштырмаса, бер аҙ "йомшағыраҡ". Мосолман иргә шәриғәт христиан йә йәһүди диненДә булған ҡатын-ҡыҙға өйләнеүҙе рөхсәт итә итеүгә. Тик был юҫыҡта ла проблемалар килеп сыҡҡылай, йәғни икенсе милләт ҡыҙына өйләнгән башҡорт атайының үҙ балаларында башҡорт милләтенә хөрмәт тәрбиәләй алмаған осраҡтар ҙа етерлек...

Милләт мәсьәләһенә динебеҙҙең ҡарашы хаҡында һүҙ йөрөткәндә, әлбиттә, үҙебеҙҙең фаразлауҙарыбыҙға түгел, ә Аллаһ Тәғәләнең Китабына һәм Бәйғәмбәребеҙҙең с.ғ.с сөннәтенә мөрәжәғәт итергә тейешбеҙ. Изге Ҡөрьәндең "Әл-Хуҙжурат" (Бүлмәләр) сүрәһенең 13-сө аятында Раббыбыҙ әйтә: "Эй һеҙ, кешеләр! Беҙ һеҙҙе бер ир менән бер ҡатындан барлыҡҡа килтерҙек. Бер-берегеҙҙе таныр өсөн һеҙҙе халыҡтар һәм ҡәбиләләр яһаныҡ. Арағыҙҙан Аллаһ ҡаршыһында иң хөрмәтлеһе - иң тәҡүәлелегеҙ..." Ошо аятта күренеүенсә, Раббыбыҙ кешеләрҙе милләтенә ҡарап, береһен икенсеһенән өҫтөн итеп ҡуймай, ә уларҙың иманына, йәғни Үҙенә буйһоноусанлығына ("тәҡүә" - ғәр. "богобоязненность") ҡарап баһалай. Раббыбыҙ ихтыяры менән, барыбыҙҙың да иң тәүге атабыҙ - Әҙәм ғәләйһис-сәләм, әсәбеҙ Һауа радыйаллаһу булыуына икеләнеүселәр юҡтыр, моғайын. Әммә Аллаһ Тәғәлә беҙҙе һуңынан милләттәргә бүлгән, һәр ҡәүемдең үҙенә генә хас тел биргән икән, беҙ, әлбиттә, халҡыбыҙға, уның теленең именлегенә битараф булып ҡалырға тейеш түгелбеҙ. Бәғзе берәүҙәр милләт тураһында күнелдәргә үтеп инерлек һүҙҙәр һөйләп тә, шул уҡ ваҡытта динебеҙ хаҡында бөтөнләйгә шымып ҡалыусан. Ул ғына ла түгел, хатта халҡыбыҙ дингә килһә, милләт булараҡ юғалып ҡалыуы ла ихтимал, тип фаразлаусылар ҙа юҡ түгел. Ә минең ныҡлы инаныуымса, тап Ислам динендә булғаны өсөн дә, Аллаһ Тәғәлә ихтыяры менән тиҫтәләгән быуаттар милләт бөтөнлөгө һәм телебеҙ һаҡланып килгән. Октябрь түңкәрелешенә тиклем барыһы ла Ислам динен тотҡан халҡыбыҙ ҡыҙ биреү, килен алыу мәсьәләһен хәл иткәндә, тик үҙ динебеҙ, йәғни "үҙ йыныҫы" вәкилдәре менән генә тормош ҡоророға ифрат та ҙур әһәмиәт биргән. Ҡатнаш никахтар булмаған тиерлек. Һуңғы быуат осоро, әлбиттә, кешенең милләтенә, ниндәй диндә, хатта бөтөнләйгә динһеҙ булыуына ла артыҡ ҡарап бармайҙар...

Бынан тыш, динебеҙ улдың йә ҡыҙҙың үҙ атаһын белә тороп, икенсе кешене "атай" тип, йәки "мин уның улы (йә ҡыҙы)" тип әйтеүенә ҡырҡа кире ҡараште. Үҙ атаңды "танымау" - оло гонаһ. Шәриғәттә "биологик атай"ға ифрат ҙур роль бирелә икәнен дә һәммә мосолман кеше белергә тейеш. Бына ни өсөн боронғо ата-бабаларыбыҙ үҙ шәжәрәһен төҙөүгә шулай ныҡ әһәмиәт биргән ("шәжәрә" - ғәр. "ағас"). Үҙҙәренең аталарын, ҡартаталарын таныға тейешлекте яҡшы белгән улар. Шуға күрә шәжәрәләрен дә ир енесе буйынса ентекләп барлап, дауам иткәндәр. Боронғо шәжәрәләргә иғтибар итһәк, ғаиләлә тыуған ҡатын-ҡыҙҙың исеме яҙылған "ботаҡ" шунда уҡ туҡталып ҡала. Хәҙерге көндә бәғзеләр ҡатын-ҡыҙҙарҙың шәжәрәһен дә төҙөргә тырыша, әммә ике-өс быуындан ул бөтөнләйгә башҡа ғаиләләрҙең ботаҡтары менән киҫелешеп, барыбер буталып бөтә. Күптәрҙең шәжәрәһен архивтарҙан табып, аяҡҡа баҫтырырға була. Мәҫәлән, борон-борондан беҙҙең ҡартатайҙарыбыҙ ҡулдан-ҡулға тапшырып килгән Һөйөндөковтар шәжәрәһен артабан тулылындырып, камиллаштырып төҙөүҙә тарих фәндәре кандидаты Фуат Сөләймәнов ярҙам итте. Шәжәрә боронғо атабабаларың араһында булған мәшһүр шәхестәр менән маҡтаныу йә ғорурланыу ниәте менән түгел, ә туғандар бер-береһен белһен һәм туғанлыҡ ептәрен юғалтмаһын өсөн төҙөлә. Әйткәндәй, туғандарҙың үҙ-ара бәйләнешен өҙергә ярамағаны хаҡында Аллаһ илсеһе с.ғ.с. әйткән риүәйәттәр ҙә бар.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ҺАРТТАР: УРТА АЗИЯ БАШҠОРТТАРЫБЫҘ

Әйле ырыуы башҡорттарының бер өлөшөнөң генетик маркеры - N1c1-M178. Уран, мең, түңгәүер, үҫәргән, юрматы, йәнәй, йылан, ҡошсо, терһәк, салйоғот, бәкәтин, түбәләҫ һәм һырҙы ырыуҙары башҡорттарының байтағы шул уҡ гаплотөркөм менән нарыҡлана. Бынан бер мөһим һығымта яһау фарыздыр: боронғо башҡорт риүәйәттәрендә һәм шәжәрәләрендә бәйән ителгән ырыу-ара бәйләнештәр ысынбарлыҡҡа тап килә.



Һарттарҙың монгол яуҙары дәүерендәге трагик яҙмышын сағылдырған тарихи хикәйәте "Һуңғы һартай", тип атала. Ошо хаҡта филология фәндәре докторы Фәнүзә Нәҙершина ошолай яҙа: "Хәтирә рәүешендә теҙелгән был әҫәр стиле яғынан фольклор менән әҙәбиәт араһында торған үҙенсәлекле ҡомартҡы. Беҙҙең көндәргә ул яҙма хәлендә, русса тәржемәлә килеп еткән. 1935 йылда археолог, крайҙы өйрәнеүсе М. И. Касьянов тарафынан рус теленә тәржемә ителгән был яҙма ("Последний из Сартаева рода") хәҙерге көндә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең ғилми архивында һаҡлана... Йөкмәткеһенән күренеүенсә, "Һуңғы һартай" хәтирәһендә, нигеҙҙә, XIV быуат аҙағындағы ваҡиғалар, атап әйткәндә, Аҡһаҡ Тимерҙең Алтын Урҙа ханы Туҡтамыш менән бәрелеш дәүеренә һәм ошо осорҙа һартай ырыуы башҡорттарының күргән яфа һәм юғалтыуҙары һүрәтләнә. Ваҡиғалар шаһит (ул һартай ырыуы союзының атаҡлы бейе Бурнаҡ улы Ялыҡ) исеменән бәйән ҡылынғанлыҡтан, бик тә ентекле һәм психологик көсәргәнешле: "...Эйе, мин йәшәй белдем... Минең үҙ ҡошом, үҙ тамғам бар ине. Үҙ хөкөмөм үҙ ҡулымда ине. Аҡһаҡал да, бей ҙә булдым..." Һарт башҡорттары яуыз илбаҫар Аҡһаҡ Тимергә ҡаршы йән аямай алыша, әммә Ялыҡ бейҙең улдары ла, халҡы ла яуҙарҙа һәләк була.

Ошо боронғо хикәйәт геройы Ялыҡ бейҙең Ҡармасан һәм Сәрмәсән исемле улдары була, Башҡортостанда ошондай уҡ гидронимдар бар. Тимәк, 1391 йылда һарттарҙың бер ҡәүеме ошо йылғалар бассейнында көн иткән. Хәҙерге Өфө һәм Кушнарен райондары буйлап аҡҡан бер йылғасыҡ Һарт (русса - Сартовка), тип атала, ул Ҡармасан йылғаһына ҡоя. Шулай уҡ Өршәк йылғаһы бассейнында Һарт-йылға гидронимы һәм Һартбаш топонимы бар (Әлшәй районы). Һарт башҡорттарының Тарихи Башҡортостандың бер-береһенән байтаҡ алыҫ территорияларына килеп урынлашыуының төп сәбәбе - уларҙың Урта Азия тарафтарынан Көньяҡ Уралға табан миграцияһының үтә оҙайлы барыуы. Шул уҡ Ф.А. Нәҙершина 1970 йылда Ҡурған өлкәһе Әлмән районының Тәңреғол ауылында Шәкирйән Мөхәмәтйәновтан яҙып алынған "Һарт-Әптерәш ауылы" исемле риүәйәт һәм 1930 йылда Ғафури районының Яҡтыгүл ауылында Вәлиулла Ҡоломбәтов яҙып алған "Һарт-Науруз ауылы" тигән риүәйәттәр хаҡында хәбәр итә. Билдәле ғалимәбеҙ үҙенең "Риүәйәт һәм легендаларҙа - халыҡ тарихы" (2011 йылда нәшер ителгән) китабында һарттар тураһында түбәндәге мәғлүмәттәрҙе килтерә: "1931 йылғы ғилми экспедиция материалдарына ҡарағанда, Ялан Ҡатай районында (хәҙерге Ҡурған өлкәһе) һарт нәҫелле 6 ауыл булғанлығы билдәләп кителә; һарт араларының Өфө, Стәрлетамаҡ, Бәләбәй кантондарына ингән ауылдарҙа осрағанлығы телгә алына. Р. Ғ. Кузеевтың 1959 йылғы яҙмалары буйынса, Ҡурған өлкәһенең Сафаҡул районында һарт нәҫелдәре йәшәгән ауылдар: Оло Солтан (Имәнғол), Баязит, Һарт-Әптерәш, Әбел, Мансур. Ғалимдың һарт нәҫелдәренең аҫабалығы тураһындағы мәғлүмәте иғтибарҙы йәлеп итә. Шуға бәйле риүәйәттән күренеүенсә, һарт волосы старшинаһы Солтанға ер биләүгә аҫабалыҡ хоҡуғы хеҙмәте өсөн батша тарафынан бирелгән. Солтан был ерҙәргә төньяҡ-көнсығыштағы Балсыкты күленән көньяҡ-көнсығыштағы Буташ күленә тиклемге арауыҡҡа ара-аймаҡтары менән бергә үҙенең биш улын еректергән, бынан тыш, Әйле, Табын һ. б. ырыу кешеләрен саҡырып килтергән. Был хәл 150 йыл элек булған, тиелә риүәйәттә. Информанттың ошо мәғлүмәтенә аңлатма биреп, Р. Ғ. Кузеев: "Был риүәйәт, күрәһең, һарттарҙың электән биләгән ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғы жалованный грамоталар менән нығытылыуын ғына сағылдыра", - тип яҙа, П. Паллас яҙмаларына таянып, ғалим башҡорт-һарттар Урал арьяғына Уралдан XVIII быуаттың урталарында уҡ күсеп килеп, Һарт волосы теҙгән тигән фекер әйтә. Тарихсы үҙенең фекерен артабан алда телгә алынған Солтан старшинаның шәжәрәһендәге мәғлүмәт менән нығытып ҡуя (шәжәрәнән күренеүенсә, Солтандың бүләһе (правнуғы) Троицк ҡалаһында 1959 йылда 75 йәшендә вафат булған".

Әммә һарттарҙың башҡорт этносына ылығыуын уларҙың Урта Азияла йәшәгән замандарҙан бирле әйеләр менән тығыҙ бәйләнештә булыуы менән аңлатырға кәрәктер. Ул осорҙарҙан күп быуаттар уҙыуға ҡарамаҫтан, ошо тарихи бәйләнеш сағылдырылған тарихи документ табылған. 1734 йылда Себер даруғаһының бер нисә олоҫ башҡорттары императрица Анна Иоановнаға ошондай хат менән мөрәжәғәт итә: "В прошлых годех до взятья царства Казанского пращеры прадеды и деды и отцы наши и мы нижайшие башкирцы двенадцати волостей, а именно Айлинской, Дуванской, Сарты, Сызгинской, Упейской, Черлинской, Мурзаларской, Тюбеляцкой, Каратавлинской, Тырняклинской, Алыской, Жилаирской владели вотчинною землею и всякие угодьи по раздаче ногайского хана по тамгам и по урочищам без письменных крепостей всю вообще и по взятью Царства Казанского тою нашей землею и всякими угодьями владеем мы нижайшие по старому нашему владению и по урочищам и по ныне всякую службу служим и с той нашей вотчинной земли вашего императорского величества всякие службы служим и ясак платим все 12 волостей вопще".

Һарттарҙың ҙур ғына бер өлөшө Себер даруғаһының Һарт олоҫонда (хәҙерге Дыуан районы территорияһына ҡарай) компакт рәүештә урынлашҡан 9 ауылға нигеҙ һала: Иҫке Хәлил (Киҫәүбай йәиһә Киҫәбай), Яңы Хәлил, Әбдрәшит, Арый, Мөлкәт, Мәржәнғол, Үрге Әбсәләм, Түбәнге Әбсәләм, Ҡараҡул. Улар үҙҙәрен һарт-әйеләр, тип атай.

Элекке Өфө өйәҙенең Кенәзләр-Күрпәс-Табын олоҫонда - Һарт-Науруҙ һәм Һарт-Шишмә (хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы), Сүбе-Мең олоҫонда - Һарт-Хәсән (хәҙерге Шишмә районы), Мең олоҫонда - Һарт-Лабау (хәҙерге Иглин районы) ауылдарына ситтән килгән һарттар нигеҙ һала, улар, башлыса, килмешәк сифатында урындағы аҫаба башҡорттар менән килешеү теҙгән була.

Урал арьяғында, Ҡурған өлкәһенең Сафаҡул районында бер-береһенә яҡын урынлашҡан Әбдрәшит, Баязит, Аҙналы, Солтан һәм Кесе Солтан ауылдарында хәҙерге көндә лә һарт-әйле башҡорттары йәшәй.

Һарт башҡорттары араһынан Башҡортостан Республикаһының мәғарифын, фәнен, мәҙәниәтен, сәнғәтен, әҙәбиәтен үҫтереүгә тос өлөш индергән байтаҡ ҡына талантлы шәхестәр үҫеп сыҡты. Билдәле филолог Таһир Баишев, Башҡортостандың халыҡ шағиры Тимер Йосопов, яҙыусы, драматург Низам Кәрип, БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, дәреслектәр авторы Марат Нафиҡов, шағирә Зөлфиә Ханнанова, талантлы бейеүселәр, бейеү ҡуйыусылар Әнүәр Әхмәҙиев һәм Әнүәр Шафиҡов, йырсы, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Йәмил Әбделмәнов, кинорежиссёр Булат Йосопов һәм йөҙәрләгән башҡа талантлы һарт башҡорттары халҡыбыҙҙың ғорурлығы ул.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 2-3-сө һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Корпус командиры М.Д. Борисов үҙе туҡталған Юлино утарына М.М. Шайморатовты саҡырҙы. Уның менән мин, дивизияның махсус бүлек начальнигы М.И. Кузнецов барҙыҡ. Борисов торған яңғыҙ йортҡа килеп инеү менән, ул Шайморатовҡа: "Ниңә тиҙерәк алға бармайһың?" - тигән һорау ҡуйҙы. Эргәһендә корпустың штаб начальнигы И.Д. Сабуров, тағы ике өлкән офицер бар ине. Шайморатов уларға алдағы һәм флангыларҙағы хәлде аңлата башланы. Ләкин корпус командиры, уны бүлдереп, кисекмәҫтән прорыв башларға тәҡдим итте. М.М. Шайморатов, ашыҡмайынсараҡ эш итеү, тәүҙә көслө разведка ебәреп, дошман көстәрен билдәләү, ваҡытлыса түңәрәк оборона тотҡан хәлдә артта ҡалған тылды, артиллерияны килтереү, халыҡты аҙыраҡ ял иттереү, шунан һуң ҡискен хәрәкәт итеү яғында торҙо. Корпус командиры үҙ фекеренән ҡайтмағас, М.М. Шайморатов, ҙур түҙемлек һаҡлап, икенсе тапҡыр үҙ тәҡдимдәрен дәлилләне. "Бер тәүлек ваҡыт бирегеҙ. Бөтәгеҙҙе лә иҫән-һау, юғалтыуһыҙ алып сығам", - тине. Ләкин корпус командиры ҡәтғи рәүештә: "Корпус разведкаһы шарттарҙы билдәләне, алда дошман көстәре шыйыҡ. Штеревка - Широкий һыҙығында гитлерсылар фронтының асыҡ урыны бар - хәҙер үк прорыв яһарға", - тип бойорҙо. Шайморатовтың үҙ разведкаһын ебәреп тикшереү тәҡдимен кире ҡаҡты. М.М. Шайморатов дивизияға ҡуҙғалырға бойороҡ бирҙе".

Башҡорт дивизияһы, ике колоннаға бүленеп, фронт һыҙығы үтҡән Мало-Николаевка йүнәлешендә хәрәкәт итә. Иң алдан штаб офицерҙарының бер өлөшө, адъютанты һәм һаҡсы взвод һалдаттары менән комдив үҙе ҡуҙғала. Ә бынан ике-өс саҡрым алда уларҙы алдан әҙерләнгән, барса һуғыш ҡоралдары булған дошман засадаһы көтә...

Сабир Рәхим улының иң тәүге хәтирәләрендә генерал-майор М.Д. Борисовтың башҡорт генералын элегерәк тә өнәп бөтмәүе, уға ҡарата тупаҫ мөнәсәбәттә булыуы, бәлки, профессиональ хәрби аңы, мәҙәнилеге яғынан үҙенән өҫтөнөрәк булған шәхескә ҡарата көнләшеү тойғоһо менән яфаланыуы, фронт шарттарында, хатта рейдта саҡта ла эскелек менән мауығыуы хаҡында мәғлүмәт юҡ. Совет идеологияһы шарттарында, немецтарҙа әсирлектә булып, һуғыштан аҙаҡ юғары власть даирәләре тарафынан ғәфү ителгән, карьераһын дауам иткән генерал Борисовтың ысын йөҙөн асыуға йөрьәт тә итмәгәндер әҙәпле башҡорт кешеһе ул заманда. Яуҙарҙан иҫән-һау ҡайтып, байтаҡ йылдар үтеү менән яҙған фронт хәтирәләрендә бәгзе бер юғары вазифалы офицерҙар ҙа генерал-майор Миңлеғәли Шайморатовтың батырҙарса, әммә фажиғәле үлеменең төп сәбәбе хаҡында артыҡ бер ни ҙә яҙмаған.

Эй, замана! Һуғыштан аҙаҡ та, әле асыҡлыҡ индерелмәгән бер осорҙа, генералыбыҙ һәләкәтен үҙ күҙҙәре менән күрмәгәндәр, хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә йөрөгән М.М. Шайморатов һәм корпус командиры М.Д. Борисов араһында булған һуңғы осрашыу хаҡында, ишетә-белгән халәттә лә, белмәмеш-күрмәмешкә һалыша. Әммә барыбер хәҡиҡәтҡә тоғро ҡалып, хәлдәрҙең ысынбарлыҡта нисек булғанлығын асып, ошо трагедияға сәбәпсе булған генерал Борисовты фашлаусы яугирҙар ҙа табыла. Ошондай шәхестәрҙең береһе - медицина хеҙмәтенең гв. подполковнигы Сарыгин Александр Алексеевич. Ул 112-се дивизия формалашҡан мәлдән алып һуғыш тамамланғансы беҙҙең дивизиябыҙҙа хәрби табип вазифаһын башҡара. А.А. Сарыгин данлы рейдта үҙе лә ҡатнаша, 23 февралдә булған хәлдәрҙең шаһиты була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Тәрбиәнең иң юғары нөктәһе - ул күркәм әҙәп. Балаларыбыҙ өсөн дә, йәмғиәт өсөн дә үҙебеҙҙә күркәм әхлаҡ тәрбиәләргә тейешбеҙ. Ул беҙҙең милләтебеҙҙе һаҡлай торған бер ҙур ҡорал.*



# ЕГЕТТӘРҘЕ ЕГЕТ ИТЕП

## ул малай саҡтан мәһәр йыйһын, малы һәм көс-ғәйрәте булһын,

**Күркәм тәрбиә бик бәләкәйҙән бирелә. Беҙ оло быуындың яҡшылыҡҡа, әҙәп-әхлаҡҡа өйрәткән һүҙҙәрен иҫебеҙҙән сығармайбыҙ. Меңәр йылдан ашыу Ислам динендә булған халыҡ өсөн, әлбиттә, дин, шәриғәт аша ла тәрбиә яҡшы һеңдерелгән, һәм ул терәк бағанаһы шикелле, әҙәмде яҙыҡ юлдан китеүҙән һаҡлай. Төрлө дәүерҙәр кисерергә тура килә халыҡҡа, ләкин күркәм холоҡ, яҡшы тәрбиә төп талап булып ҡала. Һәр халыҡтың үҙенең йолалары, ғәҙәттәре, тәрбиә мәктәбе лә бар, улар ҙа изгелек эшләү, гонаһ ҡылмау кеүек дин ҡанундары менән тап килә. Бөгөн дә йәшәү мәғәнәһе, йәш быуынға рухи ҡиммәттәрҙе тапшырыу тураһында уйланабыҙ, тәбиғи, тормош-көнкүрештә төрлө һорауҙар килеп тыуа. Уйланған, фекер иткән һайын яңы һорауҙар ҙа өҫтәлеп ҡуя. Бөгөнгө хөрмәтле дин әһелдәре менән һөйләшеү шуларға асыҡлыҡ индерер, алға барыр өсөн ниндәйҙер кимәлдә ярҙам да, ҡулланма ла булыр, тип уйлайбыҙ. "Киске Өфө" ҡунаҡтары - имам-хатиб, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында "Йома" тапшырыуын алып барыусы журналист Морат ЛОҠМАНОВ, Өфө районы Булгак ауылы мәсете имам-хатибы Нурмөхәмәт НУРИЕВ, баш ҡалағы Хәмзә мәсете имамы Хаммат БОХАРБАЕВ.**

**Кешенең тәбиғәте шулай: ул һәр саҡ тормош, йәшәү мәғәнәһе, фанилыҡҡа һәм баҡыйлыҡҡа бәйле һорауҙарға яуап эҙләй. Беҙҙең халыҡта дин менән ҡыҙыҡһыныу көсәйәме, һеҙ быны тояһығыҙмы?**

**М. Лоҡманов.** Әлбиттә, беҙҙән алда йәшәгән быуындарҙа дин тәрбиәһе беҙҙекенә ҡарағанда көслөрәк, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанса йәшәүҙәре - ихласлығы, йомшаҡ күңеллелеге, ярҙамсыллығы, ҡунаҡсыллығы юғарыраҡ һәм өҫтөнөрәк булған. Халыҡ күңелендәге гәүһәрҙәр, тәрбиә ысулдары - милли йолалар һәм дини йолалар менән бәйләнгән. Дини тәрбиә лә бик борондан килгән, сөнки һәр халыҡ Аллаһы Тәғәлә менән бәймәт итһә лә, кешенең кеше булып ҡалыуы - һәр заманда ла етди мәсьәләләрҙең береһе. Ошо өҫтәл артында ултырған коллегаларым раҫлар, беҙ шуның өсөн эшләйбеҙ, шул турала осрашыуҙарҙа әйтә килдебеҙ. Нәфсене тәрбиәләү, ололарҙы ололау, ватанға һөйөү - былар барыһы ла тәрбиәүи ҡиммәттәр. Тәрбиәнең иң юғары нөктәһе - ул күркәм әҙәп. Балаларыбыҙ өсөн дә, йәмғиәт өсөн дә үҙебеҙҙә күркәм әхлаҡ тәрбиәләргә тейешбеҙ. Ул беҙҙең милләтебеҙҙе һаҡлай торған бер ҙур ҡорал. Динле булып йәшәү буш һүҙ түгел, уны фәҡәт яҡшы тәрбиә аша раҫлап була. Ә тәрбиә нигеҙе - иманда.

**Әҙәм балаһы үҙенең хәлен яҡшыртыу тураһында уйланмай ҡалмай. Шул уҡ ваҡытта**

тураһында, ғаилә, балалар эргәһендә, йәмғиәттә үҙеңде нисек тотоу кәрәклеге тураһында әйтелгән. Кешегә файҙа итмәгәндә лә, һин үҙеңдең ҡиәфәтең менән дә, телең менән дә, фиғелең менән дә кешегә зарар итергә тейеш түгелһең, тигән төшөнсәләр үткәрелә. Дин - ул гүзәллек.

**Н. Нуриев:** Хәмзә мәсетендә алып барылған ғаилә мөнәсәбәттәре буйынса уҡытыуҙар бик ваҡытлы. Ғаилә мөнәсәбәттәре - бөгөнгө көндә ҙур проблема. Мосолмандар араһында беҙ "өлгөлө" тип ҡараған ғаиләләр ҙә тарҡала. Беҙ үҙебеҙҙең ғәҙәттәребеҙҙең, әҙәбебеҙҙең, тәрбиәбеҙҙең бик ныҡ ҡаҡшағанын күрәбеҙ. Кеше интернетҡа ғына ҡарап, үҙенең кем икәнен һәм урынын онота. Шуның өсөн дә

**Х. Бохарбаев.** Эйе, мин мәғлүмәттәрҙе өйрәнгәйнем, һәр бер ауылда имам, кәмендә, ғәрәп, фарсы, иҫке төрки телен белгән. Иҫке төрки теле дөйөм уртаҡ яҙышыу сараһы булып хеҙмәт иткән, шул телдә ижад иткәндәр, китаптар сығарғандар.

**М. Лоҡманов.** Шәхестәребеҙгә килгәндә, улар, ысынлап та, дин яғынан ныҡлы, төплө белемгә эйә булғандар. Мәсәлән, "Кинйә абыҙ", тип әйтәбеҙ бит. "Абыҙ" тигән һүҙ ул "хафиз", йәғни "Ҡөрьәнде яттан белгән кеше" тигәнде аңлата. Шуға, дин өйрәнгән ваҡытта үҙебеҙҙең шәхестәребеҙҙе лә миҫал итеп ҡуйырға тейешбеҙ, сөнки һәр бер халыҡ үҙенең юлынан бара, шул саҡта ғына уның күңеле асыла. Үҙебеҙҙең Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Ризаитдин Фәхретдин, Зәйнулла ишанды өйрәнмәй тороп, уларҙың юлдарын күрмәй тороп, ныҡлы, төплө ғилем ала алмаясаҡбыҙ. Беҙгә уларҙың мираҫын күберәк өйрәнергә кәрәк. Уларҙың исемдәрен ҡайтарыу буйынса эш алып барабыҙ, әлбиттә. Ләкин беҙгә был өлкәлә күберәк һәм ныҡышмалыраҡ эшләргә кәрәк. Сөнки "Ошо ауылдан шундай ғалимыбыҙ сыҡҡан", тип әйтеү менән генә лә әлеге ауылда күп нәмә үҙгәрәсәк. Шәхес исеме йәмәғәтселек тормошона тәьҫир итмәй ҡалмаясаҡ, ҡырҡ, илле бер көн үтеүен билдәләү мотлаҡмы? Аныҡ һорауға аныҡ яуап алдыҡ: "Был көндәрҙе үткәреүгә бер ниндәй ҙә дәлил юҡ". Йәғни, әгәр ҙә кеше мәрхүмдең тыуған көнөндә, йә ҡырҡында аят уҡытмай ҡалды икән, был гонаһ булды, тигәнде аңлатмай. Әммә беҙҙең халыҡта айырым көндәрҙә мәрхүмде иҫкә алыу йолаһы бар. Был көндә өйҙәргә халыҡ йыйыла, улар Ҡөрьән аят-сүрәләрен ҡолаҡ менән, күңел менән тыңлай, сауапты мәрхүмдәргә бағышлай. Хәҙрәт бер биш-ун минут вәғәз һөйләп китһә, ул да бит халыҡҡа файҙа. Беҙҙең йәмәғәт өсөн бындай саралар кәрәк.

**Н. Нуриев.** Мәрхүмдең үлгән көнөн генә түгел, ғөмүмән, мәрхүмде иҫкә алыу кәрәк. Шундай табын йыя икән, йә мәсеткә килеп, хәҙрәттең өгөт-нәсихәтен тыңлап, доға ҡыла икән, ундай кеше сауап ҡына ала. Бына беҙ бик күп йылдар мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу табындарына барабыҙ, унда бит аят уҡып ҡына йүгереп сығып китмәйбеҙ, ә хәлдән килгәнсә кешеләрҙең һорауҙарына яуап бирәбеҙ, нәсихәтте еткерәбеҙ. Бындай аралашыуҙың һөҙөмтәһе бар. Кешеләр, "бисмиллаһ" итеп, хәләл ризыҡ әҙерләй. Тәһәрәт ала, уйлана, хәйерле йыйылыштар үткәрә, унда Аллаһы Тәғәләне иҫкә ала икән, унан бер ниндәй ҙә хата эҙләү кәрәкмәй. Бындай йыйылыштар тыйылмаһын, сөнки улар беҙҙең тормошта ныҡ урын алған ...

Бындай йыйылыштар тулунештә бит. Яңы йолалар, уйҙырмалар барлыҡҡа килеп, дингә ҡаршы китә икән, ул, тимәк, кешелеккә ҡаршы китә тигән һүҙ. Ана шундай кешелек тәбиғәтенә ҡаршы килгән ғәмәлдәр барлыҡҡа килһә, Аллаһы Тәғәлә шәриғәтте кире ҡайтарыр өсөн Ергә үҙенең бәйғәмбәрҙәрен ебәрер булған. Шул арҡала шәриғәт бер сылбыр булып өҙөлмәй дауам итә килгән. Бөгөн дә был сылбыр дауам итә, тип ышанабыҙ.

**Х. Бохарбаев.** Мин бала саҡта ауылыбыҙҙа мәсет тә, мәҙрәсә лә булманы. Намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу ҙа юҡ ине, әммә әхлаҡи тәрбиә ҡанундары һаҡланып ҡалды. Мәктәпкә ҡыҙ балалар еңһеҙ күлдәк кейеп килгән саҡта класс етәксеһе үҙенең бала сағын иҫләп, бик матур тәрбиә ысулы ҡулланғанын хәтерләйем. Ул: "Беҙ бәләкәй саҡта урамдан үтеп барһаҡ, ҡулдарыбыҙ асыҡ икән, өлкәндәр: "Муйындарығыҙҙы, ҡулдарығыҙҙы ябып йөрөгөҙ", - тип әйтә торғайны", тип, үҙенең бала сағын иҫкә алды. Уҡытыусының был һүҙҙәре, әлбиттә, балалар күңелендә уйылып ҡалды. Эйе, ул осорҙа дәүләт кимәлендә дин ҡабул ителмәһә лә, әҙәп тәрбиәһе бар ине бит. Тимәк, ата-бабаларыбыҙ ошо гүзәл диндән айырылмаған булған. Аллаға шөкөр, хәҙер ул әкренләп тергеҙелә.

**Н. Нуриев.** Диндең ысын мәғәнәһе - әхлаҡи тәрбиә, һәм ул бөгөнгө көндә лә беҙҙең йәмғиәтебеҙҙә бик актуаль булып ҡала. Ниндәй генә өлкәлә хеҙ-

**йәмғиәтебеҙҙә кешеләрҙең үҙара мөнәсәбәтен юғары кимәлдә тип әйтә алмайбыҙ. Ә динебеҙҙә был һорауҙарға һәр ваҡыт яуап табырға була. Хәмзә мәсетендә ғаилә мөнәсәбәттәре тураһында матур һабаҡтар бирелеүен ишетәбеҙ...**

**Х. Бохарбаев.** Мәсеттең бурыстары нимәлә? Ул ғибәҙәт урыны һәм дә дәрес биреү урыны. Беҙҙең дә төп бурысыбыҙ - халыҡҡа ғилем еткереү. Хәмзә мәсетендә башланғыс һәм дауам итеү кимәлендәге дәрестәр бирәбеҙ. Ә һәр шәмбе иртәнге туғыҙҙа ғаилә мөнәсәбәттәре тураһында дәрестәр була. Ир кешенең һәм ҡатын-ҡыҙҙың бурыстары нимәлә, балаларҙы нисек тәрбиәләргә, йәмәғәт ҡаршыһында үҙ-үҙеңде нисек тоторға - ошоға оҡшаш һорауҙарға яуап бирәбеҙ, йәғни, әхлаҡ темаларын өйрәнәбеҙ. Был ғилем һабаҡтары бик ҡыҙыҡлы үтә.

Мосолман өсөн аҡида, фикһтан тыш, шәриғәттең өсөнсө шарты - ул күркәм холоҡ, хуснуль холоҡ, яҡшылыҡ. Шул булмаһа, кешенең иманы ла зәғиф була. Күпме ғибәҙәт ҡылып та, кеше насар холҡо арҡаһында ирешкән сауаптарын юғалтыуы бар. Йәғни әҙәм балаһы өсөн дин тотоу, намаҙ уҡыу ғына аҙ. Бәйғәмбәребеҙҙең бик күп хәҙистәрендә яҡшы холоҡ милләтебеҙҙе, халҡыбыҙҙы, йәшәйешебеҙҙе һаҡлайыҡ тиһәк, был дәрестәрҙе артабан да дауам итергә кәрәк.

**Тарихҡа күҙ һалһаҡ, дин менән мәғрифәттең айырылғыһыҙ икәнен күрәбеҙ. Милләтебеҙҙе юғары үҫеш баҫҡыстарына күтәргән һәр осор киң ғилемле ирҙәр исеме менән бәйле. Рухи терәк бағаналары булған шәхестәребеҙ төрлө мәҙрәсәләрҙә белем алған бик уҡымышлы, зиһенле заттар. Юлай улы Салауат, Зәйнулла Рәсүлев, Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдин, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев һ.б. һәр бер шәхестең тарихта тотҡан урыны һәм хеҙмәте бар.**

**М. Лоҡманов.** Әгәр өс тағанды айырып, бер аяғын алып ташлаһаң, таған йығыла. Аҡидә, фикһ, әхлаҡ тураһында әйтәм. Шуның өсөн уларҙы беҙ айырып ҡарарға тейеш түгелбеҙ. Аҡидәң дөрөҫ түгел икән, йәғни кемгә ышаныуың дөрөҫ түгел икән, намаҙ уҡыуыңдың файҙаһы юҡ. Был шәхестәр - улар ғибәҙәт ҡылыусылар ғына түгел, хатта ғибәҙәт ҡылыусыларҙың алдында торған кешеләр. Ә ғөмүмән алғанда, беҙҙең халыҡта ғибәҙәт ҡылмаған кеше лә булмаған. Һәр башҡорт намаҙ уҡыған.

һәм ундай ауылдарҙа заман сире булған эскелек тә кәмейәсәк.

**Дини ғилем етмәгәнлектән күп кенә һорауҙар асыҡ ҡала. Был осраҡта иң йыш биргән һорауҙарҙың береһе - мәрхүмдәрҙең үлгән көнөн билдәләргә яраймы-юҡмы? Әллә уларҙың үлгән көнөндә мәсеткә барып, хәйер биреү яҡшыраҡмы, тигән һорау ҙа бирәләр.**

**М. Лоҡманов.** Әгәр ҙә кешегә ҡырт киҫеп, ҡапыл ғына "тегеләй ярамай, былай ярамай", тип әйтһәң, уның диндән ситләшеүе ихтимал. Сит илдән килгән кешеләр өсөн, әйтәйек, ғәрәптәр өсөн, беҙҙәге күп кенә йолалар сәйер тойолор ине. Әммә ул йолалар беҙҙең өсөн бик файҙалы булыуы мөмкин. Ниндәйҙер дата икән, ул мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу өсөн сәбәп булып тора. Ошо юл менән беҙҙең күңелдәребеҙ асыла, иманға табан ниндәйҙер аҙымдар яһайбыҙ. Быға күп миҫалдар килтерергә мөмкин. Тик беҙ "мәрхүмдең үлгән көнө" тип түгел, "шул көндә мәрхүмгә доға ҡылабыҙ", тиергә тейешбеҙ. Шул көндә, мәсәлән, ҡәберенә зыярат ҡылырға, мәсеткә барырға була.

**Х. Бохарбаев.** Бындайыраҡ һорауҙарҙы башҡа мосолман илдәренән килгән ғалимдарға ла биргәнебеҙ булды ул. Мәсәлән, мәрхүмдең вафатына ғандар һәм дә иманлы бәндәләр менән күрешеүгә бер сәбәп булып тора, Аллаһыны иҫкә төшөрөүҙән, мәрхүмдәрҙе иҫкә алыуҙан файҙа алырға кәрәк.

**Ауылдарҙағы күп имамдарыбыҙ дин тәғлимәтен үҙаллы, йә курстарҙа ғына өйрәнгән өлкән кешеләр. Ләкин уларҙың динебеҙгә хеҙмәт итеү ихласлығын кемдәрҙеңдер баһаламауы ла бар. Ошо турала ни тиерһегеҙ?**

**М. Лоҡманов.** Бер ауылда халыҡ менән осрашҡанда бер егет: "Беҙҙең мәсетебеҙҙең имамы, мулла бабай, бер нәмә лә эшләмәй", - тип әйтеп ҡуйҙы. Уға аңлатырға тура килде. Был үҙе сәйер талап, сөнки өлкән кешегә икенсе төрлө сифаттар хас. Ололар аҡыллы, ғилемле булһа, ә йәштәр тырыш, эшсән булһа, йәмғиәт тә алға бара. Әгәр ҙә йәштәр ололарҙы хөрмәт итеп, уларҙың һүҙҙәрен тыңлап, етте тигәндә, туҡтай белһәләр, бына шул ерҙә бәрәкәт була. Йәштәр йүгереп йөрөп эшләй, ә өлкәндәр аҡыллы юлдар күрһәтә. Бабай тирәһендә бәрәкәт барлыҡҡа килә. Бабай үҙенең оло дәрәжәһен төшөрмәйенсә, матур аҡһаҡал булып ҡала икән, уның янындағы бер кешенең эше етмеш кешенең эшенә тиң була. Шул тиклем ҙур бәрәкәт барлыҡҡа килә, уны ололарҙы ололау бәрәкәте, тиҙәр. Ә беҙ

***✓ Беҙ һәр ваҡыт кемделер үҙгәртергә теләйбеҙ, ә үҙебеҙ үҙгәрергә бик ашыҡмайбыҙ. Тормошоңда ҡатмарлыҡтар өйөлөп киткән икән, кемдәндер ғәйеп эҙләргә түгел, уйларға тейешбеҙ: "Үтәлеп бөтмәгән аманаттарым ҡалмағанмы?"***

# ТӘРБИӘЛӘЙЕК:

## ҡарар ҡабул итә алһын, үҙендә яуаплылыҡ тойһон!



ошо бәрәкәтте юғалтҡанбыҙ. Ололарҙы хөрмәтләгән ерҙә һәм ололар үҙҙәренең дәрәжәләрен төшөрмәй, олпат булған ерҙә һәр саҡ бәрәкәт фәрештәләре була, улар "амин" тип, бөтә эштәрендә алға алып баралар. Ололарҙы ололау мәрхүмдәрҙе иҫкә алыуҙа ла сағыла. Мәрхүмдәребеҙҙе хөрмәт итмәйбеҙ икән, тимәк, тереләребеҙҙе лә күрмәйбеҙ, тигән һүҙ. Кеше иғтибарҙы үҙенә генә бүлә башлаһа, тәкәбберлеккә бирелә. Ә тәкәбберлек хөкөм һөргән ерҙә Йәннәт еҫе булмай.

**Х. Бохарбаев.** Бәйғәмбәребеҙҙең хәҙистәрендә: "Хәҙерге быуын үткән быуынды хурлай башлаһа, Ҡиәмәт көнө киләсәк", - тип әйтелә. Бөгөнгө тормошта ҡай саҡ үткән быуын ғалимдарын, имамдарын хурлағандарын да күрәбеҙ. Ысын дин - оло кешеләрҙе хөрмәт итеү ҙә ул. Был бик мөһим мәсьәлә, тик бер ҡолаҡтан инеп, икенсеһенән сығып китмәһен.

**Ир кеше үҙенең төп эшен арыу ғына алып барһа, ғаиләһен ҡараһа, тик эсеүен ташлай алмаһа, уға ярҙам итеп буламы? Әшкөрөүҙең тәьҫире бармы, әллә кеше үҙе эсеүен ташларға теләк белдергәндә генә был афәттән ҡотола аламы? Бөгөнгө көндә бәғзе ғаиләләр алдында торған етди һорауҙарҙың береһеләр был, моғайын.**

**Н. Нуриев.** Эскелек, наркомания һәм мин был афәткә тәмәке тартыуҙы ла индерер инем - улар кешене шайтан ҡапҡанына бәйләп тотоп торған нәмәләр. Ысынында иһә, Аллаһы Сөбхәнә үә Тәғәлә: "Бәндә үҙе үҙгәрергә теләмәйенсә тороп, Мин уның хәлен үҙгәртмәйем", - ти. Ниндәй генә талант эйәһе, ниндәй генә һөнәр әһеле булмаһын, кеше үҙенең тормошон күҙ йәштәре менән үҙгәртергә теләмәйенсә тороп, ғөмүмән, йәшәргә теләк белдермәйенсә тороп, уға ярҙам итеү бик ауыр. Үҙенең яҙмышына битарафлығы, үҙенең ауырыу икәнен, нәфсе ҡоло икәнен аңламауы уны һәләкәткә алып бара. Ул: "Мин сама белеп эсәм, сама белеп ҡулланам", - тип, үҙен үҙе алдай. Ғөмүмән, был иҫерткесте эсеү проблемаһына ғына ҡағылмай, динһеҙ кеше лә, наҙан кеше лә һәм изге эштәр эшләп маташҡан кеше лә иғтиҡады, йәғни Аллаһы Тәғәләгә ышаныуы һәм тормошҡа ҡарашы дөрөҫ булмауы арҡаһында бөтөн эштәрен үҙенең нәфсе ҡарамағына тапшыра, шуға үҙен дөрөҫ эш эшләгән һымаҡ тоя һәм нисек һәләкәткә барғанын аңламай.

Нигеҙе насар бинаны ни тиклем матур итеп төҙөгән хәлдә лә, уның киләсәге юҡ, сөнки ул емерелеүгә, юҡҡа сығыуға дусар. Кешенең тормошо ла шулай. "Аллаһы Тәғәләнең ризалығына ирешәбеҙ", тигән һүҙ маңлай ышҡылып бөткәнсе намаҙҙа ултырыу, күпме байлығы бар, шуны хаҡ юлда таратыу ғына түгел, былар Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыу ысулы ғына. Шуның өсөн "был гонаһ эште ташлайым" тип әйткәндә, иң беренсе, Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында үҙеңдең бәндә икәнеңде, гонаһлы ябай кеше икәнеңде аңлау. Әгәр ҙә кеше мин-минлегенә бирелеп, еңел генә: "Мин эскелекте ташлай алам",- тип әйтә икән, был нигеҙһеҙ, ул быны эшләй ҙа алмай. Һүҙ юҡ, үҙенә ышаныс кәрәк, ләкин ярҙам, һис шикһеҙ, Аллаһы Тәғәләнән икәнен белергә кәрәк. Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында үлемдән башҡа бөтөн проблемаларҙы хәл итеп була. Аллаһы Сөбхәнә вә Тәғәлә "Йа, Рабби!" тип күҙ йәштәре менән ҡул күтәреп һораған бәндәһенә сараларын, һис шикһеҙ, бирә: ниндәйҙер клиникаға барамы, ниндәйҙер дарыуҙар ашаймы, әшкөрөләмә - саралары була. Һәр ваҡытта ла иң беренсе дауалау юлы - үҙеңдең кеше икәнлегеңде аңлап, сараларын һәм хәләл юлды табырға ярҙам итеүен һорап, Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итеү. Был беренсе аҙым.

**М. Лоҡманов.** Шайтан кешене юлдан яҙҙырырға тырыша, тигәнгә, үҙебеҙҙең тормоштан ап-асыҡ дәлил. Бер бала мәсеткә барырға теләй, тик шул мәлдә әсәһе аяҡ терәп ҡаршы тора, уны мәсеттәге байрамға ебәрмәй. Бер нисә йыл үткәс, ошо ҡатын үҙе килеп беҙгә мөрәжәғәт итте: "Улым юлдан яҙҙы, эскегә бирелде..." Әсә кеше мәсеттән ҡурҡа ине, ә бәлә улын үҙе килеп тапты. Эйе, шундай күренеш тә юҡ түгел: атаһымы, әсәһеме баланы мәсеткә алып барыуҙан ҡурҡа, ә араҡы тотторыуҙан ҡурҡмай. Шунан: "Баламды тиҙ генә әшкөрөгәҙ ҙә, эсмәҫлек итегеҙ", - тип үҙе мәсеткә килә. Әгәр ҙә кемдер балаһын эскелектән ҡотҡарырға теләй икән, иң тәүҙә үҙе ныклы итеп иманға килһен. Шунан һуң балаһын насар мөхиттән алып китһен, һижрәт ҡылһын, эсмәгән кешеләр араһына алып барһын. Тырышлыҡ һалырға кәрәк.

**Н. Нуриев.** "Кеше үҙе үҙгәрергә тейеш" тигән фекер - бик көслө фекер. Беҙ һәр ваҡыт кемделер үҙгәртергә теләйбеҙ, ә үҙебеҙ үҙгәрергә бик ашыҡмайбыҙ. Мәсәлән, тормошонда ҡатмарлыҡтар өйөлөп киткән икән, кемдәндер ғәйеп эҙләргә түгел, уйларға тейешбеҙ: "Үтәлеп бөтмәгән аманаттарым ҡалмағанмы?" Кешенең тәүбә ителмәгән гонаһтары ла проблема тыуҙыра бит. Шуға, кемдеңдер ғаиләһенә ауырлыҡ килгән икән, ниндәйҙер фажиғә булған икән, ул кеше уйланырға, һығымта яһарға тейеш: "Минең әле тәүбә ителмәгән ғәмәлдәрем бар, үтәмәгән вәғәҙәләрем бар. Тәмәкене ташларға тип йыйынған инем, быны эшләргә кәрәк; байрамдарҙа эсә инем, был ғәҙәттән арынырға кәрәк; мин бит атай, инде олатай дәрәжәһенә инеп барам, үҙ ырыу-затымдың ағзаһы", - тип, кеше үҙенә ыңғай план ҡуйырға тейеш. Һәм шуны иҫтә тотоу кәрәк: тәүбә ителмәйенсә ҡалған гонаһтар - хәүефле, улар дауалап бөтөлмәгән ауырыу һымаҡ, барыбер үҙен тойҙорасаҡ. Шуның өсөн тәүбә итергә ашығығыҙ, бурыстарығыҙҙы ҡайтарырға ашығығыҙ, мәрхүмдәрҙе ерләргә ашығығыҙ, еткән ҡыҙҙы кейәүгә бирергә ашығығыҙ. Бына былар "Ашығығыҙ!" тигән пландарыбыҙ эсендә булырға тейеш.

**Мәһәр буйынса шулай уҡ һорау биреүселәр бар, мәсәлән: "Һуңғы йылдарҙа никах уҡығанда кейәүҙең кәләшкә аҡсалата ҙур бүләк, кәмендә утыҙ-илле мең һәм унан да юғары мәһәр биреүе модаға инде, дөрөҫмө икән шул?" Ошо мәсьәләгә лә асыҡлыҡ индерһәгеҙ ине.**

**Х. Бохарбаев.** Мәһәр ул никахтың важибы һанала, йәғни, мотлаҡ үтәлергә тейеш йөкләмә. Мәсәлән, Умар разыйаллаһу ғәнһү: "Кем мәһәр түләмәй, уларға ризалыҡ булмаһын",- тип әйткән. Мәһәр мода өсөн уйлап сығарылған нәмә лә түгел, ул шәриғәттең бер шарты. Мәһәрҙе күпме биреү буйынса аныҡ сикләү юҡ. Кәмендә күпме бирергә, тигәне бар. Хәҙерге аҡса менән иҫәпләп сығарғанда, яҡынса ете-һигеҙ мең самаһына тура килә. Ҡайһы бер мосолман илдәрендә мәһәргә 400-500 мең һум бирәләр. Мосолман илдәренән Рәсәйгә килеп эшләгән йәш кеше, ғәҙәттә, бында эшкә килеүенең сәбәбен: "Минең бит кәләш алаһым бар, ә беҙҙә мәһәр ҙур", - тип аңлата.

**Н. Нуриев.** Бында һүҙ ҡатын-ҡыҙҙың дәрәжәһе, ҡәҙере тураһында бара. Беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙ тәртипле, аҡыллы. Беҙ никах уҡыған саҡта күбеһе мәһәр ҙә һорамай. Мәһәрҙең нимә икәнен дә белмәйҙәр хатта. Әммә мәһәр - ул ир кешенең ғаилә ҡорорға әҙер булыуын аңлата. Утыҙ мең күп буламы? Ир менән бер-бер хәл булып китһә, утыҙ мең, бер уйлаһаң, ҡатынға ҡуртымға алған фатирҙарына ике ай түләп торорға ғына етә. Шунан ҡайҙа бара ул, кемгә бара, кем тол ҡатынға ярҙам итә? Ғаилә башлығы - ул йорт хужаһы. Һүҙендә, эшендә генә хужа түгел, уның бурысы - ғаилә бюджетын хәстәрләү. Тимәк, күпмелер аҡсаһы ла булырға тейеш. Урта Азия илдәренән эшкә килгән егеттәр менән һөйләшкәнем бар. "Мәһәргә, кәмендә генә, ике мең доллар йыябыҙ", тиҙәр. Бынан тыш, мәхәлләһе, районы менән кешеләрҙе лә ҡунаҡ итәләр бит улар. Әлбиттә, мәғәнә аҡсаны күп сарыф итеүҙә түгел, был бөтәһенән элек - хөрмәт. "Бына кәләш алдым да ҡуйҙым, хәҙрәт, никах ҡына уҡып ебәрегеҙ әле", - тигән буш һүҙ һөйләү һәм еңел ҡараш булырға тейеш түгел. "Кәләште ғүмергә бер генә алам, бөтөн уй-ниәтем артабан уның менән матур итеп йәшәү", тигән төплө ҡараш булырға тейеш. Һәм егет артабан ошо ниәтте матди нығытып ҡуя, әйткән һүҙендә тора. Ир кеше - ул ғаилә байрағын ахырға тиклем тотоп барыусы.

Берәүгә лә сер түгел, бөгөн йәшәү ҙур сығымдар талап итә. Шуның өсөн ҡатын-ҡыҙ мәһәр менән, ниндәйҙер кимәлдә, үҙенең тормошон тәьмин итә. Ата-әсә уны егерме-егерме биш йыл буйы ҡарай, юғары белем бирә, ҡыҙын оло тормош юлына сығарғансы күп сығымдар түгелә. Ҡайҙандыр кейәү килә лә, уны бушҡа алып китә. Ә былай кейәү биргән мәһәрҙән ата-әсә күңелендә лә ышаныс уяна. "Өҫ-башы ла ыҫпай, алып ҡайтырға йорто ла бар, ҡыҙыма утыҙ мең һум мәһәр бирә",- ти улар. Никахта кәләш мәһәрҙе күпме теләй, шулай билдәләй. Был шәриғәт талаптарына тура килә. Бөгөнгө көндә никах килешеүе лә булыуы мөмкин. Шуның өсөн ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ кейәүгә сыҡҡанда уйлап, төплө ҡарар ҡабул итергә тейештәр.

**М. Лоҡманов.** Бында ла күп нәмә теләктән тора. Мәһәр тигән әйберҙе теләргә кәрәк. Беҙгә бөгөн егеттәрҙе егет итеп тәрбиәләргә кәрәк. Малай саҡтан мәһәр йыйнаһын, үҙенең фекере булһын, көс-ғәйрәте булһын, малы булһын, ҡарар ҡабул итә алһын, үҙендә яуаплылыҡ тойһон. Мәһәрҙе никах килеп еткәс кенә белергә түгел, баштан уҡ һеңдерергә кәрәк. Ул турала биш йәштән уҡ аңлата башларға, Аллаһы Тәғәлә бына шундай эштәрҙе эшләрлек беҙгә көс-ҡеүәт бирә, тип үҫтерергә кәрәк. Мәһәр бирә алыу - ир кешенең бәхете. Бурысы ғына түгел. Шуға ла ир балаларға тәүҙән уҡ маҡсат ҡуйып, мәһәр әҙерләү зарурлығын аңлатырға кәрәк. "Аҡса юҡ," тигән сәбәп алда торорға тейеш түгел. Ғөмүмән, мәһәр никахҡа кәртә булмаһын, кеше бәләкәйҙән уҡ үҙенә юлдар асһын.

**Х. Бохарбаев.** Тормошта төрлө хәлдәр ҙә булып ҡуя. Ҡыҙ менән егет мәсеткә киләләр ҙә: "Беҙгә никах уҡығыҙ, шаһиттарыбыҙ бар, кейәүгә эшкә китергә кәрәк",- тиҙәр. Никахтың шарттарын аңлата башлайһың, егет: "Минең мәһәргә аҡсам етмәй", - ти. Буласаҡ кейәү менән кәләш инде өйләнешергә әҙерләнеп, фатир ҙа йүнләгәндәр. Әгәр ҙә никах уҡымаһаң, хәҙер никахһыҙ йәшәп китеүҙәре бар. Был "зина" тип атала, хәҙер уҡымаһаҡ, беҙ ҙә ошо гонаһлы эштә ҡатнашҡан кеүек килеп сығабыҙ. Әгәр ҙә никах ваҡытында егет кеше мәһәр бирә алманы икән, мәһәр биреүҙе күпмелер ваҡытҡа - бер көнмө, бер аҙнамы, хатта бер айғамы - кисектереп торорға рөхсәт ителә. Ләкин был кәләштең ризалығы менән эшләнә. Егет үҙ өҫтөнә йөкләмә ала.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Дин тураһында ла, ғаилә мөнәсәбәттәре тураһында ла һөйләштек. Фекерләй белгән кеше өсөн бик мөһим мәсьәләләрҙе ҡуҙғаттыҡ шикелле. Ләкин дин, тәрбиә, тормош, киләсәк тураһында һөйләшеүҙәрҙең осона сығырлыҡ түгел. Шуға ла тәҡдимдәр көтәбеҙ: тағы ниндәйерәк темаларға фекер алышыу уҡыусы күңеленә хуш килер ине икән?**

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
әңгәмәләште.

*✓ Ҡорал тотоп, дәртләнеп, бик теләп Ватан һағына сафҡа баҫҡайны егет. Тик армияла, иҙән йыуғысындай күреп, уның менән бысраҡ һөрттөләр, намыҫын ергә һалып тапанылар, әсир төшкән тотҡондай ирекһеҙләнеләр.*



Рәсүл БАЙГИЛДИН

# ДАН ЮЛЫНЫҢ ТУҘАНЫ

Повесть



–Хәҙер, улайһа, - йәһәтләп сығып китте лә, күп тә тормай, директорға эйәреп, кире килеп инде.

- Акимов! - директорҙың тимер сыңлағандай тауышы күрше бүлмәлә лә ишетелгәндер, моғайын.
- Мин.
- Аксенов!
- Бында.
- Борисова!
- Урынында.
- Басырова!
- Эйе.
- Сапарбаев!
- Бар гой.
- Ярбулов!
- Һәр ваҡыт әҙер.
- Бәйһеҙләнмә, Ярбулов. Ҡара уны!.. Якименко!
- Ҡайҙа китәйем, әйкәйем.
- Һине лә киҫәтәм, Якименко!.. Барыһы ла урынында, Идеал Салютович. Сәйер. Тимәк, яңы уҡытыусыны һынап ҡарарға булдығыҙ. Хуп, бик хуп. Ҡарағыҙ уны, тағы ҡабатланһа, мине беләһегеҙ, - мәктәп хужаһы бармаҡ янаны ла сығып китте.

- Уҡыусылар, тәүге темабыҙ деталде өс проекцияла ҡағыҙға төшөрөү, - Идеал теманы яҙа була таҡтаға боролғайны, ҡайҙандыр килгән тоноҡ тауыш ишетте. "Ябеда, ябеда, ябеда...", - ти ине күмәк шыбырҙау. Ҡапыл класҡа әйләнеп баҫты. Тынлыҡ. Уҡыусылар, бер ни булмағандай, китап-дәфтәрҙәренә эйелгән.

Был хәл бер нисә тапҡыр ҡабатланды. Аптырағас, Идеал йөҙөн дәрес бөткәнсе уҡыусыларҙан алманы.

Түбән синыф балаларының этлеге башҡараҡ булып сыҡты. Улар, дәрес үткәрергә ирек бирмәй, бөтмәҫ һорауҙары, фәлсәфәләре менән йөҙҙәтте. Күрәһең, был мәктәптә йәш уҡытыусыны һынау йолаһының башы тарих төпкөлөнә барып терәлә һәм ул быуындан-быуынға ҡәҙерләп тапшырыла. Юғиһә, был тиклем дә берҙәм һәм эҙмә-эҙлекле атҡарылмаҫ ине ул.

- Һыҙма фәне белгесе булараҡ, әйтегеҙ әле, Идеал Салютович, идеаль шар буламы? Алдан белеп торам, һеҙ ыңғай яуап бирәсәкһегеҙ. Ә мин әйтәм: булмай! Геометрия фәне күҙлегенән сығып фекер йөрөткәндә, түңәрәктең, йәғни шарҙың һыҙма образының һәр нөктәһенән бер генә һыҙыҡ үткәреү мөмкинлеге бар. Шул рәүешле биллион тапҡыр биллион һыҙыҡ һыҙа алабыҙ уны әйләнеп сыҡҡансы. Һәр һыҙыҡ күпмелер миҡдарға алдағыһынан ауыша, тимәк, мөйөш барлыҡҡа килтерә, әйтәйек, микрон үлсәмендә. Ни миҡдарҙа бәләкәс булмаһын, ул - мөйөш, һикәлтә. Һикәлтә булғас, түңәрәк идеаль түгел, - лупалы күҙлек кейгән "ботаник" оҙон фәлсәфәгә төшөп китте.

Юҡ-бар хәбәр һөйләһә, Идеал уны бүлдерер, урынына ултыртыр ине. Был белемсе иһә фән тураһында аҡыллы һүҙ әйтә шул тороуында. Тыйып, йә бәхәскә инеп, үҙенең наҙанлығын күрһәтһенме? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Әгәр риза булмаһағыҙ, иҫбатлағыҙ киреһен, тип төпсөнә башлаһасы? Түҙҙе, тыңланы. Тынысланып, дәресте башлағайнылар, икенсе уҡыусы деталдәрҙе һынландырған һыҙыҡтарҙың рациональ булмауы тураһында хәбәр күтәрҙе. Бәхәскә башҡалар ҡушылып китте. Ярты дәресте алды ике күпбеләр. Башҡа көндәрҙә лә шул хәл ҡабатланды. Уҡыусылар алмашлап махсус рәүештә әҙерләнеп киләләр һымаҡ тойолдо Идеалға.

Уның ҡарауы, бәләкәстәр менән ял итте. Сатай-ботай һүрәттәрен маҡтап ебәрһә, мөкиббән китеп уҡытыусыға бағалар, тағы ла тырышып ҡәләмгә тотоналар.

Сентябрь үтеп, октябрҙың урталары етеүгә юғары синыфтар менән уның араһы тамам боҙолдо. "Ябеда" ғына булһа, бәлки, түҙер ҙә ине. Дәрестә бөтөнләй яуап бирмәйҙәр, әҙерләнеп килмәйҙәр, юғары билдә талап итәләр, битенән алып:

- Бөгөн миңә "бишле" ҡуяһың, ә киләһе дәрестә - Якимға, - тине "һинән" һалдырып Ярбулов көндәрҙең береһендә.

- Нимә-ә-ә? - Идеал был тиклем хурлауҙы күтәрер хәлдә түгел ине.

- Бер нимә лә түгел - тик "бишле" генә! - Уҡытыусы бер башҡа түбән булыуын онотоп, уҡыусыһының иҙеүенән бороп тотоп алғайны. - Быныһын артыҡлап ебәрҙең, Идеал Салютович, - Ярбулов, ҡураныс уҡытыусыһын биленән тотоп күтәрҙе лә, тирә яғына күҙ ташланы.

Ситтән ҡарап тороусылар өсөн был үтә лә мәҙәк, ә Идеалға ғәрлекле күренеш ине. Уҡытыусы уҡыусыһының иҙеүенә сытырман йәбешкән дә уның күҙҙәренә текләгән. Ә уҡыусы, уҡытыусыһын билбау ҡайышынан күтәреп, артыҡ көсәнмәй яйлап ҡына атлай. Ҡорбанының аяҡтары, йәнһеҙ бауланып, улай-былай болғана. Әгәр мөмөкин булһа, Идеал ер тишегенә инеп китер ине шул мәлдә.

- Яким, ас шкафтың ишеген, - Ярбуловтың ҡиәфәте үҙгәрешһеҙ ҡалды, тик ирендәре генә ҡыбырланы.

Якименко дуҫының әмерен үтәргә ашыҡты.

Ярбулов Идеал Салют улын һаҡлауға ҡуйылған төрлө плакаттар эргәһенә ипле генә төшөрҙө лә, ҡулдарын иҙеүенән һыпыра тартып ысҡындырып, ишекте япты, элмәген ҡаптырҙы:

- Дәрес бөттө, иптәштәр, - тип ҡысҡырҙы шунан әйләнеп.

Бөтәһе лә шаҡ ҡатты. Был тиклем хаяһыҙлыҡ шаһиты булғандары юҡ уларҙың. Эйе, уҡытыусылары менән төрлөсә булышалар. Йә журналды йәшерәләр, йә борос һибәләр уның биттәре араһына, хатта ултырғыстарына кнопка һалған саҡтары ла булды. Тик мөғәллимдәренә ҡарата көс ҡулланыуға, уларҙы тупаҫ йәберләүгә барып еткәндәре юҡ әле.

- Һин нимә, танауың бөтөнләй еҫ һиҙмәй башланымы әллә? Сығар уны! Аттестатһыҙ ҡалғың киләме, туң баш? - Айгөл Басырова уҡытыусыһын яҡлай була синыфташын ороштororға кереште.

- Йәлләһәң, үҙең сығар, - ултырғыстар, парталар шатыр-шотор ҡуҙғалды. Күрәһең, барыһы ла кластан сығыуға ыңғайланы.

Идеал ҡараңғы шкафта йә тере, йә үле түгел тора бирҙе. Ул фекерләү ҡеүәһен юғалтҡайны шикелле. Шаңҡып тик торҙо. Ваҡыттың иҫәбен юғалтты. Уҡыусылары менән уның йәш араһы - ни бары өс-дүрт йыл. Тиҫтерҙәр, тип тә әйтергә мөмкин шуға. Тәпәш буйын, сибек кәүҙәһен иҫәпкә алғанда, уларҙан бер ни менән дә айырылмай. Көс-ғәйрәтен ҡайҙа ҡуйырға белмәгән үҫмерҙәрҙең уны тиң күреп ҡыланыуы шунан килде, буғай.

- Сығығыҙ, Идеал Салютович, - яҡтыға күҙҙәре сағылған егеттең ҡаршыһында Айгөл, тағы ла бер нисә ҡыҙ тора ине баштарын эйә биреп. Йөҙҙәрендә - ғәйепле сырай. Тотҡондан гүзәлкәйҙәрҙең сығарып алыуы тағы ла түбәнһетте Идеалды. Бер ни өндәшмәй, йәһәтләп портфеленә китап-дәфтәрҙәрен йыйып һалды ла атылып тышҡа ташланды. Башҡа был мәктәпкә аяғымды баҫмайым, тип һамаҡлап барҙы юл буйы фатирына ҡайтып еткәнсе. Аллаһы Тәғәләнең "Амин" тигән мәленә тап килгәндер был теләге. Өйҙә уны армияға саҡырыу ҡағыҙы көтә ине.

* * *

Ҡорал тотоп, дәртләнеп, бик теләп Ватан һағына сафҡа баҫҡайны егет. Тик армияла, иҙән йыуғысындай күреп, уның менән бысраҡ һөрттөләр, намыҫын ергә һалып тапанылар, әсир төшкән тотҡондай ирекһеҙләнеләр. Дүрт ай ҙа хеҙмәт итеп өлгөрмәне - сараһыҙлыҡтың сигенә етте, битен юғалтты Идеал Хөбөтдинов. Дәүләткә хеҙмәт итә алманы, сөнки дәүләт үҙе уны яҡламаны.

Бер ай карантинда тотҡас, иптәштәре менән йәмғеһе егерме биш йәш һалдатты ротаға тәғәйенләнеләр. Ятып-торор урындары билдәле булғас, әйберҙәрен каптеркаға тапшырҙылар ҙа, бына, исмаһам, ысын һалдат тормошо башланды, тип эске бер ғорурлыҡ менән әле танышып өлгөрмәгән хеҙмәттәштәре янына ашыҡтылар.

Казармала уның ҡайһы тарафтарҙан булыуын, ырыу-ҡәүеме тураһында белештеләр. Яуабын алғас, Башҡортостанда һылыу ҡыҙыҡастар бармы, клеш салбары балағын шулай уҡ киң йөрөтәләрме, еткән сәс әле лә модаламы, тип һоранылар.

- Көтөп ҡалған ҡыҙың ташлаһа, йәшермә, әйт. Хөкөмдө үҙебеҙ сығарабыҙ ундайҙарға. Тәүҙә суд үткәрәбеҙ, шунан "палач"тар хыянатсының фотоһүрәтен крем менән ялтыратып таҙартылған һинең итегеңдең йөҙөнән ҡараға буялғансы йөрөтөп, дағаһы менән бите төшкән урындан йыртa баҫалар һәм тантаналы рәүештә яндыралар. Беҙҙең часть тарихында шундай "суд" арҡаһында ташлаған ҡыҙ өсөн муйынына элмәк һалыусы йә атылыусы булғаны юҡ. Ҡара уны, йоланы боҙа күрмә, - тип нотоҡ уҡып алдылар.

Бер аҙҙан:

- Ҡайҙа минең яҡташ? Күрен әле, - тип яр һалған тауыш ишетелде.

Көттөрмәй тауыш хужаһы ла күренде. Ул пилотканы ҡырын һалған, һалдат ҡайышын кәрәгенән күпкә бушатып таҡҡан, яғаһы аҡлығы менән күҙҙең яуын алып торған ҡупшы гимнастерка, ялтыратып таҙартылған хром итек кейгән һалдат ине.

- Ошо хөрәсәнме ни минең зема? Ҡымыҙ эсеп, ҡаҙы ашаған башҡорт араһында һинең кеүектәрҙе күргәнем юҡсы. Городскоймы әллә?

- Эйе, - тине Идеал аҡланғандай.

- Саша, Силәбенән мин. Бинахаҡҡа йәберләһәләр, әйтерһең. Тик салага бурыстарын иңеңдән алып булмаҫ. Әрме ҡанундары ҡаты, "дед" әйтһә - закон. Үлһәң үл, әммә ләкин ҡушҡанын эшлә. Үҙем ваҡытында шайтан кеүек осоп йөрөнөм төн йоҡоларын онотоп. Уның ҡарауы - үҙеңә лә тәтер, әгәр түҙһәң, "бабай"лыҡ ләззәттәре. Лайыҡлы хеҙмәт ит, минең битемә ҡыҙыллыҡ килтермә. Земаң былай, земаң тегеләй, тип хәбәр ишетерлек булмаһын, - Идеалдың яурынына ҡаты ғына итеп һуҡты ла, үҙ йомоштары менән китеп барҙы "бабай". Идеал күрше өлкәнән алынғайны армияға, Силәбе Сашаһының, зема, тиеүе шунан ғибәрәт.

Кис етте. Дневальный отбой ҡысҡырҙы. Башы мендәргә терәлеүе булды, әүен баҙарына китте Идеал.

- Подъем, салага, - ике ҡатлы карауаттың аҫҡы урынын биләгән "бабай" йәнасыҡҡа аҫтан типте.

Идеал бер ни ҙа аңламаны. Ҡайҙа, нишләп ятҡанын да, ниндәй мәхшәр ҡупҡанын да, ни эшләргә тейешлеген дә. Иҙәнгә осопмо, әллә үҙ аяҡ-ҡулдары ярҙамында төштөмө - быны ла аңғарманы. Ни булһа ла, күҙ асып йомған арала, иҙәндә, карауатының тимеренә тотоноп, ҡайҙа атларға, ни ҡылырға белмәй миңрәүләнеп тора ине.

- Салаги, строиться! - команда ла барып етмәне Идеалға. Йоҡлап ятҡан ерҙән йолҡоп алып торғоҙған йәш кеше ысынбарлыҡҡа ҡайтырлыҡ хәлдә түгел, йоҡоһона илереп тик тора.

- Команданы ишетмәйһең мәллә, салабон? Йүгер! Марш стройға! - артына ҡаты ғына типтеләр.

Иҫе ҡайтҡандай булды. Дневальный тумбочкаһы янындағы тоноҡ электр яҡтыһын, аҡ ыштан-күлдәктән сыуалышҡан иптәштәрен абайланы, команданың мәғәнәһе зиһененә барып етте.

- Йәш һалдат курсы башлана, салабондар. Тигеҙләнергә!.. Сми-и-ирна!.. - йоҡоларынан арына алмай ыҙаланған йәш һалдаттарҙы сержант, этеп-төртөп, шунһыҙ булмағандай урында - тос ҡына арт яҡтарына тибеп, бер һыҙыҡҡа теҙҙе. Уға ярҙам итеп, тағы икәү-өсәү йөрөнө.

- Уставты өйрәндегеҙ, белемегеҙҙе практикала әфисерҙар алдында күрһәтерһегеҙ... Ә хәҙер ысын һалдат хеҙмәте тураһында занятие. Иң тәүге һабаҡ шул: казарманың үҙ ҡанундары! Икенсеһе - уставты боҙорға мөмкин, ә казарма закондарын юҡ! Шуны онотмаһағыҙ, дембелгә имен-аман барып етергә насип булыр үҙегеҙгә. "Бабай" - закон да, атайығыҙ ҙа! Быны мейегеҙгә сүкеп ҡуйығыҙ! Ә хәҙер һеҙҙең һәр берегеҙгә "шеф" беркетәбеҙ. Әйҙә, "бабай"ҙар, "ҡолдарҙы" бүлешеп алығыҙ, - сержант ситкәрәк китеп баҫты.

Идеал үҙен төш күргәндәй хис итте. Ул ҡайҙа килеп эләкте, нишләп тора бында башын эйеп, һүҙ әйтергә ҡурҡып? Ихтыярын тулыһынса үҙҙәренә буйһондорған был әҙәмдәр кемдәр, кем биргән уларға кеше өҫтөнән был тиклем хоҡуҡты? Беләктәрен ҡапшап ҡарайҙар, төрлө күнекмәләр эшләргә ҡушалар, хатта, ауыҙҙарын астырып, тештәрен байҡайҙар - әйтерһең боронғо ҡолдар менән сауҙа итеү баҙары. Идеалды алыусы булманы.

- Быныһынсы? - тине сержант.

- Бигерәк хөрәсән, ауыр эшкә ярамай. Унан ни файҙа, - тиештеләр "ҡолбиләүсе"ләр битараф ҡиәфәттә.

- "Бабай"ҙар, тәртипте боҙаһығыҙ. Ҡараусыһыҙ йәш һалдат булырға тейеш түгел ротала. Сафронов, һиңә беркетәм!.. Тейешенсә тәрбиәлә...

- Ярай, һуң, - тине уныһы ризаһыҙ ғына.

Көсләп таҡҡанға әллә, ҡаныҡып-ҡаныҡты Сафронов. Казармала үткәргән тәүге төндә Идеалға ике-өс сәғәт кенә йоҡо тейҙе. Иртәгеһенә "шеф"ы ҡарауылға тәғәйенләнде. Төндә эш менән йонсотоусы булманы.

- Йыуып эл, иртәнсәккә кипкән, үтекләнгән булһын, - тине икенсе көн кис нарядтан ҡайтҡан Сафронов үҙенең һалдат формаһын Идеалға ташлап.

**(Дауамы. Башы 3-сө һанда).**

✓ Ул тиҙ арала һул ҡулы менән яҙырға өйрәнде, почергы ысынъяһау, сәнғәт әҫәре кеүек килеп сыға ине. Миндә уның һул ҡулы менән яҙған байтаҡ ҡына хаттары, әҙәби әҫәрҙәре һаҡлана.



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Былтырғы йыл аҙағында үҙенең һикһән йәшлек юбилейын билдәләгән Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, З. Биишева исемендәге премия лауреаты, танылған шағирә Әнисә ТАҺИРОВАға төбәнек өс һорауыбыҙҙы.**



# ДАН АРТЫНАН ДА,

## мал артынан сапманым...

**➔ Әнисә апай, һеҙҙең әҙәбиәткә булған һөйөүегеҙ шундай көслө, айырыуса, шиғриәт тураһында һүҙ башлаһаҡ, гүйә, икенсе һулышығыҙ асыла. Ижад юлына килеүегеҙгә кемдең йоғонтоһо көслө булды?**

- Минең әсәкәйем шиғри күңелле ине бит. Төп һөнәре буйынса фельдшер-акушер булһа ла, ул бер ҡасан да ижадтан айырылманы. Мин иҫ белгәндән шиғырҙар яҙҙы һәм һәр саҡ минә уҡып ишеттерә торғайны. Әсәйем һуғыш, унан һуңғы ауырлыҡтарҙы күрҙе, ә бына бер ҡасан да күңел матурлығын юғалтманы. Һуғыштан бөгзе фронтовиктар эсергә әүәҫләнеп ҡайтты, минең атайым, үкенескә ҡаршы, шуларҙың береһе ине... Шуға аптырайым, берәү булһа, уҫалға әйләнер, холҡо үҙгәрер ине бит, ә әсәйем һәр саҡ тормошҡа һоҡланыулы ҡараш менән йәшәне. Әҙәби донъя, сәнғәткә мөхәббәте, шиғыр яҙыуы уға көс биргәндер, тип уйлайым. Кешелеклелеген, бөйөклөгөн юғалтманы. Мине беренсе класҡа алып барған мәле лә шундай яҡты хәтирә булып һаҡлана. Хатта уҡытыусымды хәтерләмәйем, ә уның әйткәндәре ҡолаҡта сыңлай. "Матур итеп уҡырға тырыш, балам", - тип, мине етәкләп алып барҙы әсәйем. Шунан: "Курсаҡ театры килгән", - тип тамашаға алып китте. Иҫем китеп ҡарап торам: малайҙар, ҡыҙҙар, төлкө-бүреләр килеп сыға, уйнайҙар, һөйләшәләр.... Йәнлектәрҙә һөйләшә! Әллә нисә көн шаңҡып йөрөнөм. Бына шулай ул мине әҙәбиәт, сәнғәт донъяһына алып инде.

Әсәйем мине үҙебеҙҙең Маҡар ауылы янындағы Һикәҙе йылғаһы буйына алып сығып китә, унда илһамланып шиғырҙарын һөйләй. Талантлы кеше үҙенең күңел бөйөклөгөн юғалтмай барыбер. Шул ваҡыттарҙа шиғриәттең көсөн аңланым. Мәктәптә уҡығанда мин дә шиғыр яҙа башланым. Ижад менән шөғөлләнгәндә белгәс, стена гәзитенең мөхәррире итеп ҡуйҙылар.

Минең әсәйемә йәш сағында: "Әҙәбиәт юлын һайла, шағирә булырға тейешһең", - тигәндәр. Был 1937 йылдарға тура килә. Ижад юлынан китәм тиген мәлендә уның бер етәксеһен тотоп аталар. Шул ваҡыттарҙа бик күп яҙыусылар ҡулға алынып, хөкөм ителә. Әсәйем ваз кисеп, медучилищеға инә, ләкин яҙыуҙан туҡтамай. Миндә лә, һеңлем Әлисәлә лә уның шиғыр дәфтәрҙәре һаҡлана. Тимер Йосопов әсәйемдең шиғырҙарын юғары баһаланы. Уларҙы баҫтырып та сығарҙы. Бына шулай ижад орлоҡтарын минең күңелгә әсәйем һалды.

**➔ Һеҙҙең тәржемәүи хәлегеҙҙе "Башҡортостан ҡыҙы" журналынан тыш күҙ алдына килтереп булмай. Журналды киң донъяға сығарыу, таныттырыу һәм таратыу еңел булмағандыр бит?**

- Тәүге юл ярыусыларға еңел булмай шул, ул саҡтарҙа әлеге һымаҡ транспорт юҡ, ә районға бик йыш йөрөргә тура килде. Билдәһеҙ журналдың билдәнеҙ хәбәрселәрен бер ерҙә лә көтөп тормайҙар. Үҙемдең дә йөрөргә урыным юҡ, өйҙән-өйгә күсеп йөрөйөм. Шуға ҡарамаҫтан, журналды таныттырыу өсөн алныҙ-ялныҙ эшләйбеҙ. Минең урынымда бүтән берәү булһа, сыҙамаҫ та ине, бәлки. Баштараҡ уңышһыҙлыҡтарҙан ҡанат һынған, хәлдән тайып ауырып киткән саҡтар була торғайны. Фәүзиә апай Рәхимғоловаға рәхмәтлемен. Әрһеҙ ине ул. Икеүләп тә сығып китә торғайныҡ, ныҡышып эшләп йөрөнөк. Яңы авторҙар эҙләйбеҙ. Университетҡа барып, йәштәрҙең ҡулъяҙмаларын үҙем йыя торғайным. Алып ҡайтып, шуларҙы эшкәртәм. Таңһылыу Ҡарамышева, Рәмзилә Хисаметдинова һәм башҡа авторҙарҙың тәүге ижад емештәре беҙҙә баҫылды. Шулай редакцияла ижади тормошто гөрләтергә тырыштыҡ. Журналдың яуаплы сәркәтибе Рәми Ғарипов эште бик матур алып барҙы. Шағир булараҡ, кешегә тиҙ ышаныусан булһа ла, редакция эшендә талапсан ине. Ҡайһы бер ағайҙар эскән килеш килеп өҫтәлгә ауып китә торғайнылар. Рәми ағай менән нисә йыл бергә эшләнек, бер ваҡытта ла эскәнен хәтерләмәйем. Ләкин илһөйәр, рухлы шағирҙы яратмағандар ҙа бар ине. Шунан бер мәл мине Башҡортостан телевидениеһына туҡтауһыҙ саҡыра башланылар. Рәми ағай менән бергә эшләп ултырғанға әллә махсус эшләнеләрме, тип тә уйлап ҡуям хәҙер. Ахырҙа мин телевидениеға эшкә күстем. Һәр хәлдә, "Башҡортостан ҡыҙы"н таныттаҡ ҡына киттем мин унан.

**➔ Ауыр саҡтарҙа ҡайҙан көс йыя алдығыҙ?**

- Беҙҙең заманда яҙыусылар бик иғтибарлы, ярҙамсыл булды. Редакцияға берәй ҡулъяҙма алып барһам, ҡуш ҡуллап алып ҡалалар ине. Әлбиттә, мин бөтәһе лә алда гөл булды тип әйтергә йыйынмайым, ләкин дөйөм алғанда һәр саҡ рухи яҡынлыҡты тойоп йәшәнем. Миңә ижадым һәм хеҙмәтем йәшәргә көс бирҙе һәм бирә.

Яҙмыш һынауҙары булды, ләкин мин хәләл ризыҡ табып йәшәргә тырыштым. Беҙҙең әҙәбиәт донъяһында ла нәфсегә буйһоноп, еңел, мул аҡса табыу, исем-дан артынан ҡыуыу һымаҡ нәмәләр булманы түгел, булды. Мин быларҙың береһенә лә ҡыҙыҡманым, алданманым. Тапҡан ризығым хәләл булды - дан артынан сапманым, мал артынан сапманым. Өләсәйҙәрҙең, иманлы йәшә, тигән васыяты ышаныс бирҙе. Зәйнәб апай Биишева менән аралашып йәшәнем, телевидениела эшләгәндә уның тураһында бик күп тапшырыуҙар төшөргәйнем, шуның өсөн З. Биишева исемендәге премияны бирҙеләр. Минең иң ҙур шатлығым - егерме биш китабымдың донъя күреүе.

Ижад һәм хеҙмәт менән үтә ғүмерем, шуға ла Хоҙай мине был донъяла йәшәтәләр тип уйлайым. Аллаһы Тәғәләгә һығынып йәшәйем.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА яҙып алды.**

ХӘТЕРКИТАП



# ҒАЗАПТАРЫ МЕНӘН ҒОРУР ИНЕ...

**Буранбай Исҡужиндың тормошо тотошлайы менән парадокстарҙан торҙо. Ижады ла быңдай асылдан азат була алманы. Гайканы болтҡа борған саҡта бер тапҡыр ҡыйыш китһә, аҙаҡтан уны нисә тапҡыр борһаң да, шул ҡыйыш юлынан киткән кеүек, Буранбайға кемдәр тарафынан ғына ниндәй генә йоғонтолар яһалмаһын, ул барыбер ҙә үҙенең "Буранбай асылына" тоғро булып ҡалды. Уны үҙгәртеү һәм һаҡлап, оҙағыраҡ йәшәтергә тырышыу булмаҫтай ваҡиға ине.**

Ул донъяға Хаҡ Тәғәлә тарафынан ут һәм һыу менән дә, мөхәббәт һәм нәфрәт менән дә, изгелек һәм яуызлыҡ менән дә, барлыҡ һәм юҡлыҡ менән дә, аҡ һәм ҡара менән дә, тән һәм көн менән дә һыналыр өсөн ебәрелгәйне, буғай. Үҙен, беләгүрә, берсә утҡа, берсә һыуға һалыуҙарын, тырышып-тырмашып ғазаптарға ынтылыуын башҡаса бер нисек тә аңлатып булмаҫ кеүек.

Афған шағиры Сөләймән Лайыҡтың "Ғазаптарым менән ғорурланам" тигән шиғри юлдарын девиз итеп алып үтте, гүйә, Буранбай тормош юлынан. Ғазаптары менән ғорур ине ул. Мулла ҡушҡан Бүребай исеменән баш тартып, халҡыбыҙ тарихының мең ғазаплы Буранбай исемен үҙенә алыуы ла юҡҡа ғына түгел ине. Әллә исемгә есемде тап килтерергә тырышты инде? Әллә - киреһенсәме? Нисек кенә булмаһын, ябай ғына аңлатмаларға һыйҙырып булмаҫлыҡ Буранбайҙың тормош һәм ижад юлын.

50 йәше тулыу уңайынан республика йәштәре гәзитенә биргән интервьюһында Буранбай, һәр ваҡыттағыса, шаярыу ҡатыш һәм үҙенә генә хас кинәйә менән журналистың: "Артабанғы йылдарға ниндәй ижади пландар ҡораһығыҙ?" - тигән дежур һорауына шундайыраҡ дежур булмаған һүҙҙәре менән яуап биргәйне: "... имен-аман, һап-һау көйө үлеп китергә яҙһын..."

Ижадсының был һүҙҙәре юмор менән әйтелһә лә, уларҙың артында оло кинәйә лә ята булыр. Сиргә дусар булып, кемдәндер мәрхәмәт, ярҙам там итеп, өмөт баглап, бахырланып йәшәүгә ҡарағанда, үҙе әйткәнсә, "имен-аман, һап-һау" көйө үлеүҙе артыҡ күргән шағир.

Буранбай шағир, прозаик, драматург, сатирик булараҡ ҡына түгел, һәр йәһәттән дә талантлы булды. "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ", тигән әйтем тап уның хаҡында. Ул етмеш төрлө һөнәрҙе лә ижади зауыҡ менән, юғары профессиональ кимәлдә башҡара белә ине. Уның һөнәрҙәренең мин белгәндәре генә: гармунсы, ҡурайсы, мандолина сиртеүсе, скрипкасы, ҡумыҙсы, көрәшсе (уң ҡулын өҙҙөргәнгә тиклем), бейеүсе, рәссам, балта оҫтаһы, тегеүсе, ашнаҡсы, баҡсасы, бәшмәксе, балыҡсы, натуралист, саңғысы, һ.б.

Ҡазаға тарып, уң ҡулһыҙ тороп ҡалғас, уның яңы шарттарға нисек ҡулайлашыуына үҙем шаһит булдым. Ул тиҙ арала һул ҡулы менән яҙырға өйрәнде, почергы ысынъяһау, сәнғәт әҫәре кеүек килеп сыға ине. Миндә уның һул ҡулы менән яҙған байтаҡ ҡына хаттары, әҙәби әҫәрҙәре һаҡлана. Һул ҡулы усының эсендә яткан шырпы ҡабынан бөртөгөн алып, шунда уҡ ут ҡабыҙыу тиһеңме, бер ҡул менән генә картуф әрсеү тиһеңме, барлыҡ-барлыҡ ғәмәлдәрҙе лә ул юғары профессиональ кимәлдә башҡара ала ине. "Бары тик күлдәгемдең һул еңе осондағы төймәһен генә элә алмайым..." тип шаяртҡаны әле һаман иҫемдә.

Шулай ҡотло ҡуллы, ҡотло юллы ине Буранбай. Һул ҡулы менән генә бешергән аштары ла ашап туйғыһыҙ татлы, ҡылған ғәмәлдәре күркәм, затлы булды. Үҙе берике көн генә булһа ла һин дә мин йөрөп алһа, йөҙөнә, һын-һыпатына, ғүмүмән, тормошона ҡот, бәрәкәт ҡунырға әҙер генә тора ине. Үҙен кисә генә "тибендә" йөрөгән кеше тимәҫһең. Ап-аҡ күлдәк, галстук, тройка костюм, салбарындағы үтек уғы менән шалҡан турарлыҡ, лаклы туфли, кеҫәһендә хушбуй еҫе сығып торған, тәкләнеп һалынған ҡулъяулыҡ. Үҙенең ҡылғандай шырт сәсе тигеҙ итеп ҡырҡылған, әҙерәк ҡыҙарыңҡырап торған ҡырыҫ йөҙөндә кинәйәле йылмайыу ғәләмәте. Кисә генә, үҙе әйткәнсә, "Аҡса барҙа тин-тош һыйлайым, тип, трамвайлыҡ та тинһеҙ ҡалһа" ла, бөгөн яңы сүрәткә ингән Буранбайҙың кеҫәһендә ҡайҙандыр байтаҡ ҡына аҡса ла барлыҡҡа килә. Холҡонда ла, әллә ҡайҙан феодал сифаттары пәйҙә була үҙенең. Феодал, әммә һаран түгел, һуңғы тиненә, һуңғы кейеменә тиклем башҡаларға хеҙмәт итеүсе "феодал".

Уның бына ошондай елле, фыртауай саҡтарының күп тапҡырҙар шаһиты булдым. Шундай даланлы, әләшлә бәндә булыуы һоҡланырлыҡ та, көнләшерлек тә ине. Әгәр ҙә шул сүрәткә ингән Буранбай бер йыл ғына йөрөһә, ниндәйен шәхескә әйләнерен дә төҫмөрләй инем. Әммә ул мин һәм башҡалар күрергә теләгән һәм үҙе өсөн мөмкин булған юлды һайламаны, үҙенең ҡотолғоһоҙ әжәленә йүгерә-атлай барҙы. Уны һаҡларға тырыштыҡ, ҡулдан килгәндең барыһын да эшләп ҡараныҡ, тик саҡ ҡына ситкәрәк китһәк, ул йәһәт кенә кире үҙенең "Буранбай үҙәне"нә төшә һалды. Әллә инде ихтыяры етмәне, әллә үҙе юрамал шулай эшләне, тормош менән "һин" тип һөйләшеп, үҙ яҙмышы менән бик уҫал шаярҙы ул.

Бер мәл шулай урамда аңҡы-тиңке йөрөгән сағында: " Әйҙә, ағай, беҙҙең ауылға йәшәргә, Буранбай атлы шағир Буранбай ауылында йәшәргә тейеш", - тип, һалпы яғына һалам ҡыҫтырып, ауылыма алып ҡайтып, ҡунаҡ итеп, яңғыҙ йәшәгән бер егеткә лә ҡалдырып киттем үҙен. Оҙаҡ торлаҡламаны Буранбай Буранбайҙа, үҙенең баяғы "Буранбай үҙәне"нә кире төштө. Бер ниндәй рәсми сиктәрҙе, шартлы мөнәсәбәттәрҙе, формализмды үҙһенмәне ул, йәмәғәтселек урынында ла, урманда ла, ҡырҙа ла, шиғриәттә лә, прозала ла, драматургияла ла парадоксаль холоҡло, парадоксаль фекерле шул Буранбай булып ҡалды...

Вафатынан ике йыл алда ул миңә "Васыят" тип аталған яҙмаһын тапшырҙы. Ҡағыҙ 1999 йылдың 20 мартында яҙылған. Васыят ете пункттан тора, унда миңә ҡағылған юлдар ҙа бар. 1-се пункт шундай һүҙҙәрҙән тора: "Мине, үлгәс, ҡайҙа ҡуйһағыҙ ҙа ризамын. Тик башҡорт төйәкләгән ер генә булһын".

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛА ҠУЛЫНА КИТАП БИР!

■ Билдәле булыуынса, бала ҡулдарының әүҙемлеге ни тиклем юғарыраҡ булған һайын уның фекерләү ҡеүәһе лә тиҙерәк үсешә, бала яҡшыраҡ һөйләшә. Белгестәр шуға ла китапты баланың ҡулына иртәрәк тотторорға кәңәш итә. Ул уның биттәрен асырға маташҡанда ла, биттәрен һыйпап ҡарағанда ла ҡулдарға яҡшы массаж яһала. Шулай уҡ балалар китаптары тәҡдим итеүсе етештереүселәрҙең төрлө уйынсыҡ формаһында яһалған китаптарын да бәләкәсегеҙ яратып уйнаясаҡ. Былар барыһы ла баланы киләсәктә китап уҡырға яратырға ла күнектерәсәк, ти белгестәр.

■ Ҡала ығы-зығыһы, юлдарҙағы тығындар, йәмәғәт транспортындағы халыҡ, эштәге стресс һәр кемдең нервыларын ҡаҡшатыу һәләтенә эйә. Әгәр ҙә эшкә һәләтлелегегеҙ кәмеһә, йоҡлай алмаһағыҙ, күңелегеҙҙе хәүеф тойғоһо биләп алһа, спорт менән шөғөлләнә башлағыҙ, тип кәңәш итә табиптар. Шулай уҡ башҡа төрлө физик әүҙемлек тә шатлыҡ һәм бәхет гормондары - эндорфиндарҙың кимәле күтәрелеүгә килтерә. Бынан һуң шунда уҡ кәйефегеҙ күтәреләсәк, насар уйҙар тараласаҡ.

■ Көньяҡ Корея урынлашҡан Оҙон ғүмер университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, асығыу йәки ашауҙы ныҡ сикләү ғүмерҙе оҙайта икән. Улар белдереүенсә, организмға туҡлыҡлы матдәләр етешмәгән ваҡытта ҡанда холестерин кимәле генә түгел, инсулинға оҡшаш үсеү факторы (IGF-1) тип йөрөтөлгән гормон да түбәнәйә. Был гормон организм өсөн зыянлы түгел, хатта файҙалы ла, ул туҡымаларҙың яңырыуында ҡатнаша. Әммә уның кимәле артып китһә, ул беҙгә ҡаршы эшләй башлай, сөнки ҡартайыуҙы тиҙләтә. Шул уҡ ваҡытта, асығыу файҙалы булһа ла, алдан табиптар менән мотлаҡ кәңәшләшергә кәрәк, тип иҫкәртә был асышты яһаған ғалимдар.

■ Испания һәм Италияның бер төркөм ғалимдары раҫлауынса, баҡса еләге экстракты ҡояш нурланышынан һәм ҡояшта бешеүҙән һаҡлай. Был яһалма юл менән үҫтерелгән тирелә тикшерелеп ҡаралған, алдан тирене ультрафиолет нурҙарында нурландырғандар. Баҡса еләге экстракты менән эшкәртелгән тирелә күҙәнәктең һаҡланыу көстәре әүҙемләшкән, асыҡланыуынса, ул яман шеш йәки ялҡынһыныуға килтереүсе процестарҙан да һаҡлаған. Ғалимдар фекеренсә, баҡса еләгенең дауалау көсө антоциан тип йөрөтөлгән ҡыҙыл пигменттарҙа икән - тап улар ялҡынһыныуға ҡаршы һәм антиоксидант һеҙөмтәгә эйә.

■ АҠШ-та үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡарбуз атеросклероз үсеше хәүефен кәметә. Кентукки университеты сысҡандарҙа һынау үткәреү өсөн уларға юғары холестеринлы аҙыҡ ашатҡан. Шул уҡ ваҡытта бер төркөм сысҡандарға ҡарбуз һуты эсергәндәр, икенселәре ябай һыу эскән. Һигеҙ аҙна үткәндән һуң ғалимдар сысҡандарҙың ауырлығын үлсәгән һәм килеп сыҡҡан һеҙөмтәләрҙе сағыштырған. Ҡарбуз һуты эскән сысҡандарҙың ауырлығы кәмерәк, уларҙың ҡан плазмаһындағы холестерин кимәле лә әҙерәк булған.

ӨФӨ РАЙОНЫ

# ЕҢЕҮСЕ ИСЕМЕНДӘГЕ АУЫЛДА...

## - еңеүселәр тәрбиәләнә



**Жуково тиеү менән, күҙ алдына иң элек "Еңеү маршалы" тигән ҡушамат алған арҙаҡлы хәрби етәксе Георгий Жуков күҙ алдына баҫа. Шуға ла ошо ауылдағы һәр кем бары тик еңеүгә ынтылған кеүек.**

2013 йылда төҙөлгән "Карлуғас" балалар баҡсаһы ла заман менән бергә атлай һәм уның да ауыҙ асып һөйләрҙәй еңеүҙәре бар: 2019 йылда "Рәсәйҙең өлгөлө балалар баҡсаһы" исеменә лайыҡ булһаҡ, быйтыр иһә "Рәсәйҙең иң яҡшы балалар баҡсаһы" тигән исемде алдыҡ.

2015 йылдан бында һигеҙ төркөмдә - рус, икеһендә башҡорт балалары тәрбиәләнә. Башҡорт төркөмдәре ата-әсәләрҙең ғаризалары буйынса асылды. Был төркөмдәрҙә балалар башҡорт мәҙәниәтен, йыр-моңдарын, уйындарын, йолаларын, гөрөф-ғәҙәттәрен һендерә, төрлө иртәлектәрҙә матур итеп башҡортса үткәрә. Ата-әсәләр бик ҡәнәғәт. Хатта ҡайһы бер рус милләтле ата-әсәләр ҙә балаларын башҡорт төркөмөнә бирергә тырышып тора. Күрше ауылдарҙан да балалар ҙур теләк менән йөрөй беҙгә. Коллективыбыҙҙың йәш, дәртле, тәрбиәселәрҙең һәр береһе талантлы булыуы ла быға булышлыҡ итәлер. Ниндәйҙер сараға әҙерләнәбеҙ икән, урыҫтар ҙа башҡортса йырлай, ҡумыҙҙа, мандолинала уйнайҙар, шулай уҡ башҡорт тәрбиәселәре лә рус телендә булған сараларҙа ихлас ҡатнаша.

Быйылдан ата-әсәләр менән һөйләшеп һәм уларҙың ғаризаларына ярашлы, тәрбиә башҡорт һәм рус телдәрендә алып барылған билингвал төркөм астыҡ. Уларҙа элек башҡорт теле, рус теле уҡытыусыһы булып, тәрбиәсе һөнәренә уҡып алған тәжрибәле педагогтар эшләй. Балалар барлыҡ сараларҙа ике телдә сығыш яһай. Яйлап ҡына ике телдә һаулыҡ һорашыуҙан башлап, көн һайын яңы белем өҫтәлә бара.

Шулай уҡ мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә полилингвал төркөм асылды. Унда башҡорт, рус, инглиз телдәре өйрәнелә. Тәрбиәсе - инглиз теле уҡытыусыһы, уның ярҙамсыһы - башҡорт теле уҡытыусыһы. Беренсе йыл ғына булһа ла, балалар әллә күпме инглиз, башҡорт, рус һүҙҙәрен белә, аңлайҙар һәм сараларҙа өс телдә сығыш яһайҙар. Талаптар буйынса өлкән төркөмдәрҙә балалар бер йылда 80-90 һүҙ өйрәнергә тейеш, беҙҙең балалар унан да күберәк белә.


ГРАМОТА
ПОБЕДИТЕЛЯ
Всероссийского конкурса-смотра
"Лучшие детские сады России 2021"
с 15 января по 26 мая 2021г.
Награждается
образовательная организация
Муниципальное дошкольное
образовательное бюджетное учреждение
детский сад «Ласточка» с. Жуково
муниципального района Уфимский район
Республики Башкортостан
Руководитель
Хусаинова Резеда Абделгазиевна
за оригинальность представленных материалов

Өфө районында ике генә балалар баҡсаһында: беҙҙә һәм Дмитриевкала логопедик төркөм бар. Табиптар һығымтаһы буйынса 5 йәштән 6 йәшкә тиклем телмәре төҙөк булмаған йәки ауыр һөйләшкән балаларҙы ошо төркөмгә туплайбыҙ. Бындай төркөм икенсе йыл эшләп килә. Тәрбиәсе-логопедтар ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә балаларға өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтә. Ошондай төркөм асыуға ата-әсәләр ҡыуанып бөтә алмай, сөнки баланы ҡайҙалыр шундай төркөм булған балалар баҡсаһына урынлаштырыу, алыҫҡа алып йөрөү кәрәкмәй.

Район, республика буйынса ниндәй генә конкурстар, бәйгеләр үтмәһен, әүҙем ҡатнашабыҙ һәм гел призлы урындар яулап торабыҙ. Әммә проблемалар ҙа етерлек.

Ике йыл элек ауыл биләмәһе башлығы Алексей Щекатуровҡа Урындағы инициативаларҙы хуплау программаһында ҡатнашыу теләге булыуы тураһында әйткәс, ул ҡыуанып ҡабул итте. Былтыр тәрбиәселәр, ата-әсәләр менән әүҙем эшләп, еңеүсе булдыҡ һәм икенсе корпусҡа ике веранда, ике ҡомлоҡ, уйын комплексы һ.б. төҙөп ултырттыҡ. Быйылғы йылда беренсе корпуста ла ремонт эштәрен башҡарыу маҡсатында урындағы инициативаларҙы хуплау программаһында көсөбөҙҙө тағы һынап ҡарарға булдыҡ. Һөнөлгән ҡулды буш итмәм, тигән бит Аллаһы Тәғәлә. Бәлки, быйыл да беҙҙең балалар баҡсаһы сабыйҙары бәхетенән еңеү яулап, моратыбыҙға өлгәшербеҙ. Юҡҡа ғына Жуковола йәшәмәйбеҙ бит...

**Резида ХӨСӘЙЕНОВА,**
**"Карлуғас" балалар баҡсаһы мөдире.**
**Өфө районы Жуково ауылы.**

# ЕҢЕҮСЕ БУЛДЫМ!

**Мин Өфө районы Шамонин ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбенең 10-сы синыфында белем алам. Быйыл Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса үткәрелгән төбәк-ара олимпиадала ҡатнашып, еңеүсе булдым.**

Ошо мауыҡтырғыс, сәмле бәйгелә ҡатнашыу, бер яҡтан, енел кеүек тойолһа, икенсе яҡтан, ауыр булды. Сараға башҡорт телен, илен яратҡан, үҙ халҡы менән ғорурланған балалар йыйылғайны. Бөтәбеҙҙең дә матур, асыҡ итеп, бер рус һүҙен дә ҡушмай һөйләшеүебеҙ бигерәк тә оҡшаны. Конкурсанттар барыбыҙ ҙа үҙебеҙҙе бер татыу ғаилә кеүек тойҙоҡ, бер-беребеҙ менән таныштып, аралашып, уныштар теләштек. Еңеүсе икәнемде һуңғы минуттарға тиклем белмәнем. Олимпиаданы ябыу тантанаһында үҙ исем-шәрифемде ишеткәс, бик ныҡ тулҡынландым. Алдыма ҡуйған маҡсатымдың тормошҡа ашыуына шатландым һәм ғорурландым.




Был мәртәбәле сараға көн һайын әҙерләндем, уҡытыусым менән мәктәптә кискә тиклем әҙерләнеп ултырҙыҡ. Көн дә китап уҡып, хатта ундағы мөһим тип һанаған урындарҙы ике дәфтәр тулғансы күсереп яҙыуым еңеүемә ҙур өлөш индерҙе тип уйлайым. Шулай уҡ остазымдың да өлөшө бик ҙур. Шуға, кәйефем төшкән мәлдәрҙә тынысландырып, матур, йылы һүҙҙәре менән йыуатып, илһамландырып торған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Рәмилә Усман ҡыҙы Шәриповаға оло рәхмәтемде белдерәм.

Әлбиттә, туған телеңә һөйөү бала саҡтан, ғаиләнән башлана. Ошо донъяны әле бер ҙә аңламаған сабыйҙың әйткән беренсе һүҙҙәре йөрәктә мәңгегә уйылып ҡала. Минә лә туған телем - бишектә ятҡанда уҡ ишеткән башҡорт теле әсә һөтө менән һеңгән. Башҡортса һөйләшеүем, башҡорт булыуым менән бик ғорурмын.

Туған телемә, тормошҡа һөйөү тәрбиәләгәндәре, ҡыйын минуттарҙа хуплап торғандары өсөн атай-әсәйемә рәхмәтлемен. Башҡорт теленең артабан да ошондай тиндәр араһында тиң булыуын теләйем. Тиҫтерҙәремә араһында, ғаиләлә генә түгел, көндәлек тормошта, төрлө өлкәләрҙә лә башҡорт теле иң күп аралашҡан, заманса тел булһын ине тип тырышам. Гел башҡортса һөйләшәм!

**Дания ҒӘЗИЗОВА.**
**Өфө районы Шамонин ауылы.**

*✓ Иштуған ауылының исеме заманында бөтә республикала йыш яңғыраны. 80-се йылдарҙа ул һыуһаҡлағыс аҫтында ҡалырға тейеш ине. Бәхеткә күрә, төҙөлөш туҡталды. Әлеге ваҡытта тораҡ пункт икенсе һулыш кисерә.*



*МӘЛӘҮЕЗ РАЙОНЫ*

# ХАЛЫҠ ҮҘЕ ҺАЙЛАЙ

**Башҡортостанда Урындағы башланғыстарҙы хуплау программаһы старт алды. Быйыл был проектты бойомға ашырыуға республика бюджетынан 400 миллион һум бүлеү планлаштырыла.**




Был программаның үҙенсәлеге шунда: үҙҙәре йәшәгән тораҡ пункттағы көнүҙәк проблеманы хәл итеүҙә кешеләр үҙҙәре инициатива күрһәтеп, урындағы хакимиәт, эшҡыуарҙар менән тығыҙ бәйләнештә эшләп кенә ҡалмай, ә халыҡтан йыйылған, спонсорҙар биргән һәм бюджеттан бүленгән аҡсаны контролдә тотоуҙа туранан-тура ҡатнаша. Проект шулай уҡ бизнес вәкилдәре, юридик һәм физик шәхестәр ҡатнашыуы менән дә әһәмиәтле. Аҡсалата ярҙамдан тыш, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары төҙөлөш ваҡытында кәрәкле техника йәки материал менән тәьмин итә ала.

**Урындағы башланғыстарҙы хуплау программаһы Мәләүез районында ла әүҙем тормошҡа ашырыла.** Тап ошо проект ярҙамында ауыл биләмәләрендә һуңғы йылдарҙа бихисап эштәр башҡарылды. Былтыр, мәҫәлән, Даниловка ауылы халҡы юлды ремонтлау һәм төҙөкләндереү проекты менән ҡатнашып, 3,8 миллион һумға ауыл биләмәһендә юлды төҙөкләндерҙе. "Хыял" 3-сө балалар баҡсаһы дөйөм суммаһы 2,4 миллион һумға ҡыйыҡҡа капиталь ремонт эшләне һәм биләмәһенә юлды яңыртты. Бынан тыш, Сәйет, Аҡназар, Аптраҡ, Хлебодаровка һәм башҡа ауылдарҙа ла программа сиктәрендә социаль әһәмиәтле проекттар бойомға ашырылды. Быйыл да мәләүездәр уға дәррәү ҡушылды. Әлеге ваҡытта биләмәләрҙә йомғаҡлау йыйылыштары бара.

Иштуған ауылы биләмәһе хакимиәте башлығы Ринат Әлмөхәмәтов әйтеүенсә, Һыртлан ауылы халҡы программала ҡатнашып, Советтар Союзы Геройы Садиҡ Уйылдан улы Һайрановтың һәйкәле тирәяғын һәм Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының Хәтер таҡтаһын яңыртырға ниәтләй. Йыйылыш үткәреп, проектты раҫлағандар, ауыл халҡы араһынан эште ойоштороу өсөн инициатив төркөм һайлағандар, муниципалитет, халыҡ һәм спонсорҙарҙың финанс ярҙамы күләмен билдәләгәндәр, бюджет аҡсаһын бәрәкәтле һәм һаҡсыл файҙаланыу тураһында ҡарар ҡабул иткәндәр.

**Ә бына ошо уҡ биләмәнең Иштуған ауылы халҡы "Айыҡ ауыл" республика конкурсының район этабына дәррәү ҡушылды.** Унда ҡатнашыу тураһында улар граждандар сходында хәл итте һәм уның сиктәрендә үткәрелергә тейешле саралар планын ҡабул итте. Ни өсөн унда ҡатнашырға булған улар? Иҫерткес эсемлек менән мауығыусылар күбәйгәнме? Әллә уртаҡлашыр тәжрибәләре күпме?

- Быйыл конкурстың муниципаль этабында районның 16 ауыл биләмәһенән берәр ауыл ҡатнашты, - тип һөйләп китте биләмә хакимиәте башлығы Р. Әлмөхәмәтов. - Шулар араһында беҙ ҙә, иштуғандар ҙа, үҙ көсөбөҙҙө һынап ҡарарға уйланыҡ. Спиртлы эсемлек эскәндәр күбәйеүҙән түгел, дөрөҫөрәге, уртаҡлашырға тәжрибәбеҙ, күрһәтергә сәләмәт тормош алып барған кешеләребеҙ, татыу ғаиләләребеҙ, әүҙем йәштәребеҙ, быуындар бәйләнешен һаҡлаған өлкән быуын вәкилдәребеҙ бар. Иштуған ауылының исеме заманында бөтә республикала йыш яңғыраны. Үткән быуаттың 80-се йылдарында ул һыуһаҡлағыс аҫтында ҡалырға тейеш ине. Бәхеткә күрә, төҙөлөш туҡталды. Әлеге ваҡытта тораҡ пункт икенсе һулыш кисерә. Бөгөн унда 135 йортта 335 кеше йәшәй. Уның күбеһен 40-тан 70 йәшкә тиклемге йәштәгеләр тәшкил итә. Ауыл уртаһында почта, фельдшер-акушерлыҡ пункты, китапхана һәм мәҙәниәт йорто булған ижтимағи-мәҙәни үҙәк эшләй. Халыҡтың сәләмәт һәм айыҡ тормош алып барыуы өсөн социаль әһәмиәтле объекттарҙың да роле ҙур, тип әйтмәксемен. Сөнки буш ваҡыттарында унда күңеле теләгән шөғөл табырға була. Быларҙан тыш, ауылда биш йыл элек мәсет ҡалҡып сығыуы ла ҙур әһәмиәткә эйә булды. Дин юлына баҫыусылар, сәләмәт тормош алып барыусылар күбәйҙе, сөнки Ислам, тәү сиратта, иҫерткес эсемлек эсеүҙән тыйылыу бит.

Шәжәрә һәм ауыл байрамдарын үткәреү ҙә иштуғандарҙы тормошҡа айыҡ ҡараш менән ҡарауға, атай-олатайҙар аманат итеп тапшырған мәңгелек ҡиммәттәрҙе һаҡлауға йүнәлтелгән. Ғөмүмән, ауылда үткәрелгән сараларҙың барыһы ла һаулыҡты һаҡлау, эскелекте иҫкәртеү, сәләмәт тормош алып барыуға йүнәлтелде, уларҙа халыҡ әүҙем ҡатнашты. Уның һөҙөмтәһе булып, урамда "һалмыш" йөрөгәндәр, йәшереп иҫерткес эсемлек һатыусылар бөттө.

**Урындағы башланғыстарҙы хуплау программаһының һөҙөмтәлелеген бер тапҡыр һынаған Аптраҡ ауыл биләмәһенең Апас ауылы халҡы унда быйыл да ҡатнашырға уйлай.** Граждандар сходында улар ауыл зыяратының кәртәһен яңыртырға кәрәклеге хаҡында проект менән сығыш яһаған. Эйе, һәр ауылдың - бәләкәйме ул, ҙурмы - төрлө мәсьәләһе, мәшәҡәте бар. Мәҫәлән, Апас ауылы ни бары 33 йорттан тора. Унынының да яртыһы тиерлек буш тиһәң, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Бөтөнләй йәшәмәйҙәр түгел, әлбиттә. Яҙғы-йәйге осорҙа уларҙың тәҙрәләрендә лә ут ҡабына. Әммә кескәй генә булһа ла, проблемалары ҙур ауылдарҙан кәм түгел. Юл мәсьәләһе лә, клуб һәм интернеттың юҡлығы ла апастарҙың тормош сифатына туранан-тура йоғонто яһай. Был мәсьәләләрҙең киләсәктә хәл ителеүенә улар, һис шикһеҙ, ҙур өмөт бағлай.

- Республикала ауыл халҡының йәшәү кимәлен күтәреүгә арналған байтаҡ программа бойомға ашырыла. Шуларҙа ҡатнашып, күпме тораҡ пункт социаль-мәҙәни объекттарын төҙөкләндерҙе, урамдарына асфальт түшәне, балалар ихаталары, ял урындары барлыҡҡа килде. Беҙҙең ауыл да былтыр был программа сиктәрендә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары иҫтәлегенә мемориал булдырҙы. Халыҡтан 60 мендән ашыу аҡса йыйҙыҡ. Ауыл биләмәһе хакимиәте лә, ситтә йәшәгән яҡташтар ҙа арыу ғына ярҙам итте. Ауылыбыҙҙың бер йәме булып ултыра ул бөгөн. Быйыл да ошо программала ҡатнашырға заявка бирҙек. Конкурс аша үтһәк, зыяратты кәртәләйәсәкбеҙ, - ти ауыл старостаһы Гөләмзә Шәрипова.

Үҙ индәренә ҙур бурыс алып, апастар "Айыҡ ауыл" республика конкурсында ҡатнашырға ла йөрьәт иткән. Әлеге ваҡытта Аптраҡ ауыл биләмәһе хакимиәте менән берлектә халыҡ араһында эскелекте иҫкәртеү, сәләмәт тормошҡа ылыҡтырыу буйынса аңлатыу эштәре алып баралар, ҡаҙ өмәләре, кис ултырыу кеүек саралар үткәрәләр. Ауылдың иң оло кешеһе - 87 йәшлек Сәриә Ғәҙелшина - ҡул эше оҫтаһы. Шулай уҡ Зөлфиә Абсаликова, Зәйнәб Сәғәҙиеваны йәштәргә өлгө итеп ҡуйырға мөмкин.

Яңы йорттар барлыҡҡа килеүе ауылға яңы һулыш өҫтәгән. Марат Миңлебаев, оҙаҡ йылдар Себер тарафтарында эшләгән Фәрғәт Шәмсетдинов хаҡлы ялға сыҡҡас, ауылда өй һалып ингән. Хәйҙәр Абдуллин да тыуған ауылында нигеҙ яңыртырға ниәтләй. Гөләмзә Хантимер ҡыҙының тораҡ пункттағы һәр проблеманы яҡындан белеүе, уны хәл итеүҙә ярҙамлашыуы, халыҡ менән әүҙем эшләүе иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Уның башланғысында апастар биләмәлә үткән мәҙәни сараларҙа ҡатнаша. Ауылдың киләсәге өсөн борсолоп, бөгөнгөһөн хәстәрләп, тәртип, таҙалыҡ һаҡлау өсөн оло яуаплылыҡ тойғоһо менән йәшәй ул.

**Әйткәндәй, 2022 йылда Урындағы башланғыстарҙы тормошҡа ашырыу этаптары түбәндәгесә: 31 ғинуарға тиклем - проект һайлау буйынса халыҡ менән саралар үткәрелә; 11 мартҡа тиклем - электрон ғаризалар тултырыла; 12 апрелгә тиклем - баҫма төрҙә ғариза ҡабул ителә; апрель аҙағына тиклем - конкурс комиссиялары ултырыштары үткәрелә, еңеүселәр билдәләнә; майиюндә - килешеүҙәр төҙөлә, субсидия бүлеү тураһында Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары раҫлана; июль-сентябрь - проекттар бойомға ашырыла; октябрь-декабрь - объекттарҙы асыу саралары уҙғарыла.**

**Лена АБДРАХМАНОВА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Шәхси етешһеҙлекте көслө яҡтар менән алмаштырыу

Килемегеҙгә, оҙаҡ йәшәүегеҙгә, тормошҡа ҡыуаныуығыҙға ҡурҡыуҙарығыҙ һәм фобияларығыҙ йоғонто яһаған кеүек, уларға ҡайһы бер шәхси етешһеҙлектәрегеҙ һәм көсһөҙлөгөгөҙ ҙә йоғонто яһай. Улар ҡасандыр ҡуйылған установкалар һәм программалашыу һөҙөмтәһендә тыуа. Ниндәй шәхси үҙенсәлектәр тураһында һүҙ бара һуң? Мәҫәлән, бына беҙ үҙгәртергә теләгән бер нисә көсһөҙ һәм көслө яҡтарыбыҙ.

**Көсһөҙ яҡтарыбыҙ:**

**Эмоционаллек** - кеше ҡысҡырырға, асыуын сығарырға мөмкин.

**Ҡатып ҡалғанлыҡ**- ғәҙәти, өйрәнелгән эш тәртибе үҙгәрһә, көйһөҙләнә; үҙенең эшенә ҡыҫылмауҙарын өҫтөн күрә.

**Үҙ-үҙен яратыу** - уңышһыҙлыҡта башҡаларҙы ғәйепләп, барлыҡ маҡтауҙарҙы үҙенә алырға тырыша; күп маҡтана.

**Сәйерлек** - кеше кейемендә, ҡыҙыҡһыныуҙарында, үҙ-үҙен тотошонда ғәҙәти булмаған ғәҙәтте өҫтөн күрә.

**Намыҫһыҙлыҡ** - кеше илтифатһыҙ, алдаҡсы, башҡаларға ихтирамһыҙ.

**Ҡатылыҡ** - нимә кәрәкле тип уйлай, шуны эшләй.

**Мизантроп** - башҡаларҙың уңышына көнләшә.

**Ауырлыҡтарҙан ҡурҡыу** - бер урында ултыра алмай, өҙөп-йыртып эшләй, бөхтә түгел, тиҙ генә өмөтһөҙлөккә бирелә.

**Яй булыу** - дәртһеҙ, эште һүҙа, уға маҡсатҡа ынтылыш етмәй.

**Пессимизм** - кеше уңышһыҙлыҡҡа ышана, баҫылған.

**Көслө яҡтарыбыҙ:**

**Ғәҙел ҡараш** - кеше һәр саҡ тыныс һәм баҫалҡы.

**Яраҡлашыу** - кеше яңы шарттарға яраҡлашырға һәләтле.

**Баҫалҡылыҡ** - унда-бында тығылып бармай; кешегә күрһәтмәй генә үҙен юғары баһалай.

**Ҡанундарҙы тыңлау** - кеше ҡабул ителгән стандарттарҙы тота; оригиналь була ала, әммә саманан арттырмай.

**Иғтибарлылыҡ** - кәрәк булғанды эшләй, кәрәкмәгәнен эшләмәй.

**Һиҙгерлек** - башҡаларға ҡарата иғтибарлы, шәфҡәтле.

**Кешелеклелек** - кешеләрҙе ярата, уларҙы ғәфү итә белә.

**Ныҡышмалылыҡ** - көслө ихтыярлы, башлаған эшен аҙағына еткерә.

**Йүнселлек** - кеше тәүәккәл, инициативалы, ҡанатланған.

**Оптимизм** - кеше уңышҡа ышана, ыңғай фекер йөрөтә.

Һеҙҙең кеүек кешегә ниндәй һыҙаттар хас булырға тейеш түгел? Уларҙы ҡапма-ҡаршы һыҙаттар менән бергә күсереп алығыҙ, үҙегеҙҙә булған һыҙаттарҙы ла өҫтәгеҙ. **Артабанғы программалаштырыу өсөн түбәндәге инструкцияны бер нисә тапҡыр уҡығыҙ һәм иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ:**

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Үҙегеҙҙе кафела тип хис итегеҙ. Ҡулығыҙҙа батмус һәм һеҙ ризыҡ һайларға әҙерһегеҙ.
- Һәр блюдо исемлектәге көслө яҡтарығыҙға тап килә. Кәрәклеһен һайлап алығыҙ (күҙҙәрегеҙҙе асып исемлек менән сағыштырһағыҙ ҙа мөмкин).
- Ризыҡты ләззәтләнеп ашағанығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Был көслө яҡтар хәҙер минеке. Хәҙер тормошомдағы ижади миссияны яҡшыраҡ үтәй алам. Һәм был шулай", - тип, был картинаны юйығыҙ.
- "Мин тулыһынса үҙ аңымда", - тип күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Әле генә программаланған көслө яҡтарығыҙ ярҙамында тормоштоң теге йәки был хәл-торошонан сығыу хыялығыҙҙы күрегеҙ.

**Роберт СТОУН.**

**(Дауамы бар).**



## 31 ЯНВАРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.25 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Правда скрывает ложь". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 20.45 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 5.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Последняя женщина на Земле". [16+]**
**3.00 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**

## 1 ФЕВРАЛЯ
## ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.25 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Правда скрывает ложь". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Вечность между нами". [12+]**
**3.00 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**5.00 "Хазина". [12+]**

## 2 ФЕВРАЛЯ
## СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
21.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Правда скрывает ложь". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Как сумасшедший". [16+]**
**2.45 Спектакль "Караул, тещу украли!". [12+]**
**4.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 3 ФЕВРАЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.25 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Правда скрывает ложь". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Опустевший город". [16+]**
**3.15 Спектакль "Вот так случилось..." [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 4 ФЕВРАЛЯ
## ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 19.10 "60 минут". [12+]
14.15, 3.15 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
15.50 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
17.00, 0.55 Церемония открытия XXIV Зимних Олимпийских игр в Пекине.
21.00 Возможно все! [16+]
23.00 Х/ф "Миллиард". [12+]
4.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/ф "Моя родная Армия". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.00 Автограф. [12+]**
**14.00 Д/ф "Исток". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 4.30 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Дорога перемен". [16+]**
**2.30 Спектакль "Весело живем". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 5 ФЕВРАЛЯ
## СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 Формула еды. [12+]
9.00 Пятеро на одного.
9.50 Сто к одному.
10.45 Вести.
11.15 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.45 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Лыжные гонки. Женщины. 7,5 км/ 7,5 км Скиатлон.
13.45 Т/с "Девять жизней". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Не оглядывайся назад". [12+]
1.10 Х/ф "Слишком красивая жена". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Х/ф "Мать". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Золотые страницы башкирской классики. [12+]**
**19.00, 4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00 Х/ф "Большие надежды". [12+]**
**3.00 Спектакль "Лекарство от смерти". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 6 ФЕВРАЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

4.30 По секрету всему свету.
4.50 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
5.45 Утренняя почта с Николаем Басковым.
6.30 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Фигурное катание. Командные соревнования. Женщины. Мужчины. Произвольная программа. Короткая программа.
9.40 Местное время. Воскресенье.
10.15 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Петросян-шоу. [16+]
13.20 Т/с "Девять жизней". [16+]
17.50 "Танцы со Звёздами". Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Частный детектив Татьяна Иванова. Дорогая моя служанка". [12+]
3.15 Х/ф "Частный детектив Татьяна Иванова. Дольче вита по-русски". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Д/ф "Потерянный сон". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Сулпылар". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Ай текэ". [6+]**
**11.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Благодарен судьбе". Юбилейный концерт народного артиста РБ Радика Вальмухаметова. [12+]**
**19.15 Д/ф "Герой своего времени". Сосланбек Тавасиев". [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 4.00 Х/ф "Любовь". [16+]**
**1.45 Спектакль "Морозное дыхание метели". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**1 февраль "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**2 февраль "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**3 февраль "Балам"** (В. Емелева), спектакль-терапия. 16+
**4 февраль "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**5 февраль "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+
**6 февраль "Йүгер, Харис, йүгер"** (Э. Йәһүҙин), комедия. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**4 февраль "Йәшәгән, ти..."** (М. Ладо), драмеди. 12+
**5 февраль "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 14.00 6+
**6 февраль "Приключения Тома Сойера"** (М. Твен), мажара. 12.00, 18.00 6+
**"Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. 18.00 12+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 февраль "Бах. Музыкальная библия"** Р. Хәмиҙуллин (виолончель), В. Мортазин (орган). 6+
**5 февраль "Музыку слушаем вместе"**. 11.00 0+
**"Маленький принц"** (А. де Сент-Экзюпери), ғаилә өсөн тамаша. 15.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**1 февраль "Кисер мине, әсәй"** (Р. Батулла) моңһоу комедия. 12+
**5 февраль "Золушка"** (Д. Голубецкий), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**3 февраль Премьера! "В начале славных дел",** музыкаль-әҙәби лекторий. 6+
**4 февраль "Биғылый"** (С. Ильясов), булған хәл. 12+
**5 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия. 18.00 12+
**6 февраль "Маленькая история о маленьком Муке"** (С. Астраханцев), әкиәт. 12.00 0+
**"Ҡарауыл! Атай өйләнә?!"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**Учалы районында "Шахтер"** (Б.Ҡаһарманова) драмаһы менән гастролдәрҙә:
**31 ғинуар - Сәфәр;**
**1 февраль - Ахун;**
**2 февраль - Уральск;**
**3 февраль - Миндәк;**
**4 февраль - Ҡунаҡбай;**
**5 февраль - Өргөн** ауыл мәҙәниәт йорттарында. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Ғинуар - Февраль (Йомадиәл ахыр - Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 31 (28) дүшәмбе | 7:40 | 9:10 | 13:30 | 16:01 | 17:49 | 19:19 |
| 1 (29) шишәмбе | 7:38 | 9:08 | 13:30 | 16:03 | 17:51 | 19:21 |
| 2 (1) шаршамбы | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 16:05 | 17:53 | 19:23 |
| 3 (2) кесе йома | 7:34 | 9:04 | 13:30 | 16:07 | 17:55 | 19:25 |
| 4 (3) йома | 7:32 | 9:02 | 13:30 | 16:09 | 17:57 | 19:27 |
| 5 (4) шәмбе | 7:30 | 9:00 | 13:30 | 16:11 | 17:59 | 19:29 |
| 6 (5) йәкшәмбе | 7:29 | 8:59 | 13:30 | 16:12 | 18:01 | 19:31 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *"Бионорд" төрлө климат шарттарына һәм ҡулланыу өлкәһенә яраҡлаштырылған тиҫтәләгән рецепты берләштерә. Һәр аныҡ ҡала йәки төбәк өсөн бик күп критерийҙарҙы иҫәпкә алып, боҙлауыҡҡа ҡаршы материал эшләнә.*



*КЕМ АЛЫҠ?*

# УҠЫУСЫНЫҢ ЙӘН АҘЫҒЫ

**Быйылғы ярты йыллыҡҡа "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусылар араһынан "бәхетле билет" эләккәндәрҙең исемдәрен барлайыҡ. Иң тәүҙә сәмле, ғәмле, фекерле милләттәштәр өсөн йән аҙығы, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ифрат шатбыҙ һәм рәхмәтлебеҙ икәнде белдерәйек. Һеҙ - иң аңлылар, вайымлылар, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр. Шулай итеп:**




Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Й.Чуринға, Яҡшымбәт ауылынан Рузалиә Айҙарова, Баймаҡ районы Таһир ауылынан Клара Байраҡаева, Ишмырҙа ауылынан Иҙрис Маликов, Әхмәр ауылынан Рәмил Мәтинов, Әбделкәрим ауылынан Р. Йәнйегетова, Йәрмөхәмәт ауылынан Зөлфиә Мөкминова, Мерәҫ ауылынан Мәғрифә Әйүпова, Йомаш ауылынан Римма Шахмөхәмәтова, Ишбирҙе ауылынан Ләлә Иҙелбаева, Сибай ҡалаһынан А. Байғужина, Фәрзәнә Аймырҙина, Ейәнсура районы Кинйәбулат ауылынан Марат Маликов, Үтәғол ауылынан Йәүҙәт Усманов, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәбес ауылынан Фәрит Ғәбитов, Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Ф. Шәймәрҙәнова, Әбйәлил районы Аслай ауылынан Ф. Мансурова, Ҡужан ауылынан Ғәйфулла Хәйруллин, Әлмөхәмәт ауылынан Фирүзә Килдейәрова, Михайловка ауылынан Фәнүзә Вәлишина, Ташбулат ауылынан Хәлиҙә Баязитова, Бөрйән районы Яңы Усман ауылынан В. Мәжитова, Килдеғол ауылынан Гөлсинә Ҡунафина, Архангел районы Тәүәкәс ауылынан Роза Ғәббәсова, Хәйбулла районы Түбәнге Исмаҡ ауылынан Ханнан Мөхәмәтйәров, Байғусҡар ауылынан Марат Торомтаев, Илеш районы Үрге Йәркәй ауылынан Г. Мостафина, Өфө ҡалаһынан А. Ярмуллин, З. Ҡунаҡасова, Күгәрсен районы Хоҙайбирҙе ауылынан Вәлимә Аҙнағолова, Теләүембәт ауылынан Әлфинә Сыңғыҙова, Мәләүез районы Эткөсөк ауылынан Минзәлә Сангишева, Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылынан И. Шәйәхмәтов, Дыуан районы Арый ауылынан Зәйнәб Вәлиева, Учалы районы Озерный ауылынан Нәйрә Ишмөхәмәтова, Нәҡип Әйүпов, Ҡыйғы районы Йосоп ауылынан Ф. Солтанова, Ишембай районы Байғужа ауылынан М. Мөслимов, Уразбай ауылынан В. Камалов, Әлшәй районы Ҡармыш ауылынан М. Ғәбделмәнова, Шишмә районы Түбәнге Хәжәт ауылынан Г. Төхвәтуллинаға - **күренекле шағирә Зөлфиә Ханнанова үҙе тәржемә итеп баҫтырып сығарған "Шубуршун һәм уның дуҫтары"** (авторы белорус яҙыусыһы Алесь Карлюкевич) **тигән китапты бүләк итә.**

Балаҡатай районы Яңыбай ауылынан Менәүәрә Мөхәмәтғалина, Мәләүез ҡалаһынан Сәйфулла Әмиров, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Һәҙиә Әбдрәшитова, Иглин районы Түбәнге Ләмәҙ ауылынан Хөмәйрә Зинурова, Әбйәлил районы Салауат ауылынан Мәрхәбә Ноғоманова, Учалы районы Миндәк ауылынан Флүрә Тайфуроваға - **эшҡыуарҙар Миңзәлә һәм Кадурий Фазлетдиновтар Мәүлит Ямалетдиновтың "Ҡөрьән сүрәләренә шиғри аңлатмалар" китабын бүләк итә.**

Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылынан Радик Солтанғолов, Татлыбай ауылынан Ф. Йәнтүрина, Билал ауылынан Вәхит Әминев, Йомаш ауылынан Миңлебикә Янбаева, Иҫке Сибай ауылынан Р. Сәлимов, Көйөргәҙе районы Яҡшымбәт ауылынан Зиннәтулла Аллағыуатов, Ишембай ҡалаһынан Р. Мөхәмәтов, Ишембай районы Һайран ауылынан Рәүзилә Иҫәнова, Сибай ҡалаһынан И. Бикмәтов, Баҡалы районы Иҫке Ҡатай ауылынан Нуризә Ситдиҡова, Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылынан Рәйсә Йосопова, Күгәрсен районы 2-се Төҡәт ауылынан Рәшит Байғөбәков, Асҡын районы Асҡын ауылынан Ф. Юнысова, Өфө ҡалаһынан Хәлимә Хәләпова, Нефтекама ҡалаһынан Д. Әхмәҙиев - **Ә. Әсфәндиәровтың "История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий" китабы менән,**

Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылынан Гөлгөнә Тотманова, Йомаш ауылынан Фәйрүзә Ярҡынбаева, Ишмөхәмәт ауылынан Мәрзиә Моталова, Мерәҫ ауылынан Әхәт Хәсәнов, М. Зәйнәғәбдинова, Билал ауылынан Рафиҡ Әбйәлилов, Ғүмәр ауылынан Нурзиә Исчурина, Ниғәмәт ауылынан Зифа Мөхәмәтйәнова, Учалы районы Истамғол ауылынан А. Ғәйетҡолова, Мәҫкәү ауылынан Флүрә Садыҡова, Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан Диана Шәйәхмәтова, Бикес ауылынан Сәйҙә Хәсәнова, Ишембай районы Байғужа ауылынан Сәбилә Ҡорбанғәлиева, Күмертау ҡалаһынан Рәйсә Искәндәрова, Хәйбулла районы Өфө ауылынан Фәриҙә Шәрипова, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Ш. Нәҙерғолова, Ғафури районы Красноусол ҡасабаһынан Р. Рәхимова, Салауат районы Лағыр ауылынан Земфира Йәнтүрина, Көйөргәҙе районы Кинйәбай ауылынан Мәймүнә Сәғитова, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан З. Низамова, Асҡын районы Ҡартҡиҫәк ауылынан Фәнирә Нәбиуллина - **2022 йылға Башҡортса дини календарь,**

Баймаҡ районы Ишмөхәмәт ауылынан Сәфәрғәли Ярмуллин, Йомаш ауылынан Вилүрә Барлыбаева, Көйөргәҙе районы Ермолаево ауылынан Урал Ҡәйүпов - **Рәшит Шәкүрҙең "Ерҙең тере хәтере",**

Әбйәлил районы Асҡар ауылынан Дилара Мурзина, Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылынан Рауил Ҡотлоғужин - **"Урал батыр" әкиәттәр китабы менән бүләкләнә.**

Ә бына бөтөн коллективы менән "Киске Өфө"гә яҙылған Миәкә районы Тамъян-Таймаҫ ауылының "Аҡтирәк" ағинәйҙәр ҡоро **"Башҡорт энциклопедияһы"ның 7 томлығы менән бүләкләнә.**

**Иҫкәрмә:** китаптарҙы Әбйәлил, Бөрйән, Учалы, Белорет райондарынан (Белорет почтампына ҡарай), Баймаҡ, Хәйбулла, Йылайыр райондарынан һәм Сибайҙан (Сибай почтампына ҡарай), Ейәнсура, Күгәрсен, Мәләүез, Көйөргәҙе (Мәләүез почтампына ҡарай), Салауат, Мәсетле, Дыуан, Ҡыйғы райондарынан булған бүләкләнеүселәр үҙҙәренең почтальондары аша алыр, ҡалған райондарҙың бүләкләнеүселәре балалары, туғандары, таныштары аша алдырыу сараһын күрһен ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.

**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ғинуар айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө районы** Шамонино ауылынан Ынйы Вәлиева, Мәүлиҙә Тимербаева, Рәйлә Ҡалҡаманова, Флүрә Сулпанова, Лилиә Шәнгәрәева, Миңлегөл Ҡасимова, **Бөрйән районы** Иҫке Монасип ауылынан Таңһылыу Ҡыуандыҡова, Луиза Юлдашева һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла ныҡлы һаулыҡ, бәхетле оҙон ғүмер, эштәрегеҙҙә уңыштар, яҡшы уй-ниәттәрегеҙҙең тормошҡа ашыуын, ҡыуаныс-шатлыҡтарға төрөнөп йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*



# "БИОНОРД" ЗЫЯНЛЫ ТҮГЕЛ

**Рәсәй ҡалалары йылдан-йыл боҙлауыҡҡа ҡаршы заманса реагенттар ҡулланыуға күсә. "Бионорд" һәм шундай составлы ҡатнашмалар илдә - 10 йылдан, ә сит илдәрҙә ярты быуаттан ашыу ҡулланыла.**

"Бионорд" - сауҙа атамаһы. Ул төрлө климат шарттарына һәм ҡулланыу өлкәһенә яраҡлаштырылған тиҫтәләгән рецепты берләштерә. Һәр аныҡ ҡала йәки төбәк өсөн бик күп критерийҙарҙы, шул иҫәптән климатты һәм ҡулланыу урынын иҫәпкә алып, боҙлауыҡҡа ҡаршы материал эшләнә. Мәҫәлән, Новосибирск өсөн эшләнгән "Бионорд" Дондағы Ростовта ҡулланылғанынан составы буйынса ныҡ айырыла.

Һәр "Бионорд" нигеҙен минераль тоҙҙар: натрий хлориды (аш тоҙо) һәм хлорлы кальций тәшкил итә. Ике тоҙ ҙа аҙыҡ-түлек һәм фармацевтика сәнәғәтендә ҡулланыла. Быйдай состав дүртенсе, кеше организмына иң зарарһыҙ йоғонто яһау класына индерелә. Мәҫәлән, аш тоҙо һәм аш содаһы өсөнсө хәүеф класына ҡарай. Юл рецептураһы өсөн, нигеҙҙә, юғары сифатлы тоҙ һәм хлорлы кальций төрлө нисбәттә ҡулланыла, уларға коррозия ингибиторы һәм биофиль матдәләр өҫтәлә. Был компоненттар барыһы ла һыуҙа ирей. Ҡайһы берҙә өҫтәмә рәүештә мәрмәр онтағы ҡушыла. Эксперттар белдереүенсә, ҡулланыу буйынса билдәләнгән норманы һәм инструкцияны аныҡ үтәгәндә "Бионорд" тирә-яҡ мөхиткә зыянһыҙ. Техник тоҙ, йәки тоҙ һәм ҡом ҡушылған ҡатнашма менән сағыштырғанда, был материал тупраҡҡа һәм үҫемлектәргә зыян итмәй, сөнки унда натрий хлориды аҙыраҡ.

Реагент составына органик компоненттар ҙа инә, улар тупраҡҡа эләккәс, һыуға һәм углекислый газға әйләнә. Ҡалаларҙың тулыһынса бындай составты ҡулланыуға күсеүе менән оҙаҡ йылдар тоҙ-ҡом ҡатнашмаһы ҡулланыу һөҙөмтәһендә әселәнгән тупраҡтың әселек кимәле түбәнәйеүе күҙәтелә. Мәскәүҙә бындай ҡатнашмаларҙы 9 йыл ҡулланыу һөҙөмтәһендә тупраҡ әселегеге өс тапҡырға кәмегән. Тире-аяҡ кейемдәре сәнәғәтенең фәнни-тикшеренеү институты һығымтаһына ярашлы, аяҡ кейемдәре өсөн "Бионорд" ирегән ҡар кеүек. Бары тик өйгә ҡайтҡас, аяҡ кейемен йылы һыу менән йыуып, киптерергә кәрәк. "Бионорд"тың автомобилдәрҙең лак-буяу ҡатламына ла зыяны юҡ. Аллергик реакцияларға килгәндә, Роспотребнадзорҙың лаборатория тикшеренеүҙәре нигеҙендәге һығымтаһына ярашлы, ул аллергия ла барлыҡҡа килтермәй, тын юлдарына ла ултырмай, тирегә лә үтеп инмәй.

Ә быға тиклем ҡулланылған ҡомло-тоҙло ҡатнашма - ул бысраҡ сығанағы, һәм урамдарҙы унан таҙартыуға боҙлауыҡҡа ҡаршы тотонолған аҡсанан күберәк сығым һәм тырышлыҡ талап ителә. Яҙғыһын ҡом туҙанға әүерелә, һуңынан халыҡтың үпкәһенә ултыра. Шулай уҡ юл ситтәрендә йыйыла, төрлө микроорганизмдарҙы, шул иҫәптән үҫәҙ бәшмәктәре спораларын, бактериялар һ.б. тыуҙыра. Һуңынан улар туҙан менән бергә кеше организмына эләгеп, аллергия барлыҡҡа килтерә.

2021-2022 көҙгө-ҡышҡы миҙгелдә урам-юл селтәрен боҙлауыҡҡа ҡаршы эшкәртеү өсөн ҡала хакимиәте Урал боҙлауыҡҡа ҡаршы материалдар заводынан 12,6 мең тонна "Бионорд" һәм минераль тоҙ (галит) һатып алған. Предприятие продукцияһы ҡулланыуға рөхсәт документацияһына, шулай уҡ дәүләт экологик экспертизаһының ыңғай һығымтаһына эйә.

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# МИЛЛИ ТЕАТРҘАР БЕРЛӘШӘ

**Күптән түгел Петразаводск ҡалаһында Рәсәй Милли театрҙары ассоциацияһын булдырыу тураһында ҡарар ҡабул ителде һәм яңы ойошманың Советы составына республикабыҙҙан М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры директоры Иршат Фәйзуллин да инде. Иршат Ишбулат улы менән был ижади берләшмәнең алдына ҡуйған маҡсаттары, киләсәккә пландары тураһында әңгәмәләштек.**



**➔ Бындай ойошма булдырыу ихтыяжы ниҙән барлыҡҡа килде?**

- Рәсәй Милли театрҙар ассоциацияһын булдырыу тураһында ҡарар быйыл 10 ғинуарҙа Петразаводскиҙа ҡабул ителде. Унда илдең 31 театры вәкилдәре ҡатнашты һәм тәү сиратта был яңы ойошма беҙгә гастролдәр ойоштороу, тәжрибә уртаҡлашыу, белем камиллаштырыу, хеҙмәттәшлек итеү, уртаҡ мәсьәләләрҙе бергәләшеп хәл итеү йәһәтенән файҙалы булыр, тигән уй беректерҙе. Башҡаларынан юридик ойошмаларҙы берләштереүе менән дә айырылып тора ул.

Дөйөм алғанда, Рәсәйҙә 70-кә яҡын милли театр бар һәм тупланыу, һис шикһеҙ, тик ыңғай һөҙөмтәләргә генә килтерәсәк. Иң мөһиме, ул төбәктәге театрҙарға Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларына гастролдәр ойошторорға ярҙам итеү мәсьәләһен хәл итергә тейеш. Сөнки быға тиклем һәр театрға сығыш яһау өсөн майҙансыҡты үҙе эҙләп табырға, шул театр менән килешеү төҙөргә һәм уға аренда өсөн ҙур ғына сумма түләргә тура килә ине. Милли театрҙар ассоциацияһы әле был мәсьәләне ыңғай хәл итергә өлгәшеп килә, тиҙҙән тәғәйен майҙансыҡ булдырыласаҡ. Бынан тыш, театр белгестәрен уҡытыу, квалификацияларын күтәреү буйынса ла әүҙем генә эштәр алып барыласаҡ. Быйыл Санкт-Петербург ҡалаһында техник цехтар етәкселеге өсөн уҡытыу программаһы ҡаралған, улар Александринский театр базаһында яҡтыртыу, тауыш биреү ҡорамалдары буйынса белемдәрен камиллаштырып ҡайтасаҡ. Шулай уҡ Ҡаҙанда "Науруз" фестивале, Өфөлә март айында уҙғарыласаҡ "Арт-Ҡоролтай" сиктәрендә лә төрлө уҡытыу программалары тормошҡа ашырыласаҡ. Беҙгә Санкт-Петербургтан Милли театрҙар мәктәбе уҡытыусылары килеп, менеджмент буйынса уҡытасаҡ.

Ассоциацияның киләһе конференцияһы йәйгеһен Яҡутстанда уҙғарыласаҡ һәм унда хәл ителәһе мәсьәләләр ентекләберәк тикшерелер, фекер алышырбыҙ тип уйлайым. Сөнки әле беренсе генә йыйында барыһын да уртаға һалып һөйләшеп өлгөрөп булманы. Милли театрҙар өсөн туған тел, мәҙәниәтте һаҡлау һәм үҫтереү, үҙ телендә сығарған спектаклдәрҙе ҡараған тамашасылар, милли драматургия булыуы кеүек электән килгән һорауҙар ҙа актуаль. Был турала ла бер-беребеҙҙең фекерен тыңлау, тәжрибә уртаҡлашыу ҡамасауламаҫ ине.

Әлегә Рәсәй Милли театрҙары ассоциацияһына инеүҙең Башҡортостан театрҙары өсөн файҙаһы тураһында аныҡ яуап биреүе ауырыраҡ, әммә тәү сиратта был ил кимәлендә билдәлелек яуларға бер ярҙам булыр, моғайын. Әлбиттә, беҙҙең М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры күптән билдәле, шулай ҙа киңерәк аудиторияны ижадыбыҙ, башҡорт драматургияһы менән таныштырыу мөмкинлеге асылды, тип өмөтләнәм. Был ойошманың Советы составына инеүем дә үҙебеҙҙең республика театрҙарының мәнфәғәтен яҡларға, уларҙың һорауҙарын Советҡа еткерергә һәм ыңғай сиселеш табырға ярҙам итеү өсөн.

Киләсәктә Милли театрҙар ассоциацияһы төрлө фестивалдәр, форумдар үткәреүҙе лә ойоштороr, моғайын. Беҙгә 2023 йылда Будапешт ҡалаһында уҙғарыласаҡ Театраль олимпиадаға Рәсәйҙән барған 6-7 милли театр иҫәбенә эләгеү мәсьәләһе лә мөһим. Ә быны өсөн театр донъяһында мәғлүмәтле булырға һәм сифатлы, матур спектаклдәр сәхнәләштерергә кәрәк.

**➔ Әйткәндәй, театр тамашасыларын һөйөндөрөр яңылыҡтарығыҙ бармы?**

- Беҙҙең театрҙың тоғро тамашасылары 27 ғинуарҙа уҙғарылған "Драмквадратик" балалар һәм үҫмерҙәр өсөн театраль лаборатория" мәғариф проекты йомғаҡлау сараһын да йылы ҡабул итте. Был тамашаны ойоштороу өсөн башта балалар йәш драматург Ангиза Ишбулдина етәкселегендәге драматургия түңәрәгендә шөғөлләнде һәм пьесалар яҙҙы, шунан төрлө театр актерҙары ҡатнашлығында үҙенсәлекле генә бер сәхнәләштереү килеп сыҡты. Ә бына 4 мартта башҡорт мәғрифәтсеһе Ризаитдин Фәхретдин әҫәре буйынса "Әсмә" спектаклен тәҡдим итмәксебеҙ, уның режиссеры Зиннур Сөләймәнов. Бик фәһемле драма ҙур сәхнәлә ҡуйыла, бик күп актерҙар ҡатнаша, матур костюмдар әҙерләнә. Шулай уҡ театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов Зифа Ҡадырованың "Яраларың менән яратырмын" тигән әҫәре буйынса эш башланы, һөҙөмтәһен тамашасылар апрель-май тирәһендә баһалай алыр. Фирғәт Ғарипов та әле материал һайлай, моғайын, үткән быуаттың 90-сы йылдарында барған матур спектаклдәрҙең береһе булыр был.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Милли театрҙар ассоциацияһын булдырыу башланғысы менән Рәсәйҙең беренсе милли театры - Александринский 2019 йылда уҡ сыҡҡайны. Уның художество етәксеһе, Рәсәйҙең халыҡ артисы Валерий Фокин ассоциация булдырыу дәүләт кимәлендә әһәмиәтле эш, тип билдәләгәйне. Нәҡ быйыл, илдә Халыҡ сәнғәте һәм рухи мәҙәни мираҫ йылы уҙғарылғанда, уны тормошҡа ашыра башлау илдәге милли театрҙарҙың эшен яңы кимәлгә күтәрергә булышлыҡ итер, моғайын.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ...

# КИЛДЕЛЕ-КИТТЕЛЕ ҺҮҘЛЕК

**Яҙмаларымды "Уйынлы-ысынлы, килделе-киттеле һүҙлек" тип атаным. Исеменән күренеүенсә, был һүҙҙәргә аңлатмаларҙан логик нигеҙләү эҙләргә кәрәкмәй. Рәхәтләнеп көлһәгеҙ йә һис юғы йылмайып ҡуйһағыҙ, шат булырбыҙ. БыЛтырғы 49-сы һанда "Б" хәрефенә миҫалдар килтергәйнем. Яҙмаларымдың В һәм Г хәрефтәренә лә сират етте:**

## В

**Вазифа** - ошо исемде йөрөрөү вазифаһын башҡарыусы.
**Вайымһыҙ** - вайымы юҡ кеше.
**Ваҡыт** - ваҡ-ваҡ өлөштәргә, минуттарға, секундтарға бүленгән миҙгел.
**Ватыҡ** - емерелгән ваҡыт.
**Ваучер** - вау, күпме червонецтар!
**Веранда** - урбанизацияланған солан.
**Ветеран** - яраларын елдә уңалтыусы.
**Вирус** - бер ус.
**Витамин** - бел тәмен.
**Вәғәз** - вәғәҙә биреп тә, үҙ һүҙендә тора алмаусының хәйләһе.
**Водитель** - тәндәрҙе йөрөтөүсе.

## Г

**Геродот** - башҡорттарҙың хушбуйы.
**Гимназия** - Азияға гимн йырлаусы.
**Гипербола** - сиктән сыҡҡан бола, инҡилап.
**Грамота** - бер нисә грамм ҡағыҙ отоусы.
**Графа** - графтың ҡатыны.
**График** - бәләкәй граф.
**Гуляш** - "йөрөмтәл" аш.
**Гуманизм** - гөманлылар идеологияһы.
**Гусар** - ҡаҙҙар армияһы.
**Гүр** - үлгәс, күр.

(Дауамы. Башы 2021 йылдың 47-се һанда).

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУРҠАҠТЫ КҮП ҠЫУҺАҢ...

## батырға әйләнер

Кейәүең ҡыуалаһа - ишек бауын тот, улың ҡыуалаһа - түргә менеп ултыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бөйөк кешеләр үҙ алдына маҡсат ҡуйып, ҡалғандар үҙ теләгенә эйәреп йәшәй.

**(У. Ирвинг).**

Туй балдағы - сылбырҙың тәүге өлөшө.

**(Жарко Петан).**

Бөйөк кешеләр һауала аҫылынып тормай, кешелектән дә айырылмаған, улар беҙҙән бер башҡа юғары, әммә аяҡтары беҙҙеке менән бер кимәлдә, сөнки улар ҙа беҙ йөрөгән ерҙән атлап йөрөй.

**(Блез Паскаль).**

Хаталарҙан һаҡланыуы ауыр, әммә уны таный белеү - үҙе бөйөклөк.

**(Жан Франсуа Рец).**

Ҡатын-ҡыҙға оло хөрмәт менән ҡараған ир-егет... ҡатын-ҡыҙ араһында уңыш ҡаҙанмаусан.

**(Джозеф Аддисон)**

Шатлыҡ көтөп йәшәү үҙе шатлыҡ.

**(Г. Лессинг).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ кисен миңә дуҫым шылтыратты. Тәүге һорауы шул булды: "Хәлдәрең нисек?" Мин уйлап та тормаҫтан: "Эс боша", - тип әйтеп һалдым. Дуҫым: "Теләйһеңме, мин хәҙер һиңә киләм һәм һөйләшербеҙ", - тине. Мин "Кил", тинем, һәм ул ун биш минуттан минең өйҙә ине инде. Дуҫым менән төнө буйы һөйләшеп ултырҙыҡ, мин уға үҙемдең аһ-зарымды түктем. Ысынлап та, проблемаларым байтаҡ йыйылып киткәйне. Дуҫым мине тыңланы, сабыр ғына кәңәштәрен бирҙе, ниндәй проблеманы нисегерәк хәл итеү юлдарын өйрәтте. Миңә еңел булып ҡалды. Шунан дуҫым эшкә китергә йыйына башланы. Миңә уңайһыҙ булып китте. "Ниңә һин үҙеңдең эшкә барырға тейешлегең тураһында әйтмәнең, мин һине төнө буйы үҙемдең хәбәрем менән йонсоттом", - тинем дуҫыма. Дуҫым йылмайҙы һәм: "Дуҫтар ни өсөн кәрәк һуң!" - тине. Дуҫымды машинаға оҙатҡанда: "Ә һин миңә кисен ниңә шылтыратҡайның һуң?" - тип һорарға баш етте. "Мин врачта булғайным һәм ул миңә бик ҡурҡыныс диагноз ҡуйҙы, - тине дуҫым. - Ләкин беҙ был хаҡта аҙаҡ һөйләшербеҙ".**

**Мин ошо осрашыуҙан һуң байтаҡ уйланып йөрөнөм. Был хәл миңә ныҡлы һабаҡ булды. Мин хәҙер үҙ проблемаларымды шаштырыуҙан туктап, яҡшы хәбәрҙәр менән ләззәтләнәм. Үҙем яратҡан кешеләр, дуҫтарым менән аралашҡанда аһ-зар һөйләп түгел, ә ваҡытты файҙалыраҡ итеп үткәрергә тырышам..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22004

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
28 ғинуар 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905

Тиражы - 3387
Заказ - 108